ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-6 февраль - март (шаҡай - буранай)

2020

№9 (895)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 мартҡа тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" өс айға 338 һумға төшәсәк. Бергә булайыҡ!***


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Алдынғы тәжрибәләр...**
тыңлана, әммә ҡулланылмай түгелме?

6

**Фатир һатып алырҙан алда...**

баҙар хәлдәрен, хаҡтарҙы ентекләп өйрән
8-9

**Донъя бизмәне бәүелә шул...**

11

**Йәмәғәтселәр әүҙемлеге...**
ошолай ҙа баһалана ала


15

**ТВ-программа** 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ауыл, ҡала граждандарының әүҙемлеген нисек күтәрергә?

***Рәфис Ҡарағолов, Шишмә районы Ҡара Яҡуп ауыл хакимиәте башлығы:*** Элекке кеүек колхоз-совхоздың хеҙмәт шауы гөрләп тормағас, бөгөн ауылдарҙы тынлыҡ баҫты, урамда кеше әҫәре күрмәҫһең. Һәр кем үҙ хәстәре менән мәшғүл. Өҫтәүенә, ауылдарға ла хәҙер интернет шауҡымы ҡағылды, күптәр көндәр буйы виртуаль донъя гиҙә. Күмәкләп башҡара торған берәй эш килеп сыҡһа, шылтыратып, эҙләтеп, саҡҡа саҡыртып алаһың. Дөйөм эшкә ҡарата йыш ҡына битарафлыҡ менән осраşырға тура килгеләй, хатта был эш туранан-тура кешенең үҙ мәнфәғәтендә булыуға ла ҡарамаҫтан. Ошоға бәйле, Бабик ауылында булған бер осраҡ иҫкә төшә. Бында беҙ тулыһынса һыу үткәргесте алмаштырырға булдыҡ. Был турала көн алдын йыйылышта халыҡҡа хәбәр ителде, иғландар яҙып эленде. Экскаватор килеп, траншея ҡаҙый башланы. Унан ошо үҙәк үткәргестән һәр кемдең йортона траншея ҡаҙып сығырға кәрәк ине. Ошо этапҡа килеп терәлгәс, эш туҡтап ҡалды. Ике аҙна буйы һыуһыҙ ултырһа ултырҙылар, тик ҡулына көрәк тотоп, траншея ҡаҙырға сыҡмай ултырыусылар ҙа булды. Әҙерҙе көтөп ултыра торған замандар үтте шул, халыҡ шуны аңларға тейеш. Үҙенә кәрәкте үҙ ҡулдарың менән эшләп алырға бурыслыһың. Ауыл активына таянып, аңлатыу эштәре алып барғандан һуң дәррәү генә йыйылышып, эште бик матур итеп тамамлап та ҡуйғайныҡ шул саҡ. Аҙаҡ бындай әүҙемлек уларҙың үҙҙәренә лә оҡшап китте хатта.

Күп йылдар эшләү дәүерендә шуға инанғанмын: халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә эшләр өсөн ауыл активына таянырға кәрәк, ә уларҙың иһә халыҡ араһында ихтирам менән файҙаланған кешеләр булыуы мотлаҡ. Бөгөнгө көндә мин тап ана шундай лидерҙар ярҙамына таянам да инде. Беҙҙең ауыл биләмәһендә 10 депутат, 4 ауыл старостаһы, ике мәсеттә ике имам, ағинәйҙәр, шулай уҡ зыярат-ерләү мәсьәләләре өсөн яуаплы 4 кеше бар. Төҙөкләндереү, йыйыштырыу һәм килеп тыуған башҡа төрлө эштәрҙе ойоштороуҙы бергәләп атҡарабыҙ, уларға тулыһынса ышанырға була. Бындай берҙәмлек, урындарҙа халыҡ инициативаһы быйыл, Тораҡ биләмәләре эстетикаһы иғлан ителгән йылда айырыуса кәрәк. Был йәһәттән ауыл биләмәһе халҡының һынатмаяғына ышанам, сөнки һәр кем үҙе йәшәгән йорт-ҡаралтыһын төҙөклөктә тоторға, бер-береһенә өлгө булырлыҡ матур итеп йәшәргә ынтыла

***Гүзәл МОНАСИПОВА, Баймаҡ районының "Аҙинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Колхоз, совхоздар бөткәс, ауыл халҡы яйлап көтөп ултырыу психологияһынан арынды: кемдер килеп эшләп бирер тип ятыуҙан файҙа юҡлығын аңланылар, ниһайәт. Битарафлыҡ һәм пассивлыҡты еңеү күп йәһәттән һәр төрлө саралаrҙы ойоштороусыларҙан да торалыр, тип уйлайым. Улар эште ниндәй ниәт менән ойоштора: мине күрһендәр, маҡтаһындар типме, әллә "Беҙ булдырабыҙ!" тип, башҡаларҙы изге уй-ниәт менән үҙ артынан эйәртеп, әйҙәүсе булып торамы? Әйҙәүсе - фекерҙәре тап килгәндәрҙе бергә туплаусы, ыңғай һөҙөмтәгә алып бара алған команда булдырыусы, формаль булмаған лидерҙарҙың халыҡ араһында абруйын һанлаусы, уларҙан көнләшмәүсе, ә киреһенсә, үҙенә теләктәш итеп алыусы һәм битараф булғандарҙы шундай лидерҙар аша артынан эйәртеүсе.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

## СЕРГЕТЫШТЫҢ СЕРЕ...

### ярыш атын күҙҙән һаҡлауҙа



**Беҙ ир-егеттәр байрамы тип ҡабул итеп өйрәнгән 23 февраль көндө Бөрйән районында 51-се тапҡыр ҡышҡы ат сабыш бәйгеһе үтте. Беҙҙе һоҡландырған да, аптыратҡан да, кинәндергән дә күренештәр байтаҡ булды был сарала. Берҙән, был тиклем ир-егеттәр, етмәһә, айыҡ ир-азаматтар былай күпләп йыйылған йыйындарҙы күптән күргән юҡ ине - шул аптыратты. Тимәк, ҡандарында әле ысын ир-егеттәр дәрте, хәтерҙәрендә атай-олатайҙар дарманы һаҡлана. Икенсенән, ярыш аттары һәм уларҙың саналары район ағинәйҙәренең күҙ нурҙарын түгеп әҙерләгән сергетыш, кейеҙ, ҡорамаһы менән биҙәлгәйне. Баҡтиһәң, Бөрйән районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары етәкселәре Рәшиҙә Ғиззәтуллина әйҙәүенә ҡушылып, саналы һәм һыбай аттарҙың биҙәлешенә конкурс ойошторοп, быйылғы ярышҡа матур бер яңылыҡ индергән икән. Рәшиҙә Хәй ҡыҙы менән тап ошо турала әңгәмәләштек.**

**(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).**

12+

✓ *Ә дәүләт киләһе йылдан пенсияға аҡса туплауҙың яңы программаһын - "Гарантиялы пенсия планы"на старт бирәсәк. Тик беҙҙә бит алды-артты байҡамайыраҡ кисеүгә һикереү ғәҙәте бар - әле лә ана шундайыраҡ хәл тыуа.*



*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ҠАРТЛЫҠ НИ ХАҠ?

**Бөгөнгө быуын пенсионерҙар хаҡында һүҙ бармай. Әҙме-күпме, яҡшымы-насармы - беҙҙең быуын барына риза булып (ә риза булмай ҡайҙа бараһың!) үҙ көнөбөҙҙө күреп йәшәп ятыла. Эшләй алғандары - эшләй, эшләмәгәндәренең пенсияһын индексациялап, дәүләт аҙмаҙ өҫтәгеләп тора - ләкин был барыбер етмәй, сөнки йылылыҡ, электр энергияһы, коммуналь хеҙмәттәр өсөн сығымдар ай һайын арта ғына бара. Өҫтәүенә, аҙыҡ-түлеккә хаҡтар артынан да күҙ эйәрмәй, ә инде дарыуҙар хаҡында әйтергә лә түгел. Был йәһәттән иң яҡшыһы - ғөмүмән, аптека системаһына бойкот белдерергә лә, традицион халыҡ дауалау ысулдарына һәм шифалы үләндәргә күсергә!**

Ләкин һүҙ әле бая әйткәнемсә, беҙҙең хаҡта түгел, ә бөгөн эшләп йөрөгән йә иртәгә үҙаллы тормош башлаясаҡ беҙҙең балаларыбыҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ - бөгөнгө йәштәр һәм киләсәк быуын хаҡында. Улар ҙа бит, бирһен Хоҙай, бер көн килеп пенсия йәшенә етер, тик бына улар заманына илдең биле нығынып, көс-ҡеүәте бер аҙ арта төшмәҫме икән инде? Исмаһам, беҙҙең балалар кеше иседе-есеменә лайыҡ етеш тормош күрһен ине... Үкенескә, бәғерҙе тырнап торған шик-хәүеф бер ҙә генә таралырлыҡ түгел, киреһенсә, арта ғына, сөнки һуңғы ошо бер нисә йыл эсендә пенсия системаһын нисек кенә әүәләмәне эшем эйәһе чиновниктар. Киләсәктә өлкән быуын хәстәрҙәрен дәүләт иңенән алып, граждандарҙың үҙ елкәһенә ауҙарыу өсөн бөгөн бөтәһе лә эшләнә, буғай. Йүнле эш урындары булмауға ҡарамаҫтан, пенсия йәшен арттырыу, эшләп йөрөгән пенсионерҙарға индексацияны туҡтатыу, тупланма фондты юҡҡа сығарып, киләһе йылдан "Гарантиялы пенсия планы" (ГПП) тип аталған программаны эшкә ҡушырға ниәтләү һ.б. Тик барыбер халыҡты ла, власть тарафтарын да аҙмы-күпме ҡәнәғәтләндерерҙәй уртаҡ бер вариантҡа килә алғандары юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәйҙә, өлкән быуын артыҡ тамаҡ категорияһы булып иҫәпләнгән илдә, ундай "уртаҡ вариант"тың булыуы мөмкин дә түгел, күрәһең. Күптән түгел "Сафмар" дәүләттеке булмаған пенсия фонды тарафынан үткәрелгән тикшеренеү һөҙөмтәләре бөгөн эшләп йөрөгән быуынды ла шатлыҡлы ҡартлыҡ көтмәй тип фекерләргә нигеҙ бирә. Уртаса 41 йәштәге мең ярым кешенән алынған яуаптарҙа шул халыҡтың 68 проценты киләсәктә дәүләт пенсияһына өмөт иткән хәлдә лә был аҡсаның уларға лайыҡлы тормош өсөн етерлек булмаясағы тураһында белдерһә, 23 проценты пенсияға бөтөнләй өмөт тә итмәй, сөнки ҡайһылары пенсия системаһының киләсәгенә ышанмай, икенселәре пенсия тәьминәте өсөн кәрәкле балл йә стаж йыя алырына шикләнә. Шуның өсөн дә әлеге һорау бирелгән кешеләрҙән 75 процент ҡатын-ҡыҙ һәм 66 процент ир-егет пенсияға үҙаллы рәүештә аҡса туплау яғында. Һәм, ысынлап та, бөгөн эшләп йөрөгән халыҡтың күпселеге дәүләт пособиеһына өҫтәп, киләсәккә аҡса йыйыу кәрәклеге менән ризалаша, ә күпселек был эшкә хеҙмәт юлын башлағас та тотонорға кәрәк тигән фекерҙә.

Ә дәүләт киләһе йылдан пенсияға аҡса туплауҙың яңы программаһын - "Гарантиялы пенсия планы"на старт бирәсәк. Тик беҙҙә бит алды-артты байҡамайыраҡ кисеүгә һикереү ғәҙәте бар икәнен дә беләбеҙ - әле лә ана шундайыраҡ хәл килеп тыуа: ҡартлыҡ өсөн аҡса тупларға кәрәк, тигән күпселектең ни бары... 9 проценты ғына был программала ҡатнашырға әҙер. Был яҡ ярҙа инде күпселек - 84 процент пенсияға өҫтәмә туплай алмауын, сөнки былай ҙа тартып-һуҙып көн итеүе, аҡсаһы етмәүе хаҡында белдерә. Әйткәндәй, күптән түгел "АиФ" аҙналыҡ гәзите ҡыҙыҡлы бер иҫәпләү һөҙөмтәһен баҫып сығарҙы: ГПП-ға 30 йыл дауамында эш хаҡынан ай һайын 6-шар процент аҡса күсереп барған осраҡта пенсияға күпме өҫтәмә тупланасаҡ? Ил буйынса был һан уртаса 16,5 мең һум килеп сыға икән. Махсус программаларҙы анализлау үҙәге етәксеһе, иҡтисад фәндәре докторы Сергей Смирнов әйтеүенсә, "...әлеге "план" пенсионерҙарҙың финанс хәлен тамырынын үҙгәртәсәк, тип иҫәп тотоуы ҡыйын. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, киләсәк пенсия тураһында уйланырға һәм күпмелер өҫтәмә туплау хаҡында хәстәрлек күреү кәрәк. Дәүләт беҙҙе аҡсаһыҙ ҡалдырмаҫ, ләкин ул барыбер лайыҡлы тормош өсөн етмәйәсәк..."

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

# Ауыл, кала граждандарының әүҙемлеген нисек күтәрергә?



**(Башы 1-се биттә).**

Әүҙем булыу шулай уҡ һәр кемдең эске доньяһы торошонан, уның рухи халәтенән дә тора, тигән уйҙамын. Бөгөн кешенең рухи үҫешенә ҡарау, иғтибар итеү икенсе планда тора - һәр бер эшләнгән эш өсөн кеше хаҡ һорай, түләү талап итә башланы. Бөтөн саралар - гәзит-журналдар, радио, телевидение, интернет селтәрҙәре аша күберәк табыш алыу, килем алыу тураһында пропаганда алып барыла һәм кешеләрҙә нимәнелер бушҡа эшләү, ярҙам итеү кеүек төшөнсәләр яйлап юҡҡа сыға бара. Мәктәптәрҙә лә балаларҙы шул йүнәлештә өйрәтәләр. Әлбиттә, мин килешәм, был заман талабы. Әммә ләкин ошолар битарафлыҡҡа, вайымһыҙлыҡҡа тура юл аса ла инде.

Әйҙәгеҙ, элекке ваҡыттарҙы иҫкә төшөрәйек әле: өмә итеп, күмәкләп бесән сабыу, кәбән ҡойоу кинәнестәре, өй күтәреү, нигеҙ ҡороу, туған булмаһа ла кемгәлер ихлас ярҙам итеү... Ә хәҙер нисек һуң? Бесәнде косилка менән сабыу, йыйыу өсөн шул тиклем ҡиммәт хаҡ һорайҙар, был бесәнде һатып алыуҙан да ҡыйбатыраҡҡа барып баҫа. Хатта яҡын туғандар ҙа был йәһәттән әҙәп һаҡлап тормай...

Ауыл ерлегендә милли йолабыҙ - өмәләрҙе юғалтмай һаҡлау бурысы тора. Был һәр кемдең эске доньяһы торошона, рухиәтенә лә бәйлелер , тип уйлайым. Беҙҙә мәктәптең иҫке баҡсаһы бар, ул ярайһы ҙур ғына, ағастарҙы элек мәктәп уҡыусылары йылғанан биҙрә менән һыу ташып ҡойоп үҫтергәндәр. Инде байтаҡ йылдар беҙ, "Ағинәй" һәм "Атайсал" йәмәғәт ойошмалары ағзалары, шул баҡсаның рәшәткәләрен тәрбиәләп тотабыҙ - ирҙәр рәшәткәләрҙе йүнәтә, ҡағып сыға, ағинәйҙәр ап-аҡ итеп, яҙлы-көҙлө матурлап буяп ҡуя. Уҡыусылар баҡсаның эсен таҙарта, ҡороған ботаҡтарҙы йыя. Көҙгөһөн хакимиәт башлығы, районның ир-егеттәр ҡоро рәйесе Илгиз Йәнбирҙин, өмә үткәреп, баҡсаның эсенә заманса балалар майҙансығы эшләтеп ҡуйҙы, ауылға йәм биреп ултыра, унда уйнап йөрөгән балаларҙың шат тауыштарын ишетеү күңелгә кинәнес өҫтәй. Ә беҙҙе бит берәү ҙә шунда яуаплы итеп ҡуймаған, бөтәһе лә күңел ҡушыуы буйынса эшләнә. Милли кәсептәребеҙҙең береһе - кейеҙ баҫыу йолаһын да тергеҙҙек, кейеҙ баҫыу - коллектив эш , Һаҡмар буйына тирмә ҡороп, ҡаҙандар аҫып, ағинәйҙәр, төрлө йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар, уҡыусы ҡыҙҙар кейеҙ баҫып, ир-егеттәребеҙ Һаҡмарҙа кейеҙҙәрҙе сайҡатып, йыр-бейеү, ҡурай, гармун моңдарын яңғыратып үткәргән өмәләребеҙҙең береһе. Үҫеп килгән быуынға халҡыбыҙҙың милли традицияларын, йола-кәсептәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәтеү - беҙҙең изге бурыс , уларҙа фәҡәт ошо юл менән генә берҙәмлек, ойошҡанлыҡ, юғары үҙаң сифаттары тәрбиәләргә булалыр, тип уйлайым.

***Сәриә ҠОЛҒОНИНА, Өфө ҡалаһы Совет районының 19-сы торлаҡ-эксплуатация компанияһы эшсеһе:*** Ҡала булһынмы, ауылмы - унда йәшәгән халыҡтың әүҙемлеге һәр төрлө мәҙәни, уйын-көлкө сараларында, хатта шәмбе өмәләрендә ҡатнашыу йә булмаһа ниндәйҙер талаптар ҡуйып, митингыларға сығыу менән генә билдәләнмәй, ә үҙҙәренең йәшәгән урындарын матур, төҙөк һәм, иң мөһиме, таҙа итеп тотоуҙа ла күренә. Ә беҙҙә был йәһәттән әҙәм балаларының холоҡ-ғәҙәттәре бер ҙә маҡтанырлыҡ түгел. Кемгә-кемгә, ә бына нисә йыл инде урам һепереүсе булып эшләгән миңә ҡала халҡының ғибрәт итерлек алама ғәҙәттәре, баш ҡалабыҙҙа өлгөлө тәртип һәм таҙалыҡ булдырырға тырышып тормауҙары, минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе тип битараф йәшәүҙәре, пассив булыуҙары бик яҡшы мәғлүм. Ҡайҙа етте - шунда күҙ ҙә йоммайынса сүп-сар ырғытып китеү беҙҙә күптән инде нормаға әүерелгән. Сүп-сар реформаһы тип һөйләйбеҙ ҙә ул, ә бына ул реформаны тәү сиратта кешеләр аңында үткәрергә кәрәк икәнен генә уйламайбыҙ. Был реформаны кешеләр аңынан башларға кәрәк! Тик нисек итеп? Осрап ҡуя, әлбиттә, арабыҙҙа әлеге битарафлыҡ, пассивлыҡ күренештәре менән килешергә теләмәгән социаль әүҙем, таҙа күңелле кешеләр ҙә, ләкин улар дөйөм хәлде үҙгәртә алырлыҡ күпселекте тәшкил итмәй, ҡыҙғаныСҡа. Быйыл үҙегеҙ күреп тораһығыҙ: ҡала урамдарын ҡар баҫты. Коммуналь-хужалыҡ эшсәндәре был ҡарҙы таҙартып өлгөрә лә алмай китә, бының үҙ сәбәптәре күп, ләкин әлеге осраҡта һүҙ был хаҡта түгел, ә ҡала халҡының үҙ хәленә мөнәсәбәтендә. Торлаҡ йорт алдарын, подъезд тупһаларын баҫып киткән ҡарҙы йырып, ашатлап йөрөһә йөрөй ул, әммә көрәк тотоп, тупһаһын көрәргә сыҡмаясаҡ, сөнки ундайҙарҙа элементар тәрбиәлелек сифаттары юҡ. Иң ҡурҡынысы шунда: бындай битарафлыҡ, пассивлыҡ өлкәндәрҙең ошондай мөнәсәбәтен күреп үҫкән балаларға күсә. Шулай булмаһа, баш ҡалабыҙҙа әленән-әле ишетелеп торған вандаллыҡ акттары кемдәр тарафынан ҡылына тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, үҫмерҙәр һәм йәштәр ҡылығы был. Граждандарҙың әүҙемлеген күтәреү юлдарын мин әйтеп бирә алмам, әлбиттә, ә шулай ҙа был йәһәттән йорт-ара, подъезд-ара ярыштар, һәр төрлө конкурстар ойоштороу юлы менән кешеләрҙә сәм һәм дәрт уятыу торлаҡ йорт эйәләрен үҙ милектәренә, шулай уҡ уның эргә-тирә биләмәләре торошона бер аҙ хужаларсараҡ ҡарарға булышлыҡ итер ине, бәлки, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала "Башҡортостандың Бөйөк Еңеүгә индергән өлөшө" халыҡ-ара ғилми-ғәмәли форумы уҙғарыла. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хөкүмәттең тейешле бойороғона ҡул ҡуйҙы. Форумды үткәреү тәҡдиме менән "Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте" Дөйөм Рәсәй йәмәғәт-дәүләт ойошмаһының Башҡортостан Республикаһындағы төбәк бүлексәһе сығыш яһаны.

✓Башҡортостанда 2020 йылдың ташҡын һыуҙарын аварияһыҙ үткәреүгә әҙерлек эштәре башланды. Был хаҡта республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Республикаһының Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров хәбәр итте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, быйыл ҡар күп. "Әйҙәгеҙ, видеоконференция бәйләнешендә яҙғы ташҡынға әҙерлек мәсьәләһен ҡарайыҡ. Фараздар аныҡ түгел, ләкин беҙ ташҡындың көслө булыуы ихтимал, тип әйтә алабыҙ", - тип хәбәр итте Радий Хәбиров.

✓Башҡортостан Республикаһы Үҙәк һайлау комиссияһының сираттағы ултырышында алтынсы саҡырылыш Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутатының буш мандатын элекке мәғариф министры, Башҡортостандың Фәндәр академияһы президенты Әлфис Ғаязовҡа тапшырырға хәл ителде. Бынан алда мандат Башҡортостандың элекке йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры, әлеге ваҡытта Белорет районы хакимиәте башлығы Андрей Иванютаныҡы ине.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин 20 февралдәге указы менән федераль судьялар тәғәйенләнә. Документҡа ярашлы, Башҡортостан Республикаһының Юғары суды судьялары вазифаларына Регина Әйүпова менән Ингрида Индан, ә Дәүләкән районы суды судьяһы итеп - Вадим Ғәлимйәнов, Өфө ҡалаһының Калинин районы суды судьяһы итеп - Азамат Мөхәмәтйәнов, шулай уҡ Сослан Исҡужин менән Азалия Шакирйәнова Өфөнөң Совет районы судьяһы итеп тәғәйенләнде.

✓Башҡортостанда грипп эпидемияһы кәмеүгә бара, тип хәбәр итә Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау өлкәһендә күҙәтеү һәм кеше именлеге буйынса федераль хеҙмәттең республика буйынса идаралығы. Һуңғы дүрт аҙнала сирҙең күтәрелеше күҙәтелде, эпидемияның иң юғары нөктәһе йылдың етенсе аҙнаһына - 10 февралдән 16-һына тиклем тура килде.

✓ *Нимә генә яҙылмағайны ул парталарҙа! Береһенән-береһе оятһыҙыраҡ хәшәрәт һүгенеү һүҙҙәре. Уҡыу йылы башында таҙартып ҡуйһалар ҙа, студенттар килеү менән ул парталар яңынан "биҙәлә" торғайны.*



*БЫЛ АЙҘА...*

**Элеккесә ни тиклем генә бар көсөнә баш бирмәҫ холҡон, уҫаллығын күрһәтергә маташмаһын, шаҡайҙың селләләре, семеткес әсе ел-бурандары тарихта ғына тороп ҡалыр микән шулай? Тырышты ул, әлбиттә: ҡала, ауыл урамдарын көрткә күмде, күҙ асҡыһыҙ бурандарын да уйнатты, ләкин... былар береһе лә элеккесә булып бөтмәне, дөрөҫөрәге, градус етмәне. Нулгә яҡын һәм унан юғарыраҡ температура, епшек ҡар, аяҡ аҫтында атларға ҡамасаулаған ҡар бутҡаһы... Ни тиһәң дә, глобаль йылыныу касафаты үҙенекен итә, ә шаҡай, меҫкен, тулай, ярһый, әйтерһең дә, буранайҙың аҡман-тоҡмандары унын биләмәһенә көсте, тик элекке ҡеүәтен ҡайтара алманы һәм үҙенең был көсһөҙлөгө өсөн үсен әҙәм балаһынан алмаҡ булып, тирә-йүнде ҡабат-ҡабат ҡарға күмеп ташланы.**



# МАРТТЫҢ КӨНӨ - ШАРТ

Шул урында, ярай, унын көнө лә бөттө, ә эстафетаны буранай үҙ хакимлығына алды: яҙ килә, яҙ! Яҙған булһа әгәр, сөнки хәҙер беҙ һәр бер айға шикләнеп, һағайыбыраҡ аяҡ баҫабыҙ: быныһы нindәй ғибрәт күрһәтер? Халыҡ әйтмешләй, марттың көнө - шарт, шуға ла ҡапыл ғына яҙ килерен бер нисек тә вәғәҙәләй алмаған синоптиктарға ла үпкә юҡ: был айҙа ла көн торошоноң тотороҡһоҙлоғо, һауа температураһының ҡырҡа үҙгәреп тороуы, киҫкен ел иҫеүе, ҡар ҡатыш ямғыр яуыуы көтөлә, ти улар. Март башында сәпсек эсерлек һыу булһа, йыл яҡшы килер, ти халыҡ һынамышы. Мартта йылы булһа, йыл һалҡын булыр, тигән күҙәтеү ҙә бар фенологтар көндәлегендә. Шаҡайҙың көндәре буранайҙы хәтерләткәйне, ә тәүге яҙ айы үҙ сифатына тоғро ҡалырмы? Климаттың күҙ алдында кире үҙгәрештәр өйөрмәһенә йылдан-йыл, айҙан-ай тәрәнерәк инә барыуына шаһитбыҙ. Планетаны, Еребеҙҙе ҡотҡарыу мәсьәләһе күптән көн тәртибендә. Климаттағы кире үҙгәрештәрҙе тотҡарлау өсөн донъя илдәре берләшергә һәм күпмелер финанс иғәнәһе күсереп барырға бурыслы, ләкин был мәсьәләлә уртаҡ фекергә килеү юҡ. Күрәһең, был эштә лидер кәрәк һәм ул ошо көндәрҙә үҙенең сенсацион башланғысы менән пәйҙә булды. Хәйер, ул былай ҙа киң билдәле шәхес. "Амазон" компанияһы хужаһы миллиардер (115,5 млрд долларға эйә) Джефф Безос климат үҙгәрештәренә ҡаршы үҙ исемендәге Ер фонды булдырыуы һәм планетаны ҡотҡарыу эшенә 10 млрд доллар күсерергә ниәтләүе хаҡында белдерҙе. "Ер беҙҙе берләштереүсе, әйҙәгеҙ уны бергәләп яҡлайыҡ", - тип мөрәжәғәт итә ул планета граждандарына. Ысынлап та, һәр кем ҡулынан килгәнде башҡарырға бурыслы, бер төп ағас ултыртһаң да - ҙур файҙа. Әйткәндәй, был айҙа Ерҙе һаҡлау көнө **(30)** билдәләнеү айҡанлы булды әлеге һүҙ.

Айҙың ахырғы көндәренең береһенән башланыҡ түгелме? Улайға китһә, буранайҙың иң тәүге көнө лә бик матур датаға арналған: Башҡорт ғаиләһе көнө **(1)**. Яңыраҡ, 2018 йылдан алып Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты башланғысы менән "Ғаилә - туған тел һаҡсыһы" тип исемләнгән асыҡ конкурс-фестиваль үткәреләп билдәләнә башлағайны ул. Уңған, татыу, талантлы башҡорт ғаиләләре күп Башҡортостаныбыҙҙа. Йәш ғаиләләр араһында иһә былтыр 21-се тапҡыр үткәрелде конкурс. Башҡорт ғаиләһе асылы, унын ҡиммәттәре байрам һәм ярыштарҙа ғына һыналмай, әлбиттә. Ул көн һайын, балалар тәрбиәһе хәстәрлектәрендә үткән һәр бер көн йөкмәткеһе менән һынала. "Ғаилә - туған тел һаҡсыһы" тигән әлеге девиз һәр башҡорт ғаиләһенең төп тәрбиәүи бурысы икәнен аңлаған мөхиттә генә телһөйәрҙәр, илһөйәрҙәр үҫеп сығасаҡ.

Йәнә лә был айҙа яҙҙың көтөп алынған иң нурлы, иң һөйкөмлө, әле ҡыш хакимлыҡ итеүгә ҡарамаҫтан, иң сәскәле байрамдарының береһе - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө **(8)** яҡынлашыуын да абайламай булмай. Шуға ла Бөтөн донъя яҙыусы **(3)**, Бөтөн донъя шиғриәт **(21)**, Мәҙәниәт хеҙмәткәре **(25)**, Бөтөн донъя театр **(27)** көндәренең дә ошо айға тап килеүе тәбиғи: яҙ һулышы, наҙ һәм гүзәллек - ижадҡа илһам биреүсе иң тәү сығанаҡтар. Былардан тыш тағы ошондай иҫтәлекле даталар көтөлә: Бөтөн донъя граждандар оборонаһы, Халыҡ-ара наркоманияға һәм наркобизнесҡа ҡаршы , Халыҡ-ара балалар телевидениеһы һәм радиоһы **(1)**, Бөтөн донъя ҡырағай тәбиғәт **(3)**, Халыҡ-ара теш табибы **(6)**, РФ архивтары **(10)**, Наркотиктар әйләнешенә контроль органдары хеҙмәткәрҙәре **(11)**, Енәйәт-башҡарыу системаһы хеҙмәткәрҙәре **(12)**, Сауҙа, көнкүреш хеҙмәтләндереү һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшсәндәре, Бөтөн донъя ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау, Бөтөн донъя планетарийҙар **(15)**, Бөтөн донъя социаль хеҙмәткәрҙәр **(17)**, Һыу аҫты моряктары, Халыҡ-ара клиент **(19)**, Үҙәк Совет власы менән Башҡортостан хөкүмәте араһында Башҡорт Совет Автономияһы хаҡында Килешеү төҙөлгән **(20 март, 1919)**, Бөтөн донъя шиғриәт, Халыҡ-ара ҡурсаҡ театры, Халыҡ-ара урмандар **(21)**, Бөтөн донъя һыу ресурстары, Халыҡ-ара таксистар **(22)**, Гидрометеорология хеҙмәткәрҙәре **(23)**, Бөтөн донъя туберкулезға ҡаршы **(24)**, РФ Милли гвардия ғәскәрҙәре **(27)** көндәре.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**1 -** шағирә, журналист **Гүзәл Ғәлиеваға - 65 йәш** (1955).

**15 -** ботаник, эколог, йәмәғәт эшмәкәре, БДУ-ның Сибай институты агроэкология кафедраһы мөдире, биология фәндәре докторы, профессор, Рәсәйҙең почетлы юғары һөнәри белем биреү хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Сәфәрғәле Йәнтүринга - 75 йәш** (1945).

**16 -** музыкант, 1962-1974 йылдарҙа Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле концертмейстеры, 1975-2010 йылдарҙа Башҡорт дәүләт филармонияһы баянсыһы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Ридик Фәсхетдиновҡа - 80 йәш** (1940).

**20 -** Башҡортостан Республикаһы Башлығы **Радий Хәбировтың** тыуған көнө (1964).

**24 -** рәссам, педагог, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты **Фәйзрахман Исмәғилевҡа - 65 йәш** (1955).

**27 -** Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры актеры , Башҡортостандың халыҡ артисы **Фәтих Дәүләтбаевҡа - 70 йәш** (1950).

**28 -** фольклорсы, йырсы-сәсәниә, филология фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Розалия Солтангәрәеваға - 65 йәш** (1955).

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ҺҮГЕНМӘЙЕК!

Юҡ, һүгенеүҙең насар ғәҙәт икәнен һаман танымайбыҙ. Һаман да тирә-яғыбыҙҙағы кешеләрҙең ауыҙын япмай, уларҙың һүгенеүен тыңларға ризабыҙ. Алама һүҙҙәрһеҙ булмай, йәнәһе. Телмәребеҙ "ярлылана", имеш. Насар һүҙҙәрһеҙ һөйләшһәк, ҡот осҡос хәлгә юлығабыҙ: ыҡ-мыҡ итәбеҙ, элекке һүгенеү һүҙҙәре урынына һүҙ таба алмайбыҙ, йәнәһе. Шуға ла, әйҙә, нисек һөйләшкәндәр - шулай һөйләшһендәр, кешене яратҡан шөғөлөнән мәхрүм итмәйек, тип уйлайбыҙ. Әр һүҙҙәрен тыңлағандан берәү ҙә дауаханаға барып эләкмәгән, яҙмышы боҙолмаған бит...

Яңылышабыҙ шул. Һуҡырлығыбыҙ менән телмәребеҙҙе, телебеҙҙе бысратабыҙ. Улай ғына ла түгел, быуабыҙ. Һүгенеү быуар йыландан яман. Һүгенгән йәмғиәт утопик йәмғиәткә тиң. Бер алама һүҙгә ялғауҙар өҫтәп, нindәй генә һүҙ төркөмө төҙөмәҫһең дә, нindәй генә һөйләм киҫәге урынында ҡулланмаҫһың. Бының өсөн шәп тел белгесе булыу ҙа кәрәкмәй.

Тел белгесе тигәндән, беҙ уҡыған заманда БДУ-лағы филология факультеты урынлашҡан ҡатта элекке парталар ултырып ҡалған бер аудитория бар ине. Нимә генә яҙылмағайны ул парталарҙа! Береһенән-береһе оятһыҙыраҡ хәшәрәт һүгенеү һүҙҙәре. Уҡыу йылы башында таҙартып ҡуйһалар ҙа, студенттар килеү менән ул парталар яңынан "биҙәлә" торғайны. Ғәҙәти күренеш, тип артыҡ ғәжәпләнмәҫ тә инем, әгәр шул парталар артында буласаҡ тел белгестәре, әсә теле, әҙәбиәт уҡытыусылары ултырмаһа. Шул парталарҙы уҡып ҡына ла диплом эше, йәғни ғилми диссертация яҡларға була ине. Тел яҙмышына битараф булмаҫҡа, уны иң матур тел булараҡ үҫтерергә бурыслы студенттарҙың, журналистарҙың һәм буласаҡ тел белгестәренең ошо "шедеврын" уҡып, уйға ҡала инем: ә киләсәктә уларҙың уҡыусылары ни тип яҙыр? Әгәр ҙә тел яҙмышына етди ҡарарға тейешле ҡатлам ошо һүҙҙәрҙең авторы икән, телгә битараф ҡарағандарға ни ҡала?

Нисек кенә булмаһын, телебеҙҙе ошо сүп-сарҙан таҙартып була, тип уйлайым. Дөрөҫ, телгә төрлө яҡтан бысраҡ һөжүм эшләнә. Телевидение менән радио цензураһын үтеп, әр һүҙҙәре зиһенде телә, йырсылар туҙға яҙмаған һүҙҙәрҙе ҡатыштырып йырҙар йырлай. Ә инде интернет һүгенеүселәрҙең кадрҙар мәктәбенә әйләнде. Шуға ҡарамаҫтан, "Хәлдәр нисек?" тигән һорауға ҡайһы бер тәрбиәһеҙҙәр һүгенеп яуап бирһә лә, беҙ әле һаулыҡты әҙәмсә һорашабыҙ.

**Азамат ҒӘЛИЕВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан быйылғы сәсеү кампанияһына тулыһынса әҙер, тип хәбәр иттеләр Ауыл хужалығы министрлығынан. Республика хужалыҡтарында бөтәһе 295 мең тонна яҙғы иген культуралары әҙерләнгән, шуларҙың 33 мең тоннаһы - суперэлита һәм элита. Яҙғы культураларҙы 2 миллион гектарҙа сәсеү бурысы тора. Яҙғы баҫыу эштәрендә 12 мең трактор ҡатнаша, шуларҙың 2,2 меңе - сылбырлы тәгәрмәсле. Республика районларында тупраҡты сәсеүгә әҙерләү өсөн баҫыуға 10 мең трактор агрегаты сыға, 4,8 мең агрегат туранан-тура сәсеүгә йәлеп ителә. Ошо техника менән сәсеүҙе 12-14 көндә тамамлау күҙ уңында тотола.

✓Башҡортостанда пациенттарҙың 4,5 миллион электрон карталарын берләштергән Республика медицина мәғлүмәт-аналитика системаһы булдырылды, тип хәбәр итте һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"ндә. Берҙәм медицина документтары базаһы төрлө медицина ойошмалары табиптарына электрон төрҙә мәғлүмәт менән алмашыу мөмкинлеге бирә. Максим Забелин әйтеүенсә, Республикала Контакт-үҙәк эшләй, уға 13-01 номеры буйынса бушлай шылтыратырға мөмкин. Был сервис ярҙамында табипҡа яҙылырға, табипты өйгә саҡыртырға була.

✓Республика Башлығы күренекле скульптор-монументалист, Салауат Юлаев һәйкәле авторы Сосланбәк Тавасиевтың хәтерен мәңгеләштереү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Хәтерҙе мәңгеләштереү маҡсатында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә - архитектура өлкәһендә С.Д. Тавасиев исемендәге Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте стипендияһын булдырыу; С.Д. Тавасиевтың тормошона һәм ижадына арналған документаль фильм төшөрөүҙе тәьмин итеү бурысы йөкмәтелде.

✓Өфөлә күренекле бейеүсе, хореограф, РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты Фәйзи Ғәскәровҡа бағышланған "Фәйзи Ғәскәров документтарҙа һәм ҡыҙының хәтирәләрендә" китабы баҫылып сыҡты. Автор һәм төҙөүсе - журналист, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре Дмитрий Ефремов китапты Ғәскәровтарҙың ғаилә архивындағы документтарға һәм фотоһүрәттәргә таянып яҙған, уларҙы маэстроның ҡыҙы Гөлнара Фәйзи ҡыҙы Айыҡолова (Ғәскәрова) баҫтырып сығарырға хәл иткән.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған байрам концерты барышында тағы ла ете яҡташыбыҙҙы "Шайморатов генерал" ордены менән наградланы.



ҠЫҪҠАСА

# БАЛАЛАРҒА - ТЕАТР!

✓ **Башҡортостанда ауыл балалар баҡсалары һәм мәктәптәре ҡарамағында балалар театрҙары барлыҡҡа киләсәк. Был хаҡта Мәҙәниәт министрлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында республика Хөкүмәте вице-премьеры Фәнүр Йәғәфәров һөйләне.** "14 декабрҙә, Башҡорт теле көнөндә, республика Ҡоролтайҙары етәкселәре менән осрашыуҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ауылда башҡорт балалар театрҙарын ойоштороу ҡушты. Бындай театрҙарҙы клуб, балалар баҡсаһы йәки мәктәп ҡарамағында ғәмәлгә ашырырға мөмкин, - тип билдәләне вице-премьер. - Технологиялар ни тиклем әүҙем үҫешмәһен, халыҡҡа йәнле аралашыу кәрәк, был йәһәттән мәҙәниәт учреждениелары универсаль булырға тейеш. Һеҙ заманса креатив, барыһына ла аңлайышлы традицион формаларҙы оҫта ҡуллана белергә бурыслы, - тине Фәнүр Йәғәфәров, муниципалитет вәкилдәренә мөрәжәғәт итеп. - Халыҡ ижади коллективтарына, халыҡ театрҙарына бөтә кимәлдәрҙә лә ярҙам күрһәтергә тейешбеҙ".

✓ **Рәсәй Гидрометеорология үҙәгенең фәнни етәксеһе Роман Вильфанд журналистар менән әңгәмәләшкәндә мартта Рәсәйҙең Европа өлөшөндә ун градусҡаса һалҡын булыуы ихтималлығын белдерҙе.** Климат билдәләмәһе буйынса март - ҡышҡы ай, шуға күрә температураның түбәнәйеүен ниндәйҙер ғәҙәти булмаған хәл тип ҡабул итергә кәрәкмәй, тип билдәләне синоптик. "Был - ғәҙәти күренеш, шуға мартта 7-10 градусҡа тиклем һалҡын булыуы мөмкин тип фаразлайбыҙ", - тине ул. Билдәләнеүенсә, быйылғы март урта һыҙатта иң ҡоро ай булмаясаҡ. Синоптик һүҙҙәренсә, Башҡортостанда, Киров өлкәһендә, Пермь крайында, шулай уҡ Һарытау өлкәһенең көнсығышында, Уралдың көньяғында, Төмән өлкәһенең көньяғында, Омск өлкәһендә, Иркутск өлкәһенең төньяғында, Байкал аръяғында, Приморьела, Сахалиндың көньяғында яуым-төшөмдөң аҙ булыуы фаразлана.

✓ **Өфө - Нефтекама тимер юлы төҙөлөшө 2024 йылда башланыуы ихтимал. Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов проектты әҙерләү барышы тураһында һөйләне.** Йыл аҙағына тиклем республика аҡсаһы иҫәбенә объекттың техник-иҡтисади нигеҙен (маҡсатҡа ярашлылығы, сығымдар) әҙерләү күҙаллана. 2021 йылда - концессияға сығырға, унда концедент булып Федераль тимер юл транспорты агентлығы сығыш яһай. Концессионер - Рәсәй тимер юлдары ҡатнашлығындағы берләктәге предприятие, ул проектты ғәмәлгә ашырыуҙы үҙ өҫтөнә ала. Тимер юлының оҙонлоғо - 175,5 саҡрым, проектта 9 күпер һәм 7 юл үткәргес бар. Объект йөк ташыу өсөн тәғәйенләнә. Автомобиль юлдары буйлап Өфө менән Нефтекама араһы 200 саҡрымдан ашыу тәшкил итә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АБРУЙ ЮҒАРЫ

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров "Медиалогия" компанияһы төҙөгән Рәсәй ир-уҙамандары медиарейтингына инде. Белгестәр йыл дауамында (2019 йылдың февраленән 2020 йылдың февраленә тиклем) республика етәксеһен телгә алыуҙы күҙәтеп барған. Һөҙөмтәлә Радий Хәбиров 12-се урынды алған.**

Рейтингта беренсе урында - Рәсәй Президенты Владимир Путин. Артабан Хәүефһеҙлек советы рәйесе урынбаҫары Дмитрий Медведев, дәүләт башлығының матбуғат секретары Дмитрий Песков, Мәскәү мэры Сергей Собянин, сит ил эштәре министры Сергей Лавров, Санкт-Петербург губернаторы Александр Беглов, Дәүләт Думаһы депутаты Вячеслав Володин, сәйәсәт һәм йәмғәт эшмәкәре Алексей Навальный, Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьев, Түбәнге Новгород өлкәһе башлығы Глеб Никитин, оборона министры Сергей Шойгу һәм Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров килә. Хәбировтан һуң рейтингта Патриарх Кирилл (13-сө урын), ил хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин (14-се урын), Чечен Республикаһы башлығы Рамзан Ҡадиров (17-се урын) һәм Татарстан Республикаһы президенты Рөстәм Миңлеханов (19-сы урын) тора.

# БӨРЙӘНДӘ - ЯҢЫЛЫҠ

**Башҡортостандың Бөрйән районында республикала иң ҙур ҡояш электр станцияһы эшләй башланы. Уның ҡеүәте - 10 МВт. "Хевел" компанияһының Бөрйән ҡояш электр станцияһы эште айырым форматта һәм селтәрле станция сифатында алып барырға йыйына. 8 МВт ҡеүәтенә әйә туплаусы авария булған осраҡта энергия менән тәьмин итергә һәләтле. Был - энергия туплаусыларҙың ҡеүәте буйынса Европала иң ҙур электр станцияһы.**

Станция Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашлығында Өфөлә Рәсәй сәнәғәт форумын асыу тантанаһында тура эфирҙа асылды. "Башҡа энергия сығанаҡтары - республика өсөн төп ҡараҙар түгел, ләкин шулай уҡ беҙҙең киләсәк, - тине Радий Хабиров. - Беҙ - Рәсәйҙә ҡояш энергияһы етештереү йәһәтенән алдынғы төбәктәрҙең береһе. Республикала ошо өлкәлә башкарылғандан тыш, бының менән генә туҡтап ҡалмаҡыҡ. Хәҙер Стәрлебаш районында ҙур ғына ҡояш электр станцияһы төҙөлә. Климат шарттары беҙгә бындай мөмкинлек бирә. Үҙ сиратында, ҡояш электр станцияларының заманса технологиялары ярҙамында файҙалы ғәмәл коэффициентын күберәк арттырыу мөмкинлеге бар. Шуға күрә был - беҙҙең өсөн өҫтәмә энергия сығанағы. Йәнә ҡабатлайым: бындай станциялар барлыҡ проблемаларҙы хәл итмәй, ә мөһим ярҙам булып тора". Эксперттар баһаһы буйынса, Бөрйән районындағы ҡояш электр станцияһы алыҫтағы райондарҙа электр менән тәьмин итеүҙең ышаныслылығын арттырыуҙан тыш, заманса энергия балансының тыҡыҡлы өлгөһөнә әйләнергә тейеш.

# ТӘҮГЕЛӘР...

**Ватанды һаҡлаусылар көнө уңайынан республикала байрам саралары, төрлө спорт ярыштары һәм хәрби уйындар, 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышы, Афған һуғышы ветерандары менән осрашыуҙар, хәтер кисәләре уҙғарылды. Баш ҡалала ла тантаналы саралар ойошторолдо һәм уларҙың күбеһендә Башҡортостандың Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

Иң әһәмиәтле сараларҙың береһе - 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының танкыға ҡаршы туптар взводы командиры, гвардия капитаны Берлинғаса бөтә яу юлын үткән, Ҡыҙыл Байраҡ, Ҡыҙыл Йондоҙ, I дәрәжә Ватан һуғышы ордендары кавалеры Мөгин Нагаевҡа тәүгеләрҙән булып "Шайморатов генерал" ордены тапшырылыуы булғандыр. Артабан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған байрам концерты барышында тағы ла ете яҡташыбыҙҙы "Шайморатов генерал" ордены менән наградланы. Улар араһында дивизияның айырым саперҙар эскадроны составында дәһшәтле һуғыш юлын үткән Ғәбделхәй Зариповтың, 1942-1943 йылдарҙа Калинин фронтының 20-се армия 133-сө уҡсылар дивизияһы 418-се уҡсылар полкы отделениеһы командиры булған, 1944 йылдан хәүефһеҙлек органдарында етәксе урындарҙа хеҙмәт иткән отставкалағы полковник Кашшаф Сәмиғуллиндың да булыуы награданың бәҫен күтәрҙе.

# КӘРӘКЛЕ ЗАКОН

**Башҡортостанда "Урындағы үҙидара органдарына Башҡортостан Республикаһының ҡайһы бер дәүләт вәкәләттәрен биреү тураһында" ҡараусыһыҙ йөрөгән хайуандар менән мөғәмәлә итеү хаҡында закон ҡабул ителде.**

Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа белдереүҙәренсә, закон хайуандар менән эште финанслау нормативтарын иҫәпләүҙең яңы методикаһын индерә. "Йогошло ауырыуҙарҙың таралыуына юл ҡуймау өсөн хужаһыҙ хайуандар һанын көйләргә кәрәк. Ләкин алымдар кешелекле булырға тейеш. Хәҙер һаулығы сәләмәт берәҙәк хайуандарҙы стериллəштерергә һәм элекке йәшәү урынына ҡайтарырға, ә үлемесле сиргә дусар булғандарын мәжбүри йоҡлатырға кәрәк. Уҫалдары менән ҡатмарлыраҡ. Уларҙы тәбиғи мөхиткә сығарыу хәүефле, ә эвтаназияға дусар итеү - кешелекһеҙлек. Бындай хайуандарҙы ғүмерлеккә махсус приюттарҙа тоторға тейештәр. Ошо эш властың муниципаль органдарына йөкмәтелә, был финанслау күләмен яңынан ҡарауҙы талап итә", - тине Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев. Бынан алда берәҙәк хайуандар һанын көйләүгә республика бюджетынан йылына 63,4 миллион һум бүленде. Башҡортостандың Ветеринария идаралығы баһаһы буйынса, законды үтәү өсөн биш тапҡырға күберәк - йылына 320 миллион һум самаһы кәрәк. Өҫ йылға иҫәпләнгән бюджетта бындай аҡса ҡаралмаһа ла, депутаттар законды ҡабул итте. Хәҙер Финанс министрлығы уны ғәмәлгә ашырыуға аҡса бүлергә тейеш, тип асыҡлыҡ индерҙеләр Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышында.

# АЛТЫН ҠАРАРҒА БАР

**25 февралдән бөтә донъяға билдәле "сармат алтыны" коллекцияһы һаҡланған Өфө археология һәм этнография музейы барыһы өсөн дә үҙ ишектәрен асты.**

Быға тиклем музей Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Р. Кузеев исемендәге Этнологик тикшеренеүҙәр институтында фәнни база булараҡ эшләне. "Сармат алтыны" - 1987-1988 йылдарҙа билдәле археолог Анатолий Пшеничнюк беҙҙең эраға тиклемге V-IV быуаттарҙа Филиппов ҡурғанынан ҡаҙып алған уникаль алтын әйберҙәр археология фәненә шундай исем менән килеп инде. Был табыш донъя әһәмиәтендәге фәнни асыш тип баһаланды. Тап улар Дала Евразияһының ҙур мәҙәни, иҡтисади һәм сәйәси үҙәктәренең береһе булараҡ Көньяҡ Уралға ғалимдарҙың иғтибарын йәлеп итте. "Бындай хазиналарҙы ғалимдарҙан тыш, халыҡҡа ла күрһәтергә кәрәк. Республикала йәшәгән һәр кем һәм һәр ҡунаҡ ошо коллекцияны үҙ күҙҙәре менән күрергә тейеш", - тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге етәксеһе Әхәт Мостафин һүҙҙәренсә, музей эшен асыҡ режимда ойоштороу өсөн һаҡ көсәйтелгән, экскурсия етәкселәре һәм ҡараусылар штаты киңәйтелгән. Музей К.Маркс урамындағы 6-сы йортта урынлашҡан. Тел: +7 (347) 272-29-79. Эш ваҡыты: көн һайын иртәнге сәғәт 10-дан киске 5-кә тиклем. Билет хаҡы - 200-400 һум, пенсионерҙарға һәм студенттарға ташлама бирелә.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓27 февралдә 8 март урамының участкалары өлөшләтә ябыла. Сиклəү ярты йыл - 27 августҡа тиклем ғәмәлдә була. Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, йоп яҡтан Һәҙиә Дәүләтшина бульварынан алып Владивосток урамына тиклемге участкала ике һыҙат буйлап йөрөй торған урын ябыла. Чиновниктар һүҙҙәренсә, эштәр 8 март урамын төҙөкләндереү менән бәйле.

✓Өфөнөң Ленин районында "алтын хыял" тренеры Сергей Михалев исемендәге урам барлыҡҡа килә. Атап әйткәндә, РСФСР-ҙың атҡаҙанған тренерының исемен Затон биҫтәһендәге Халыҡтар дуҫлығы проспектына перпендикуляр урынлашҡан яңы урамға бирергә тәҡдим ителә. Уның Спорт әҙерлеге үҙәге янында урынлашыуы ла символик мәғәнәгә эйә.

✓М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Талха Ғиниәтуллиндың әҫәрҙәре буйынса "Шәмсетдин һәм Шәмсүрә" спектакленең премьераһын әҙерләй. Спектакль 1 мартта Башҡорт опера һәм балет театры сәхнәһендә күрһәтелә. Спектаклдең художество етәксеһе - Айрат Абушахманов. Режиссер - Хөрмәтулла Үтәшев, рәссам - Альберт Нестеров, хореограф - Рәмизә Мөхәмәтшина. Музыкаль яҡтан биҙәлеш - Урал Иҙелбаев.

✓Өфөлә Затон биҫтәһендәге "Тулҡын" скверын төҙөкләндереүҙе тикшереүгә арналған кәңәшмә үтте. Реконструкция барышында күлде төҙөкләндереү ҡаралған. Көньяҡ өлөштә асыҡ һауала кафе һәм ял итеү өсөн урындар ойоштоторола. Әхмәтов урамында һәм Ирәндек урамының бер өлөшөндә парковка эшләү күҙ уңында тотола. Төп эштәр тамамланғас, төҙөүселәр эргә-тирәне төҙөкләндереүгә тотонорға тейеш. Шулай уҡ бында тантаналы саралар өсөн мемориаль комплекс планлаштырыла.

✓Мартта Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө уңайынан рәсәйҙәрҙе өҫтәмә ял көнө көтә. Быйыл 8 Март байрамы йәкшәмбегә тура килә. Ял һәм байрам көнө тап килгән осраҡта, ял көнө байрамдан һуң килгән эш көнөнә күсерелә. Шуға ярашлы, 8 марттағы ял (йәкшәмбе) 2020 йылдың 9 мартына (дүшәмбе) күсерелә. Шулай итеп, байрам уңайынан биш көнлөк эш аҙнаһында 7, 8 һәм 9 март байрам көндәре булып тора.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

**✓ Был технологиялар полиция, оператив һәм коммуналь хеҙмәттәрҙең уңышлы эшмәкәрлегенә ярҙам итеүҙе күҙаллай. Шуға күрә республика Башлығы видеокүҙәтеү зонаһын киңәйтергә тәҡдим итте.**



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТИКШЕРЕҮГӘ...

## етәкселәр сыҡты

**Йәшерен-батырыны юҡ: тормошобоҙ ҡағыҙға теркәлгән күҙ буяуҙар менән тулған, ҡыҫҡаһы, һәр кем - вазифалыһы ла, эшҡыуары ла, эшем эйәһе лә үҙ урынында алдашырға тырыша. Республика етәксеһе булып яңы, йәш, энергиялы Радий Хәбиров килгәс, хәлдәр бер аҙ үҙгәрҙе, сөнки ул ҡағыҙ отчеттарға ғына ышанып ултырмай, район-ҡалалар буйлап йөрөп, ҡағыҙға яҙылғандарҙың ғәмәлдәге эш менән ниндәй кимәлдә тура килеү-килмәүен, урындарҙа ниндәй проблемалар булыуын тикшерә. Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин менән республика Башлығы Радий Хәбиров баш ҡала биләмәләрендәге хәл-торош менән танышты.**

Һуңғы йылдарҙа ҡала хакимиәте Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары ашаһындағы территорияларҙы киңәйтеү һәм унда инфраструктура булдырыу маҡсатын яйлап тормошҡа ашыра. Өфө мэры Өлфәт Мостафин күптән түгел Калинин районына ҡараған ауылдар, шул иҫәптән Йылҡыбай, Карпов, Самохвалов, Федоровка ауылдары менән танышты. Атап үтелгән биләмәләрҙә 500 шәхси йорт иҫәпләнә һәм барлығы 2500 кеше йәшәй. Әле Йылҡыбай-Федоровка-Самохваловка төбәгендә 2 меңдән ашыу ер участкаһы күп балалы, физик мөмкинлектәре сикләнгән балалар тәрбиәләүсе ғаиләләргә бирелгән. Был территорияла 500 йорт төҙөлгән дә инде. Хәҙер иһә унда социаль: мәктәптәр, балалар баҡсалары, медицина учреждениелары һ.б. объекттар төҙөү ихтыяжы бар. Бының өсөн, әлбиттә, тәү сиратта юлдар, һыу, ут, канализация мәсьәләләре хәл ителергә тейеш.

Өлфәт Мансур улы киләсәктә мәғариф үҙәге булырға тейешле территория, уның планировкаһы һәм ерҙәрҙе бүлеү проекттары менән танышты. Ул 2200 урынлыҡ мәктәпте, 350 урынлыҡ балалар баҡсаһын, физкультура-һауыҡтырыу комплексын һәм сменаһына 150 кешене ҡабул итеү ҡеүәтенә эйә 150 урынлыҡ ауыл амбулаторияһын үҙ эсенә алырға тейеш. Самохваловка ауылында халыҡ менән осрашҡандан һуң, Өлфәт Мостафин ҡыҫҡа мөҙҙәттә ауылдың халыҡ күп йәшәгән урындарына ут үткәрергә ҡушты. Шулай уҡ юлдарға ҡырсын һалыуҙы, балалар майҙансығын эшләү бурысын йөкмәтте, газ һәм һыу үткәреү мәсьәләләрен айырым контролгә алырға ҡушты.

Федоровка ауылында 105-се гимназияның 2-се корпусы иғтибар үҙәгендә торҙо. Бында яҡын-тирәләге ауылдарҙан 339 бала ике сменала уҡый. Мәктәп 1965 йылда төҙөлгән һәм 200 балаға иҫәпләнгән, әммә хәҙер йыл һайын балалар һаны арта бара. Мәсьәләне тиҙ арала хәл итеү өсөн баш ҡала хакимиәте етәксеһе бинаға ваҡытлыса төкәтмә эшләргә тәҡдим итте. Шулай уҡ иҫкергән фельдшер-акушер пункты урынына яңыһын төҙөү йәки иҫке бина эргәһенә заманса ФАП төҙөү мәсьәләһе лә ҡарала.

Бер нисә көндән һуң Өфө ҡалаһы территорияһы республика Башлығы Радий Хәбировтың тикшереүенә дусар булды. Уның сәфәре социаль объекттар һәм "Хәүефһеҙ ҡала" системаһын индереү барышы менән танышыуға арналды.

Октябрь районында урынлашҡан БР Мәғлүмәт-коммуникация технологиялары үҙәге базаһында бөгөн төбәктең мәғлүмәт системаларының технологик майҙаны - Республика мәғлүмәттәрҙе эшкәртеү үҙәге эшләй. БР дәүләт идаралығының һанлы үҫеше министры Геннадий Разумикин Инорста һәм Ленин урамында ҡуйылған интеллектуаль видеокүҙәтеү тураһында һөйләне. Программа-аппарат комплексы юғары сифатлы, бик күп мөмкинлектәргә эйә 951 камераны берләштерә. Был технологиялар полиция, оператив һәм коммуналь хеҙмәттәрҙең уңышлы эшмәкәрлегенә ярҙам итеүҙе күҙаллай. Шуға күрә республика Башлығы видеокүҙәтеү зонаһын киңәйтергә, уларҙы күмәк халыҡ ҡатнашлығында саралар үткән урындарға урынлаштырырға һәм Сипайлово биҫтәһенә ҡуйырға тәҡдим итте. Г. Разумикин аңлатыуынса, комплекстың мөмкинлектәрен "Башҡорт ихаталары" программаһы сиктәрендә ҡуйылған камераларҙың системаға ҡушылыуы иҫәбенә киңәйтергә була. Шулай уҡ бында "аҡыллы" туҡталыштар хаҡында ла әйтеп китергә кәрәк: улар ҙа видеокамералар һәм ярҙам саҡырыу төймәһе менән йыһазландырылған. Инорс биҫтәһендә Радий Хәбиров 112 хеҙмәтенә шылтыратып, диспетчер менән һөйләшеп тә алды.

Ферин урамындағы яңы полиция пункты сафҡа индерелеү менән Инорста урам енәйәтселеге 40 процентҡа кәмегән, тип теркәй статистика мәғлүмәттәре. Полиция хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, үҫмерҙәр араһында криминаль идеология таралмаһын өсөн мәктәп уҡыусылары менән даими рәүештә аңлатыу эштәре алып барыла.

Шулай уҡ республика Башлығы 345 урынлыҡ яңы балалар баҡсаһы менән дә танышты. Ул Инорста былтыр йыл һуңында тапшырылғайны, ошо көндәрҙә балаларҙы ҡабул итәсәк тә инде. Заманса өс ҡатлы, дөйөм майҙаны 4,5 мең квадрат метр булған бина 15 төркөмгә иҫәпләнгән. Был объект үҙ эсенә 1650 урынлыҡ мәктәпте лә алған мәғариф үҙәгенең беренсе сираты булып тора.

Бер ыңғай Радий Хәбиров менән Өлфәт Мостафин "Ҡашҡаҙан" һәм "Беренсе Май" парктарын төҙөкләндереү барышы менән дә танышты. Ҡала хакимиәте башлығы белдереүенсә, уларҙа эштәрҙе быйыл тамамлау планлаштырыла.

Әйткәндәй, "Үҙе юҡтың - күҙе юҡ" ти халыҡ мәҡәле. Йәғни тикшереп, ҡарап тороусы булмаһа, эште минән киткәнсе - эйәһенә еткәнсе, тип кенә лә эшләү ғәҙәткә ингән заманда йәшәйбеҙ. Ә ҡағыҙ нисек яҙһаң да түҙә... Бәлки, артабан, яҙыусы ла, һөйләүсе лә, эшләүсе лә - һәр кем үҙ урынында яуаплылыҡ тоя башлар?

**Зәйтүнә ЙӘНТҮРИНА.**

КӨНАУАЗ

# БУШҠА АШАТЫУ...

## сифатлы булырмы?

**РФ Федераль Йыйылышы Дәүләт Думаһы башланғыс синыф уҡыусыларын бушлай ашатыу тураһында закон проектын ҡабул итте. Уны Федерация Советы раҫлап, ил Президенты ҡултамғаһын һалһа, башланғыс синыф уҡыусыларын көнөнә бер тапҡыр бушлай туҡландырасаҡтар. Бының өсөн федераль, төбәк һәм урындағы бюджеттан аҡса бүленәсәк, шул уҡ ваҡытта төбәктәр ошо маҡсатта федераль ҡаҙнанан субсидия ла алырға хоҡуҡлы. Мәктәптәрҙең бер өлөшө был системаға яңы уҡыу йылынан, йәғни 1 сентябрҙән күсәсәк, тулыһынса 2023 йылға барлыҡ белем усаҡтарының да күсеп бөтөүе күҙаллана. Техник әҙерлек булған урындарҙа бушлай йылы аш быйылдан бирелә башлаясаҡ. Ҡанунды әҙерләүселәр был яңылыҡты балалар араһында аш эшкәртеү ағзалары сирҙәренең киң таралыуынан сығып индерә. Туҡланыуҙы ойоштороу менән белем биреү учреждениелары шөғөлләнәсәк, мәктәп сайттарында һәм балалар лагерҙарында көн һайын меню ҡуйыласаҡ. Ата-әсәләр балаларҙың һаулығы тураһында мәғлүмәт бирә ала. Был законды тормошҡа ашырыу өсөн киләсәктә 40 миллиард һум талап ителәсәк. Ә ата-әсәләр, уҡытыусылар был хаҡта ниндәй уйҙа, әйҙәгеҙ, улар фекеренә лә ҡолаҡ һалайыҡ.**

***Лариса ВӘЛИШИНА, Шамонино дөйөм белем биреү мәктәбенең башланғыс синыфтар уҡытыусыһы:*** Беҙҙең белем усағы ашханаһында ризыҡтарҙы тәмле итеп әҙерләйҙәр, шуға балалар яратып һәм теләп йөрөй. Әле күп балалы ғаиләләрҙән булыусылар бушлай ашай, башҡалар өсөн көнөнә 50 һум иҫәбенән меню төҙөлә. Шулай булһа ла, аҡса йыйыу проблемаһы тыуғаны юҡ, ата-әсәләр аңлап, балаларының туҡ йөрөүен уйлап, ваҡытында түләй. Һәр хәлдә, ошо йылдарҙа үҙ класымда, ашамайым, тип баш тартҡан баланы йәки балаһын мәктәп ашханаһында туҡландырыуға ҡаршы булған ата-әсәне күрмәнем. Әгәр киләсәктә башланғыс синыфтарҙы мәктәптәрҙә бушлай ашатыу ойошторолһа, әлбиттә, был йәш ғаиләләр өсөн үҙенә күрә ярҙам буласаҡ.

***Айгөл РӘШИТОВА, күп балалы әсә:*** Тәү сиратта, әлбиттә, туҡланыу сифатының яҡшырыуын теләр инем. Дүрт балам да мәктәптә уҡый һәм улар һәр саҡ ризыҡтарҙың сифатына зарлана. Ҡыҙҙарым - 4, 7, 10-сы синыф уҡыусылары - бер нисә йыл элек, ризыҡ ашарлыҡ түгел, тип, мәктәп ашханаһында туҡланыуҙан баш тартты һәм шунан бирле өйҙән алып баралар. Дәрестәр күп, 8-9 дәрес булып китә, шуға көн оҙоно ашамай ҙа йөрөп булмай. Бәләкәй улым беренсе синыфта уҡый, ул да мәктәп ризығының тәмһеҙ һәм һыуыҡ булыуына зарлана, әммә ул үҙе менән өйҙән май һыланған икмәк һәм эсемлектәр алып китә. Шуға күрә, бушлай булған туҡланыу сифаты күтәрелеп, ул тәмләнеп китер, тип уйламайым. Ризыҡтың күп өлөшө түгеләсәк. Мәктәптә бушлай ашатыу ойошторғансы, ғаиләләргә туҡтауһыҙ үҫкән коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәргә етди льготалар ҡаралһа, яҡшыраҡ та, файҙалыраҡ та булыр ине.

***Әлиә ХӘЛИТОВА, хужабикә:*** Әгәр ҙә хәҙер мәктәп ашханаларын аутсорсинг системаһы менән хеҙмәтләндереүсе ойошмалар үҙ бурысына етди һәм яуаплы ҡарап, ризыҡтар тәмле, өҫтәлгә эҫе килеш килеп етһә, был күп ғаиләләр өсөн яҡшы һәм уңайлы буласаҡ. Әммә йәмәғәт туҡланыуына өйрәнмәгән, вегетариандар, хәләл ризыҡты өҫтөн күреүселәр һәм башҡа категориялар барлығын да онотторға ярамай. Бер синыфта 25-30 бала өсөн 5-6 төрлө меню әҙерләп ултырырҙармы икән, шуныһы һорау тыуҙыра. Мәҫәлән, минең балаларым хәләл ризыҡҡа өйрәнгән һәм улар ашарға үҙҙәре менән йөрөтә. Ниндәйҙер бала салат ҡына ашай, икенсеһе, киреһенсә, салат ашамай, итле аҙыҡты өҫтөн күрә. Кемгәлер ҡара икмәк, кемгәлер аҡ күмәс, кемгәлер сүпрәле, икенсеһенә ҡомалаҡ икмәге... Тәүҙә, бәлки, бындай талаптар иҫәпкә алыныр, әммә тора-бара улар онотолоп, "яҡшыраҡ булыуын теләгәйнек, ғәҙәттәгесә килеп сыҡты" тип ултырырға тура килмәгәйе... Шуға күрә, был эш изге ниәттән башланған икән, уны етди контролгә алып, илке-һалҡылыҡҡа юл ҡуймайынса, ысынлап та балалар мәнфәғәтен күҙаллап башҡарырға кәрәк, тип уйлайым.

**Шәрифә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Быуын шеше

❖ Быуын шеше (артрит) һәм ревматизмдан яфаланғанда яңы әҙерләнгән 700 мл кишер һәм 300 мл селдерей һуттарын ҡушып, көн һайын берәр стакан эсегеҙ.

❖ Быуын шешен дауалағанда, шулай уҡ 100 г спирт, 50 г гәрсис онтағы, 50 г камфора һәм 100 г туҡылған йомортҡа ағын ҡушып болғарға. Килеп сыҡҡан шыйыҡ май менән һыҙлаған урындарҙы ыуырға.

## Йоҡоһоҙлоҡтан

❖ 2 балғалаҡ ҡомалаҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнгөгә 1 стакан эсеп ятырға.

❖ Йоҡоһоҙлоҡтан ҡотолоуҙың тағы бер ысулы бар: бөтнөк, һары мәтрүшкә, розмарин, мелисса япраҡтары, бесәй үләне тамыры һәм ҡомалаҡты 20-шәр грамм алып, бутарға. Килеп сыҡҡан үләндәр ҡатышмаһының 1 ҡалағына 1 стакан һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Көн һайын 1/3 стакан эсергә.

❖ Шулай уҡ, ҡомалаҡ, бөтнөк япрағы, бесәй үләне тамыры һәм вахта үләне япрағын 1:1:1:2 нисбәтендә алып бутарға. 1 ҡалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 2 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

## Иммунитетты нығытыу

❖ Яҙға табан организм хәлһеҙләнә, иммунитет ҡаҡшай. Уны нығытыу өсөн ҡыҙыл төҫтәге һуттар - сейә, еләк, гранат, ҡара бөрлөгән, мүк еләге, ҡыҙыл көртмәле һәм сөгөлдөр һутын эсергә кәрәк. Беренсе аҙнала көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан һут эсергә. Икенсе аҙнала - көнөнә 2 тапҡыр шулай уҡ яртышар стакан, ә өсөнсө аҙнала төш мәлендә генә ярты стакан һут эсергә. Төрлө һуттарҙы аралаштырып эсеү һөҙөмтәлерәк була. Кәрәк осраҡта дауаланыуҙы 10 көндән яңынан ҡабатларға була.

## Панкреатит

❖ Даими рәүештә әсе тәмләткестәр һалынмаған диңгеҙ кәбеҫтәһе ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләнә.**

***✓ Ысынында, йыл һайын Бөтә Рәсәй кимәлендә, халыҡ-ара ҡатнашлыҡта шундай ҙур конференциялар уҙғарыла, әммә уларҙа яңғыраған иң алдынғы тәжрибәләр һуңынан республика мәктәптәренә таратыламы?***



*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Себер һәм Урта Азия халыҡтарының биҙәү-ғәмәли сәнғәте буйынса оло белгес С.В. Иванов музей, архив һәм ялан материалдарын анализлап, төрки һәм монгол халыҡтарына хас тамбур, элмәк һәм типсеү декоратив йөйҙәренең ҙур төркөмөн билдәләгән. Уларҙың күбеһе көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында ҡулланылған. Ябай элмә һәм ҡуш элмәнән тыш кәкерсәк, "кәзә тояҡ", "ҡаҙ тәпәйе", "шыршы" һ.б. төр йөйҙәр ҡулланылған. Шулай уҡ әйберҙәрҙә йөйләп, сәнсемләп, шыма нағышлау, ҡыя сәнсемләп сигеү осраған.

Көньяҡ-көнсығышта элмә (ябай тамбур) ярҙамында ҡусҡарлы фигуралар һәм аппликацион биҙәктәрҙең ситен йөрөтөп сыҡҡандар. Көньяҡ райондарҙа йыш ҡына кейеҙҙән эшләнгән келәмдәргә күп компонентлы нағыш һалғанда ябайыраҡ биҙәктәрен нескә генә элмә ярҙамында эшләгәндәр. Баймаҡ районының Исән ауылындағы боронғо бөрйән ырыуы келәмендә (РЭМ, кол. 1234-61) аппликация теҙеме менән ҡаймаланған келәмдең ҡап уртаһындағы тура дүртмөйөш урындан үҫеп сыҡҡан оҙон һаплы нескә генә мөгөҙгә оҡшаш фигуралар бер ҡатлы элмә итеп сигелгән. Ҡуш элмә йәки элмәк йөй ярҙамында тура дүртмөйөш периметры буйлап йондоҙҙар һәм түңәрәк оя биҙәктәр эшләнгән. Төҫлө ҡайманың тоташтырып тегелгән урыны диагональ буйлап кәкерсәкләп сигелгән.



*Боронғо келәм (БР, Баймаҡ районы, Исән ауылы) РЭМ. XX б. башы.*

Контурлы кәкерсәк, ҡаҙ тәпәйле йәки мыйыҡлы кәкерсәк, "кәзә тояҡ" ҡаймаларҙа ҡулланылған. Былдай йөйҙәр менән сергеләрҙең төҫлө ситен йәки янсыҡтарҙың нағышлы өлөшөн уратып ҡайығандар. Ҡулдан сигелгән кәкерсәк менән биҙәкле урын тартмаһын бер нисә өлөшкә бүлеп сыҡҡандар. Кейеҙҙе нағышлы тауар менән көпләгәндә ҡырынан сығарып тәүҙә бер йүнәлештә, һуңынан икенсе йүнәлештә йүрмәп теккәндәр, ептәр ҡыялап тоташҡан һәм ҡыя сәнсем барлыҡҡа килгән. Ҡыя сәнсем, кәкерсәк кеүек үк, ҡайыу алымын ғына түгел, ә башҡорттарҙың биҙәү-ғәмәли сәнғәтенең бөтә төрҙәрендә лә киң ҡулланылған айырым бер ҡайма биҙәктәрен дә аңлатҡан.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ТУҒАН ТЕЛЕМ...*

**Ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт университетында "Башҡортостан Республикаһында һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәрендә башҡорт телен уҡытыуҙың хәҙерге проблемалары" темаһы буйынса Башҡорт теле йылына һәм Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетының 30 йыллығына арналған V Бөтә Рәсәй (халыҡ-ара ҡатнашлыҡтағы) фәнни-методик конференция үтте.**

# АЛДЫНҒЫ ТӘЖРИБӘЛӘР...

## тыңлана, әммә ҡулланылмай түгелме?



Сараны сәләмләп, уҡыу йорто ректоры Николай Морозкин телмәрен башҡорт телендә башланы. "Барыбыҙ ҙа беләбеҙ - тема бик актуаль, - тине ул артабан руссаға күсеп. - Заманса мәғлүмәт технологияларын ҡулланып, телдәрҙе, атап әйткәндә, башҡорт телен өйрәнеүҙе мәктәп уҡыусылары, студенттар өсөн нисек ҡыҙыҡлы итергә, тигән һорау барыбыҙҙы ла борсой, сөнки телгә булған ҡыҙыҡһыныу - ул мәҙәниәт менән дә ҡыҙыҡһыныу булып тора. Элек ҡулланылған алымдар бөгөн яраҡһыҙ, уҡыусылар ҙа икенсе, уҡытыусы ла иң абруйлы һөнәр эйәһе, иң абруйлы шәхес түгел. Бөгөн балаларға белем биреүе ҡатмарлашты. Ни өсөн? Сөнки яңы мәғлүмәт технологиялары барлыҡҡа килде. Улар шул тиклем тиҙ үҙгәрә, уларҙы аңлап та, эшләп тә өлгөрөүе ауырға тура килә. Ә балалар һәр ваҡыт гаджеттар, мәғлүмәт технологиялары менән эш итә. Шуға күрә, республикала Башҡорт теле йылы иғлан ителгәндә башҡорт телен уҡытыуҙың актуаль ысулдарын ҡулланыу мәсьәләһен күтәреү бик мөһим. Бөгөнгө конференция телде өйрәнеүҙе ҡыҙыҡлы итеү өсөн бер йүнәлештә хәрәкәт итеү векторын билдәләр, тип өмөтләнәм. Мәҫәлән, инглиз телен өйрәнәм тиһәң, гаджеттарҙа программалар, ҡушымталар бар, ни өсөн улар башҡорт теле өсөн юҡ? Шуға күрә, бөгөн дөрөҫ стратегия һайланыр һәм конференция быға ярҙам итер, тип ышанам".

Сарала рәсми вәкилдәрҙән Башҡортостан Фәндәр академияһы вице-президенты Айтуған Аҡмановтың ҡатнашыуын иҫәпкә алмағанда, башҡа ойошмалар: Мәғариф министрлығы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды, Өфө ҡалаһы мәғариф идаралығы бары тик әйҙәүсе белгестәрен йәки ағзаларын ғына ебәреүҙе хуп күргән. Әйе, ул көндө башҡорт телендә ҡағылышлы башҡа мөһим саралар ҙа үтә ине. Әммә бөгөн белем усаҡтарында башҡорт телен уҡытыуҙың проблемаларын асыҡлау һәм хәл итеүҙән дә мөһимерәк мәсьәлә булыуы мөмкинме?

Пленар ултырыштағы сығыштарҙың иғтибарға лайыҡ бер нисә мәләнә туҡталып үтке килә: Өфө ҡалаһының күп профилле һөнәри колледжының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фәнзил Саньяров белдереүенсә, балаларҙың 60 проценты уҡыуын колледждарҙа дауам итә. Шуға күрә башҡорт телен уҡытыуҙы балалар баҡсаһы-мәктәп-колледж-вуз маршруты буйынса өҙлөкһөҙ алып барырға кәрәклеген билдәләне ул.

Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Светлана Тимерғәлиева дәрестәрҙә заманса мәғлүмәт технологиялары, йәғни Adobe Pro Premiere программаһын ҡулланыу шарттары һәм үҙенсәлектәре менән таныштырҙы, шулай уҡ балаларҙың "Тамыр" студияһы менән берлектә хеҙмәттәшлек итеүе, мәктәп һәм ҡала тормошонан башҡортса видеосюжеттар төшөрөп, уларҙы үҙҙәре үк монтажлап ебәреүҙәре хаҡында мауыҡтырғыс итеп һөйләне. Балаларҙың был эше өлкәндәр донъяһына хас бер күренеште асырға һәм аңларға ярҙам итә: ниндәй генә сюжет әҙерләмәһәндәр, улар ололар араһында башҡортса интервью бирерҙәй кеше тапмауҙарына борсолоу белдерә. Тимәк, хатта бала-сағалар мәктәптә генә түгел, йәмғиәттә лә башҡорт теле, ошо телдә аралашыу мөхите булырға тейешлегенең мөһимлеген аңлай һәм ололар алдына шуларҙы булдырыу бурысын ҡуя! Әйткәндәй, был мәктәптә (Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияла) эшләп килгән программа - Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы факультеты менән берлектә алып барылған тәжрибә проекты.

БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы профессоры Рәмзәнә Әбүталипованың сығышы "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә һүҙлек эшенең урыны, роле" темаһына арналды һәм башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыусыларға тәғәйенләнде. "Дәрестә балаларға 4-5 кенә башҡортса яңы һүҙ бирергә һәм шуларҙың мәғәнәһен аңлатырға кәрәк. Икенсе дәрестә яңы һүҙҙәр өйрәнергә һәм беренсе дәрестә өйрәнелгәндәрҙе мотлаҡ ҡулланырға кәрәк. Балаға 400-500 һүҙҙе яҡшы белеү етә - теләһә ниндәй телдә лә аралашыу нигеҙе булдырыу өсөн ошо хәтле һүҙ кәрәк", - тине ул һәм нисек һүҙлек төҙөү, һүҙҙәрҙе нисек ҡулланыу, балаларға аңлайышлы булһын өсөн ниндәй алымдар ҡулланыу һөҙөмтә биреүен аңлатты.

Баш ҡаланың 162-се полилингваль мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гүзәл Фазылова яңы белем усағында дәрестәрҙә бөгөн йәмғиәттә популяр булған SCRUM-алым, йәғни проекттар менән идара итеү ысулын ҡулланыуҙары тураһында бәйән итте. Был мәктәптә башҡорт теле генә түгел, барлыҡ дәрестәр ҙә ошо ысул нигеҙендә үткәрелә: балалар ғәҙәти парта артында ултырмай, ә төркөмдәргә бүленеп, дәрестә һәр кем әүҙем ҡатнаша, һәр фекер теркәлеп, һуңынан балалар команда менән үҙҙәренең фекерен анализлай һәм яҡлай.

Ысынында, йыл һайын Бөтә Рәсәй кимәлендә, халыҡ-ара ҡатнашлыҡта шундай ҙур конференциялар уҙғарыла, әммә уларҙа яңғыраған иң алдынғы тәжрибәләр һуңынан республика мәктәптәренә таратыламы, уларға анализ яһаламы, әллә был саралар отчет өсөн генә үткәреләме, тигән уй ҙа тыуа. Мәҫәлән, стәрлеләрҙең уҡытыу алымы республиканың күпмелер районына тәжрибә рәүешендә таратылып, уға тиклем уҡытыу кимәле һәм сифаты шунса, дәрестәрҙә балалар һаны шунса ине, был алымды ҡуллана башлағандан һуң күрһәткестәр артты йәки кәмене, тигән һығымталар яһалыуы барыһына ла ҡыҙыҡлы булыр ине бит. Юҡһа, сығыш яһаусылар һөйләп, ҡалғандар тыңлап ҡайта ла, артабан һәр кем тағы ла үҙенсә эшләүен дауам итә. Һөҙөмтәлә проблемалар шул килеш хәл ителмәй ҡала килә...

Әйткәндәй, конференциянан һуң район хакимиәттәренең береһенән шылтыратып, Башҡорт теле йылы буйынса һорау бирҙеләр: "Йыл рәсми рәүештә ҡабул ителдеме ул, әллә юҡмы? Башҡорт телен үҫтереү буйынса күрһәтмә әҙерләргә кәрәк, нигеҙләр өсөн рәсми документ юҡ...". Эйе, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының быйыл Башҡорт теле йылын үткәреү инициативаһын Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та хуплаhandа, әммә эш шунан ары китмәне - Ҡоролтай ҙа тынысланды, Хөкүмәт тә уға рәсми статус бирмәне һәм йыл атамаһы йәмғәт ойошмалары кимәлендә генә тороп ҡалды. Һәр хәлдә, әлеге конференцияла рәсми органдарҙан беренсе вәкилдәр, исмаһам, уларҙың урынбаҫарҙары булмауы башҡорт теленә мөнәсәбәттең асыҡ сағылышы булып торалыр, моғайын. Нисек кенә булмаһын, телебеҙҙе һаҡлау - үҙебеҙҙән дә тора. Быны өсөн мөмкинлектәр ҙә, өлгө итеп алырлыҡ тәжрибә лә бар. Бары тик алдынғы тәжрибәләрҙе күпләп таратырға ғына кәрәк. Булған методикалар менән әүҙем ҡыҙыҡһынырға, уңышлы тип танылғанын (Стәрлетамаҡтағы һымаҡ!) тиҙ арала үҙләштереп, балаларға мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәтә башларға ваҡыт.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ШАНЛЫ ТАРИХЛЫ ҠАҢЛЫЛАР БЕҘ!



Башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылған осорҙа, йәғни XVI быуаттың икенсе яртыһында, риүәйәттәргә ярашлы, ҡаңлыларҙың Иҙәш батыр исемле бейе булған. XVIII быуатта Петр Рычков ҡаңлыларҙың Иҙел-Ҡаңлы, Ҡыр-Ҡаңлы, Йөрәктау-Ҡаңлы, Аҡтау-Ҡаңлы исемле аймаҡтарын яҙып алған. Ҡыр-Ҡаңлы һуңынан Үрмәкәй (аҫаба башҡорт Үрмәкәй Көнгилдин исеме менән) түбәһе, тип атала башлай. Шулай уҡ ҡайһы бер документтарҙа Туҡбай, Балғазы (Төркәй Балғазин исеменән), Шәмшәҙе түбәләре теркәлгән. Хәҙер Шәмсетдин күле тип йөрөтөлгән күлдең әүәлге атамаһы ла Шәмшәҙин булыуы ихтимал. Шәмшәҙе түбәһе башҡорто Солтанай Тенәковтың 1700 йылда яҙған хаты һаҡланған: "Исстари владел прадед и деево и он владеет в старых урочищах вотчиною своею на Белой реке: верхняя межа - по Оконетав да вниз по Белой реке, нижняя межа - лук Яда по обе стороны той Белой реки, с песками и з затоны из заводьми и с озеры и с малыми речками и с ыстоки и з заливными водами и з бортными ухожьями и со всякими рыбными и звериными ловлями и бобровыми гонами и с сенными покосами и со всякими угодьями". Солтанай Тенәков Петр батшаның Азов походтарында ла ҡатнашҡан була: "И по наряду были они в Донском походе под Азовом и стояли с приезду до отпуску".

Ҡаңлы башҡорттары 1662-1664 йылдарҙағы ихтилалда әүҙем ҡатнаша, уларҙан тартып алынған ерҙә Бөрө ҡалаһы төҙөлә: "...изменников вотчины запустели, на которые поставлен Бирский городок, и поселили в их вотчинах мещеряков 20 дач черемисов 10 дворов". Шуға ҡарамаҫтан, улар 1681-1684 йылдарҙағы Сәйет бунтында ҡатнаша. Ошо хаҡта ла әлегә тиклем һаҡланып ҡалған документтар бар, мәҫәлән, Ҡаңлы олоҫо башҡорттары Мерәҫ Тусареев һәм Йылҡыбаш Алчиндың властарға мөрәжәғәтендә бына ниҙәр яҙыла: "в башкирскую измену Калнинской волости изменники 20 дворов башкирцы живут в измене". Улар ихтилалдан һуң хужалыҡтар һанының кәмеүенә һылтанып, яһаҡ күләмен кәметеүҙе һорай.

1725-1726 йылдарҙа Көнгөр бургомистры Юхнев төҙөткән реестрҙа "Шашкадинский" (Шәмшәҙе) олоҫонда 650 хужалыҡ теркәлеп, унда һуғышҡа яраҡлы 1950 ир-егет булыуы асыҡланған. Ә Ҡаҙан даруғаһының "Кайман" олоҫонда (П.И. Рычков та Ҡаңлы урынына "Кайлинская", тип яҙа; ысынында - Канлинская) 500 хужалыҡ һәм 1500 яугир булырлыҡ ир заты теркәлә.

Ҡаңлылар 1735-1740 йылдарҙағы оҙайлы ихтилалға ла ҡушыла. Балғазы (Ҡаңлы Төркәй) ауылында буласаҡ хәрәкәт етәкселәре Аҡай Күсемов, Солтанморат Дюскеев, Үмәр Тохтаров һәм башҡалар Ырымбур экспедицияһының ниндәй маҡсатта ойошторолоуына аңлатма биреүҙе талап иткән мөрәжәғәт ҡабул итә. Башҡорттарҙың талаптары инҡар ителгәс, ихтилал ҡуба. Килмәк Нурушев етәкселегендәге 3 меңлек башҡорт отряды 1735 йылдың 1 июлендә Вологда драгун полкына һөжүм итә. Ихтилалсыларға үҙ ырыуҙаштары менән Теүәк Ҡоломбәтов, Балғазы Әтиков, Нурҡай һәм Арыҫҡол исемле Ҡаңлы олоҫо старшиналары ҡушыла. 1737 йылға ҡараған бер документта "главные воры башкирцы Казанской дороги, Калнинской волости" Канмурза и Туркей Балгазины "с товарищи", тип аталған ихтилалсыларҙың хөкүмәткә тоғро булған мишәр старшиналарының хужалыҡтарын туҙҙырыуы хаҡында хәбәр ителә.

Пугачев етәкселегендәге күтәрелеш ваҡытында Ҡаңлы ырыуы башҡорттарынан старшина, полковник дәрәжәһен алған Минәй Һултыҡов (Султуков) Ҡаранай Моратов отрядында Кама буйында барған яуҙарҙа ҡатнаша.

XIX-XX быуаттарҙа Ҡаңлы еренән башҡорт элитаһының йөҙөк ҡашы булырҙай арҙаҡлы шәхестәр үҫеп сыға. Иң элгәре аталы-уллы Шәйхадар һәм Ғәлиәскәр Сыртлановтарҙың исемдәрен атап китеү урынлы булыр. Шәйхадар Сыртланов хәҙерге Бүздәк районының Шланлыкүл ауылында есаул, XII кантон начальнигы Шаһимәрҙән Сыртланов ғаиләһендә тыуа. Неплюев кадет корпусын тамамлағас, 9 йыл Төркөстанда хеҙмәт итеп, капитан дәрәжәһендә отставкаға сыға. 1887-1891 йылдарҙа Бәләбәй өйәҙендә земство управаһы рәйесе була. Нәҫелле дворянин булараҡ, 2 200 десятина ер биләмәһенә эйә була. Өфө губернаһында мосолман хәрәкәте етәкселәренең береһе, шулай уҡ кадеттар партияһы ағзаһы була. Өфө губернаһынан I һәм II Дәүләт Думаһына депутат итеп һайлана, мосолман фракцияһына инеп, Дума трибунаһынан 8 тапҡыр сығыш яһай. Үҙенең сығыштарында башҡорт аҫабалығын яҡлап, үҙ халҡының ерҙәрен талауға ҡаршы сыға. Уның улы Ғәлиәскәр Сыртланов та атаһы юлынан барып, хәрби хеҙмәттә була. Хәрби-юридик академия тамамлап, Хәрби министрлыҡта вазифалар биләй, Санкт-Петербургтың хәрби судында адвокат булып танылa. Ғ. Сыртланов шулай уҡ III Дәүләт Думаһының мосолман фракцияһы ағзаһы ла була.

XX быуат башындағы инҡилаптар осоронда ҡаңлы улдары Шәйехзада Бабич һәм Муллаян Халиҡов башҡорт милли хәрәкәтенең иң күренекле эшмәкәрҙәре булараҡ киң танылыу ала. Башҡорт халҡының йәш, әммә һирәк осрай торған поэтик талант эйәһе, тыуған халҡына дан йырлаған Шәйехзада Бабич 1919 йылда ҡанһыҙ ҡыҙылармеецтар тарафынан вәхшиҙәрсә язалап үлтерелә. Ә.-З. Вәлиди арҡаҙаштарының береһе, Башҡорт АССР-ның Халыҡ комиссарҙары Советы рәйесе вазифаһын башҡарған Муллаян Халиҡов та 1937 йылда репрессияға дусар ителеп, һәләк була.

Совет осоронда ҡаңлы ырыуынан сыҡҡан йөҙҙәрсә арҙаҡлы шәхестәр, зыялылар, хеҙмәт алдынғылары араһынан Зыя Нурый улы Нурыев исемен айырым атап үтергә була. Ул оҙаҡ йылдар партия органдарында эшләй, 1957-1969 йылдарҙа КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының 1-се секретары була. Һуңынан З.Н. Нурыев СССР Хөкүмәте министры, СССР Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары вазифаларында эшләп, барса илгә билдәле дәүләт эшмәкәре булараҡ киң танылыу яулай.

Советтар Союзы Геройы, летчик Мәғүбә Сыртланова, генерал-майор Ғәлиян Ғәлиев, халыҡ сәсәне Фәррах Дәүләтшин, талантлы яҙыусы Али Карнай, ғалим-фольклорсы, яҙыусы Кирәй Мәргән (Әхнәф Кирәев), Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Ғабдулла Ғиләжев, билдәле яҙыусылар Хәким Ғиләжев, Флорид Бүләков, шағирә Факиһа Туғыҙбаева, химик, профессор Нәжип Вәлитов, Башҡортостандың халыҡ артистары Фидан Ғафаров, Таңсулпан Бабичева, тыуған яҡты өйрәнеүсе Фәнил Шәрипов һәм башҡа бик күп ырыуҙаштары менән ҡаңлылар хаҡлы рәүештә ғорурлана.

Ҡаңлы ырыуы башҡорттары араһында уҙғарылған генетик тикшеренеү өлгөләре уларҙың башлыса G1-M285 гаплотөркөмөнә ҡарауын асыҡланы. Был генетик төркөмгә ҡараған кешеләр шулай уҡ ҡаҙаҡтарҙың арғын ырыуында йыш осрай. Иранда, Төркиәлә ошо гаплотөркөмгә ингән кешеләр байтаҡ. Был объектив фактты боронғо һинд-иран донъяһы менән ҡаңлы башҡорттары араһында булған нәҫел бәйләнешен раҫлаусы етди дәлил итеп ҡарау фарыҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 5,7-8-се һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Дивизияның тыуыуы

Полк комиссары Сәғит Әлибаев яҙғанса, тәжрибәле һәм ихтыяр көсө ҙур булған Таһир Кусимов, полкка килеү менән ныҡлы тәртип булдыра, хәрби әҙерлектә дивизия командиры Миңлеғәли Шайморатовтың иң яҡын ярҙамсыларының береһе булып китә. Т. Кусимов яугирҙарҙың физик әҙерлегенә айырыуса ҙур иғтибар бирә, төрлө күнекмәләр, спорт ярыштары ойоштороп, үҙе лә һалдаттары һәм кесе командирҙары менән ярышҡа сыға. Ул 30-сы йылдарҙа уҡ Ҡыҙыл Армияның хәрби округтарында ойошторолған спорт ярыштарында, бигерәк тә атлы ярыштарҙа йыш ҡатнашып, еңеү яулай. 1936 йылда ат спортында күрһәткән ҙур уңыштары өсөн уны Мәскәүҙә маршал С.М. Буденный исемле ҡорал менән бүләкләй.

Дивизия ойошторолоп, уның подразделениеларын комплектлау тамамланған мәлдә уның милли составы бына шулай була: башҡорттар - 81,5 процент, татарҙар - 14,5 процент, рустар - 3,3 процент, башҡа милләттәр - 0,7 процент. Был нисбәт ошо дивизияның исеменең есеменә тура килеүен асыҡтан-асыҡ раҫлап тороусы төп дәлил ул. Сәйәси яҡтан партия һәм комсомол сафында тороусыларға айырым иғтибар бирелә. ВКП(б) ағзалары һәм ағзалыҡҡа кандидаттар - 21,4 процент, комсомолецтар - 10,7 процент тәшкил итә. Дивизия яугирҙарының йәш буйынса составы унда башлыса урта йәштәге кешеләрҙең өҫтөнлөгөн күрһәтә. 1905 йылдан 1915 йылға тиклем тыуғандар 70 процент булһа, 1916 йылда һәм унан һуңыраҡ тыуғандар - 22 процент (25 йәшкә тиклемгеләр), ә олораҡ быуын вәкилдәре, йәғни 1905 йылдан алдараҡ тыуған һалдаттар 8 процент була. Социаль состав буйынса яугирҙарҙың 66,6 проценты - колхозсыларҙан, 26 проценты - эшселәрҙән, 7,4 проценты хеҙмәткәрҙәрҙән була.

1942 йылдың март башында дивизияға Көньяҡ Урал хәрби округының Хәрби советы комиссияһы килә. Комиссия ағзалары дивизияның частарында һәм подразделениеларында була, тактик учениеларҙа ҡатнаша. Көньяҡ Урал хәрби округы ғәскәрҙәренең командующийы, генерал-лейтенант В.Н. Курдюмов атлыларҙың күнекмәләрен күҙәтә: һыбайлылар эйәрһеҙ аттарҙа сабып килгән килеш ағас ҡылыстары менән бик оҫта эш итә белеүҙәрен күрһәтә.

Дивизияның хәрби әҙерлегенә яҡшы баһа бирелә. Хәрби әҙерлек хаҡындағы актта былай тип яҙыла: "Хәрби техника алынғандан һәм материаль яҡтан тәьмин итеү тамамланғандан һуң, 10-15 көндән дивизияны хәрәкәттәге армия составына индерергә мөмкин".

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**✓ Тәү сиратта, фатир һатыусы ла, һатып алыусы ла мөһим документтарға иғтибар итергә тейеш. Документтарҙы юридик яҡтан тикшерергә кәрәк. Фатирҙы ышаныс ҡағыҙы буйынса һатыуға ҡуйғанда ла абай булырға кәрәк.**



**Илдәге иҡтисади-социаль торош тормошобоҙҙоң бер өлкәһенә лә йоғонто яһамай ҡалмай. Көнкүрешен яҡшыртырға теләп, күптәр ошо яңы шарттарға яраҡлашырға тырыша һәм йыш ҡына һөнәрен, эш урынын үҙгәртеүҙән башлай. Бер ҡайҙа ла махсус юғары белем бирелмәһә лә, төрлө курстар үтеп, күберәк килем килтергәндәй оҫталыҡтарға эйә булырға ынтылғандар күп. Хеҙмәт баҙарында сағыштырмаса яңы һөнәр - күсемһеҙ милек агенты ла тап бына шундай махсус юғары белем талап итмәгән замана эше. Әммә уның да үҙ талаптары, нескәлектәре бар һәм быларҙың барыһы тураһында ла беҙ редакциябыҙ ҡунаҡтары, күсемһеҙ милек агенттары Сажидә ИГЕБАЕВА һәм Альберт АРЫҪЛАНБАЕВ менән әңгәмәләштек.**

# ФАТИР ҺАТЫП АЛЫРҘАН

## баҙар хәлдәрен,



**Баш ҡалала ҡыҙыл кирбестән төҙөлгән тәүге йорттар үткән быуаттың 90-сы йылдарына ҡарай, бына уларҙың планировкаһы нығ айырыла һәм хаҡтары ла төрлө. Күсемһеҙ милек баҙарында эшләй башлаған ғына йылдарҙа бер бүлмәле фатир алырға теләп мөрәжәғәт иткән йәш ғаиләләр, "хрущевка" булһа ла ярай, ти торғайны. Ә хәҙер, иң мөһиме, "хрущевка" булмаһын, тиҙәр. Үҙем дә 5 ҡатлы йорттар ҡаланың бай инфраструктуралы ерендә урынлашыуына ҡарамаҫтан, унан фатир алырға кәңәш итмәйем, сөнки лифт, автомобилдәр өсөн парковка урыны юҡ. Әлеге ваҡытта Өфөләге 9 ҡатлы йорттар тирәһендә йәшәү өсөн уңайлыҡтар ҡәнәғәтләнерлек.**

**Күсемһеҙ милек агенты - заман талабына яуап биргән һөнәрҙәрҙең береһе. Был эшкә нисек өйрәндегеҙ, хеҙмәт юлығыҙҙы ниҙән башланығыҙ?**

**С. Игебаева:** Был һөнәргә мин эшһеҙлектән, аҡсаһыҙлыҡтан йонсоғандан килеп эләктем. Элек Эске эштәр органдарында эшләгәс, күсемһеҙ милек агенттарын, йәғни риэлторҙарҙы, бөтәһе кеүек үк мутсылар, тип иҫәпләй инем. Шуға дуҫым саҡырғас та баш тарттым, атай-әсәйем дә кәңәш итмәне. Атайым хатта "Өфө һынлы Өфөлә шунан башҡа эш тапманыңмы?" тип битәрләне. Әммә тормош үҙенекен итә, эшләп ҡарағандан бер нәмә лә юғалтмайым бит тип, ҙур ғына бер агентлыҡҡа килеп урынлаштым. Юридик яҡтан белемем яҡшы булыуы ла ярҙам итте, яҡшы етәксе ҡулы аҫтында тиҙ генә эш айышына төшөндөм дә, ошонда тороп та ҡалдым. Аҙаҡ инде был эштең кешегә файҙалы булыуына инандым. Бына шулай 5 йыл күсемһеҙ милек агенты булып эшләйем, үҙемә мөрәжәғәт итеүселәрҙең рәхмәттәрен ишетеп торам, һөнәремдән ҡәнәғәтмен.

**А. Арыҫланбаев:** Һөнәрем буйынса экономисмын. Башҡорт дәүләт университетын тамамлағандан һуң 7 йыл банкта эшләнем. Юғары вазифа, эш хаҡы тотороҡло булды, әммә иртәменән эшкә сығып китәһең, кис һуң ҡайтаһың һәм ғаиләне бөтөнләй күрмәйһең. Бөтә ғүмеремде шул банкка бүләк иткем килмәне, үҙ эшемде асырға ниәтләп эштән сығып киттем. Тәжрибә артынан күсемһеҙ милек буйынса ҙур агентлыҡҡа килеп урынлашып, бер йыл эшләнем дә үҙемдең шәхси агентлығымды астым.

**Бөгөн халыҡтың күсемһеҙ милек агенттарына ҡарата мөнәсәбәте бик шәптән түгел. Оҙаҡ ваҡыт халыҡ менән эшләйһегеҙ, бындай кире ҡараш ниҙән барлыҡҡа килгән тип иҫәпләйһегеҙ?**

**С. Игебаева:** Күсемһеҙ милек агенты тигән һөнәр үткән быуаттың 90-сы йылдарында хосусилаштырыу башланғас ҡына сит илдәрҙән отоп алынған һөнәр. Шул үҙгәртеп ҡороу осоронда "ҡара риэлторҙар" барлыҡҡа килгән, алданып милкенән яҙған кешеләр күп булыуы әлеге көндә лә күсемһеҙ милек агенттарына ышаныс юҡлығына сәбәпсе. Бөгөн был өлкәлә ысын белгестәр, кешегә ысын күңелдән яҡшылыҡ теләп ярҙам итергә тороусылар һирәк булыуын да йәшерергә түгел. Ябай кеше үҙ ғүмерендә иң күбе 3 тапҡыр ғына фатир һата һәм һатып ала, тиҙәр социологтар. Беҙ ҙур аҡсалар менән эш итәбеҙ һәм был намыҫһыҙ кешеләргә еңел килем алырға юлдар аса. Коллегалар араһында шундай бер көнлөк кешеләр, тәжрибәһеҙҙәр халыҡ менән мөнәсәбәтте боҙа.

**А. Арыҫланбаев:** Йәмғиәт үҙе шулай йәштән үк бөгөнгө көн менән генә йәшәргә өйрәтә кешене. Шуға ла күптәр иртәгәһен уйлап тормай, бер мәртәбә аҡса эшләп ҡалһам булды, тип йәшәп ята. Әммә хәҙер күсемһеҙ милек баҙарында белгескә мөрәжәғәт итмәй фатир һатыуы йәки алыуы ла еңел түгел. Үҙаллы һатырға булһалар ҙа, бөтә нескәлектәрен белмәгәс, оҙаҡ килешеү төҙөй алмай йәки документтар менән ҡатмарлыҡтар килеп сығып, күсемһеҙ милек агентына мөрәжәғәт итергә мәжбүр була кеше. Таныштар аша һорашып, кәңәш иткән риэлторҙарға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Яманатын сығарырға теләмәгән компаниялар алдауға юл ҡуймай.

**Өфөләге бөтә төҙөлөштәр буйынса хәбәрҙар булыуҙы талап иткән һөнәрҙәһегеҙ. Торлаҡ алыу мәсьәләһендә төп тенденция ниндәй?**

**С. Игебаева:** Юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ, тигәндәй, кеше хәленә ҡарап һайлай торлаҡты. Бөгөнгө көндә күсемһеҙ милектә иң үтмәгән тауар - ул ятаҡтағы бүлмә. Был төр торлаҡ һатылһа ла, бик арзан хаҡҡа төшә, сөнки ул үҙенең әһәмиәтен, сифатын юғалтҡан. Заманса күренешкә тап килмәй, тиергә лә була. Совет осоро түгел, кешеләр йыуыныу, бешеренеү урындары уртаҡ ҡулланылышта булыуын оҡшатмай. Ә бына ҡала ситендәге ауылдарға килгәндә, йәштәр Өфөнөң үҙендә йәшәргә ынтыла. Йыш ҡына ауылдағы өйөн һатып, ҡаланан фатир эҙләйҙәр, был тәү сиратта балаларына тәрбиә-белем биреү мәсьәләләренә бәйле. Ауылда торһаң, балаларҙы мәктәпкә, түңәрәктәргә йөрөтөүе ауырға тура килә, юлына ла китә, ауыл өйөн йылытыуы ла осһоҙ түгел. Ә бына беренсел йәки икенсел милек баҙарына килгәндә, аныҡ ҡына ниндәйҙер күренеш юҡ. Эш тәжрибәмдә шундай үҙенсәлеккә иғтибар иткәнем бар: райондан күсеп килгән башҡорттар үҙәктән йәки "Йәшел сауҡалыҡ" территорияһынан фатир алырға ынтыла. Ни өсөн шулайҙыр, әммә башҡа яҡтарҙы тәҡдим итә башлаһаң, бик ауыр ҡабул итәләр. Ә баш ҡаланың был ике өлөшөндә фатир хаҡтары иң ҡиммәт.

**А. Арыҫланбаев:** Һатып алыусыларҙың 85-90 проценты, ғәҙәттә, 5-9 ҡатлы панель йорттарҙы ҡарай. Сажидә менән килешмәй булмай, йәштәргә ҡаланан ситтә йәшәүе уңайһыҙ, ә үҙәккә яҡындан фатир алыуы ҡиммәт. Мин үҙем дә Дим биҫтәһендә йәшәйем, ҡыҙымды көн дә телеүҙәк эргәһендәге балалар баҡсаһына йөрөтәм, тиҙҙән улымды ла шул тирәләге берәй баҡсаға бирергә ине.

**Торлаҡ мәсьәләһенә килгәндә, ҡаланың үҙәгендә йәшәү өсөн төҙөлгән яңы биналар ҙа күп түгел...**

**С. Игебаева:** Өфөнөң күсемһеҙ милек баҙарын күҙҙән үткәрһәк, төрлө йылдарҙа төҙөлгән йорттар бар. Тәү сиратта иң боронғолары - "сталинкалар", уларҙы тик баһалаусылар, йышыраҡ интеллигенция, һатып ала. Унан килә "хрущевка"лар, был йорттар үткән быуаттың 60-сы, һуңғылары 87-се йылдарында һалынған. Уларҙы ҡала буйлап ҡарап йөрөргә лә түгел, бер төрлө майҙан һәм планировка. Ә хаҡтарына килгәндә, ҡаланың ҡайһы өлөшөндә урынлашыуына ҡарап, 300-500 меңлек айырма бар. Унан инде Брежнев осоронда төҙөлгән йорттар, иң тәүгеләре 1974 йылдан төҙөлгән, һуңғылары 91-се йылдар тирәһендә һалынып бөткән. Был йорттар замансараҡ, лифттары, тамбур кеүек уңайлыҡтары бар. Баш ҡалала ҡыҙыл кирбестән төҙөлгән тәүге йорттар үткән быуаттың 90-сы йылдарына ҡарай, бына уларҙың планировкаһы нығ айырыла һәм хаҡтары ла төрлө. Күсемһеҙ милек баҙарында эшләй башлаған ғына йылдарҙа бер бүлмәле фатир алырға теләп мөрәжәғәт иткән йәш ғаиләләр, "хрущевка" булһа ла ярай, ти торғайны. Ә хәҙер, иң мөһиме, "хрущевка" булмаһын, тиҙәр. Үҙем дә 5 ҡатлы йорттар ҡаланың бай инфраструктуралы ерендә урынлашыуына ҡарамаҫтан, унан фатир алырға кәңәш итмәйем, сөнки лифт, автомобилдәр өсөн парковка урыны юҡ. Әлеге ваҡытта Өфөләге 9 ҡатлы йорттар тирәһендә йәшәү өсөн уңайлыҡтар ҡәнәғәтләнерлек.

**А. Арыҫланбаев:** Һайлап алыу мөмкинлеге бар, һәр кем үҙенә мөһим тип иҫәпләгән факторҙарға иғтибар итеп, талаптар ҡуя. Кемдер йәшәү өсөн уңайлыҡтар булыуын, балалар баҡсаһы, мәктәп, магазиндар эргәлә урынлашыуын кәрәк тип һанай. Кемгәлер фатирҙағы ремонт, бүлмәләр нисек урынлашыуы мөһим, бәғзеләр тәҙрәләр аныҡ бер яҡҡа ҡарап тороуын теләй, феншуй буйынса яҡшы урын эҙләүселәр ҙә бар. Һатып алыусылар менән тәүге осрашыуҙан уҡ теләктәрен аныҡлап, уртаҡлыҡтар күберәк булған варианттарҙы эҙләп табырға тырышабыҙ. Әйтергә кәрәк, үҙем реалист булғас, беренсел милеккә ҡарағанда әҙер өйҙән фатир һатыу яҡлымын, ремонты, мебеле булһа тағы ла яҡшыраҡ.

**Күсемһеҙ милек менән эш иткәндә ниндәй хаталар йыш ҡабатлана?**

**С. Игебаева:** Күсемһеҙ милек буйынса белгес ысын мәғәнәһендә юрист түгел. Әлбиттә, эшебеҙ тығыҙ бәйләнгән булғас, хоҡуҡ мәсьәләләрен дә бер аҙ беләбеҙ. Күсемһеҙ милек белгесе төрлө хеҙмәттәр күрһәтә, кәрәк булһа, ул психолог та - кешене йыуатабыҙ, һөйләшәбеҙ, хатта документтар юллағанда кәрәкле урынға таксист урынына йөрөтәбеҙ. Шулай ҙа риэлторҙың төп бурысы маркетинг, дөрөҫ һата белеү. Был йәһәттән хата яһамаҫҡа тырышһаң да, төрлө осраҡтар була. Бына яңыраҡ ҡына бер йәш ғаилә Өфө эргәһендәге өйөн һатып, ҡалаға күсергә ниәтләне. Өйҙәрен һатып бирҙек, фатир һайлағанда ҡабаланмағыҙ, тип кәңәш иттек. Әммә клиенттар ҡабаланып, эргәһендә балалар баҡсаһы, мәктәп булмаған яңы бинанан фатир алдылар. Инеп йәшәүҙәренә 1-2 аҙна үттеме-юҡмы, һатайыҡ, йөрөүе уңайһыҙ, тип яңынан шылтыраталар. Белгестең төп бурысы бына ошондай хаталарҙы кисектереү, кешегә кәрәк булған, уңайлы фатир алышып биреү. Шуға, төпсөнөп, бөтә нескәлектәрҙе һорашып эшләргә тырышабыҙ. Йыш ҡабатланған нескәлектәр араһында Росреестрҙың техник хаталарын атарға була. Унан инде, Әсәлек капиталын ҡулланып алған йортто балаларына өлөш сығармай һатырға ҡуйыу миҫалдары бар, мираҫҡа ҡалған һәм хосусилаштырылған милекте алғанда ла иғтибарлы булыу мөһим. Быларҙың барыһын да алдан төҙәтеп була.

**А. Арыҫланбаев:** Тәү сиратта, фатир һатыусы ла, һатып алыусы ла мөһим документтарға иғтибар итергә тейеш. Һатырҙан алда документтарҙы юридик яҡтан тикшерергә кәрәк. Фатирҙы ышаныс ҡағыҙы буйынса һатыуға ҡуйғанда ла абай булырға кәрәк. Ышаныс ҡағыҙы буйынса килешеү төҙөлгән икән, аҡсаны мотлаҡ фатир хужаһының иҫәбенә күсереү кәрәк. Аҙаҡ, 5-6 йыл үткәс, фатир хужаһы: "Мин ул аҡсаны алманым, фатирҙы һатыу уйымда ла булмағайны, ышаныс ҡағыҙы бирмәнем", - тип низағлаша алмаясаҡ.

Беҙҙең халыҡ ябай, бер ҡатлы. Ҡайһы бер намыҫһыҙ риэлторҙар шунан файҙаланып, хаҡы күпкә осһоҙ торлаҡты ла ҡиммәткә һатып ебәреүҙән тартынмай. Фатир алырҙан алда ғына түгел, ғөмүмән, ниҙер алырҙан алда баҙар хаҡын ентекле өйрәнергә кәрәк. Хаҡтар өс төрлө була: баҙар хаҡынан юғары, баҙар хаҡына тап килә, баҙар хаҡынан түбән. Әгәр ҙә торлаҡ баҙар хаҡынан юғары икән, тимәк, хужа был системаны белмәй, шуға ла ул уны һатырға ашыҡмай. Ә бына торлаҡ баҙар хаҡына тап килһә, кеше фатирын һатып ебәрергә әҙер тора. Өсөнсө осраҡта, йәғни фатир бик арзан икән, тимәк, йә хужа-

✓ *Әлеге мәлдә беҙҙә беренсел милектә фатир һатып алыу хәүефһеҙгә әүерелеп бара, быға тиклем ундай ышаныс юҡ ине. Ә шулай ҙа беренсел милекте һайлағанда йортто түгел, ә төҙөүсе компанияны һайларға кәрәк.*



һына ашығыс рәүештә уны һатырға кәрәк булған, йә документтар һәм юридик яҡтан ниндәйҙер проблема бар. Шуға, фатир алғанда саманан тыш осһоҙ хаҡҡа ҡыҙығып, бәләгә тарып ҡуймаһын ине кешеләр. Былдай осраҡта күсемһеҙ милек агенты менән бергә эшләү күпкә отошло ла булыуы бар, уға түләгән 20-30 меңде һуңынан кире ҡайтарып була, ә терһәкте тешләп булмай.

**2020 йылға Өфөләге күсемһеҙ милек баҙарында ниндәй яңылыҡтар көтөргә?**

**А. Арыҫланбаев:** Беҙҙең Рәсәйҙә "алдан әйтеү" тигән нәмә эшләмәй, шарттар тиҙ үҙгәреүсән. Ниҙер әйтеп, яңылыштырыуҙан ҡурҡам. Шулай ҙа бөтәһенә мәғлүм булғанса, ҡала ситендәге торлаҡ ер ҡарҙан әрселгәс һатыла башлай, нәҡ ошо ғинуар-февраль айҙарында йөрөп ҡарап, ҡабаланмай һайлап алырға була. Ғәҙәттә, көҙгөнән фатирға бар икәнен уйлап алыу кәрәк. Акса етмәй икән, тәүҙә ипотекаға документтар биреп, бөтә аҡсаны туплап алыу мөһим. Юғиһә, беҙҙең халыҡ тап киреһен эшләй, тәүҙә фатир ҡарай, аҙаҡ банкка мөрәжәғәт итә. Быға бәйле төрлө хәлдәр булып тора, күп осраҡта кеше кредит тарихым яҡшы тип уйлап, ипотека буйынса мөрәжәғәт итә һәм кире яуап ишетә. Мәҫәлән, ҡасандыр кеҫә телефоны алған да, 50 тинен түләмәй ҡалдырған, ти. Ул 50 тиндең проценты "үҫкән", банктан бер ниндәй иҫкәртеү килмәгән, ә һине бурысын ҡайтармаусылар рәтенә индереп ҡуйғандар. Үҙемдең эш тәжрибәмдә бер ханыма ипотека юллағанда кире яуап килде, сәбәбе - иренә кредит алып биргән. Был ҡатын аптырашта ҡалды, уны мин түгел, ирем түләмәгән, ти...

**А. Арыҫланбаев:** Эйе, ғөмүмән, халыҡ телефонын да, машинаһын да, тунын да кредитҡа лар бар, әммә улар тураһында интернетта ҡырын һүҙ юҡ. Шул уҡ бөтәһенә лә билдәле "Миловский парк" йәшәү комплексы миҫалында ла төҙөлөш компанияһына ҙур иғтибар бүлеүҙең мөһимлеге күренә. Ул төҙөлөш компанияһы нәҡ ошо йәшәү комплексын һалыу өсөн ойошторолған, яңы ғына барлыҡҡа килгән ойошма ине һәм фатир хаҡтары ла арзан булды. Төрлө йәшәү комплексын ҡарап, тура төҙөлөш компанияһына ла, күсемһеҙ милек агенттарына ла мөрәжәғәт итергә мөмкин. Беҙ был мәсьәләлә кәңәшләшеү өсөн хаҡ алмайбыҙ, төҙөлөш компаниялары менән килешеү буйынса эшләйбеҙ һәм ышаныс тыуҙырмаған ойошмаларға мөрәжәғәт итмәйбеҙ. Әйтергә кәрәк, беренсел милекте беҙҙең аша һайлағанда ла, тура төҙөлөш компанияларына барғанда ла фатир бер үк хаҡҡа һатыла. Хәҙер бөтә нәмә асыҡ, яманаты сыҡмаһын тип тырышҡан ойошмалар алдашыу, сифатһыҙ продукция тәҡдим итеүҙән ситен. Ни тиһәң дә, беренсел милекте төҙөлөш тамамланыуын бер йыл, йыл ярым көтә алған кешеләргә алыуы отошло.

# АЛДА...

## хаҡтарҙы ентекләп өйрән

хаҡтар күтәрелә, декабрь айында иң ҡиммәт хаҡҡа һатырға була.

**С. Игебаева:** Баҙар быйыл әүҙем. Былтыр ошо ваҡытта ипотека күләме күтәрелде, фатир һатыу һәм һатып алыу бөтөнләй туҡтаны. Быйыл иһә, киреһенсә, ипотека күләме кәметелде, артабан да кәмейәсәк тип ишетелә. Ҡайһы банктар 4 процентҡа ипотека бирә. Уны алыу өсөн ғаилә ике һәм унан күберәк бала. Банк бына шуға ҡарай ҙа инде. Ә былай ипотека банк өсөн хәүеф тыуҙырған продукт түгел, сөнки уны ҡайтара алмаһаң, банк фатирыңды тартып ала, һата һәм үҙ аҡсаһын ҡайтара.



**Беренсел милектән фатир алам тип, төҙөлөш тамамланыуын көтөп ала алмағандар ҙа күбәйҙе бит, шик тыуа. Буш ҡул менән тороп ҡалмаҫ өсөн ни эшләргә?**

***Беҙҙең халыҡ ябай, бер ҡатлы. Ҡайһы бер намыҫһыҙ риэлторҙар шунан файҙаланып, хаҡы күпкә осһоҙ торлаҡты ла ҡиммәткә һатып ебәреүҙән тартынмай. Фатир алырҙан алда ғына түгел, ғөмүмән, ниҙер алырҙан алда баҙар хаҡын ентекле өйрәнергә кәрәк. Хаҡтар өс төрлө була: баҙар хаҡынан юғары, баҙар хаҡына тап килә, баҙар хаҡынан түбән. Әгәр ҙә торлаҡ баҙар хаҡынан юғары икән, тимәк, хужа был системаны белмәй, шуға ла ул уны һатырға ашыҡмай. Ә бына торлаҡ баҙар хаҡына тап килһә, кеше фатирын һатып ебәрергә әҙер тора. Өсөнсө осраҡта, йәғни фатир бик арзан икән, тимәк, йә хужаһына ашығыс рәүештә уны һатырға кәрәк булған, йә документтар һәм юридик яҡтан ниндәйҙер проблема бар.***

лалы булырға, икенсе (һәм артабанғы) балаһы 2019 йылда тыуырға, фатирҙы яңы төҙөлгән йорттан юридик шәхестән алырға тейеш. Ә бына "Россельхозбанк" 2,7 процент, "Сбербанк" 3 процент менән ауыл хужалығы ипотекаһы бирә. Уны ауылда йәшәгәндәр Өфө районында төҙөлгән комплекстарҙан торлаҡ алыуға тотона ала. Ә бына торлаҡҡа хаҡтар артыу-артмауына килгәндә, баҙар ҡанундарына ярашлы һатып алыусы бар икән, хаҡтары ла күтәреләсәк. Ғинуарҙан майға тиклем хаҡтар ғәҙәттәгесә төшөр, тип көтәбеҙ. Торлаҡ мәсьәләһендә шарттар нисек үҙгәреп тороуына ҡарамаҫтан, фатир алғанда уйлап эш итеү кәрәк. Сөнки йорт - ул итек түгел, машина ла түгел хатта. Тәүҙә ҡаланың ҡайһы районында йәшәргә ниәтләйһегеҙ, күпме аҡсағыҙ бар, кем унда тораҡ, берәй 5-10 йылдан ниндәй үҙгәреш булыуы

**С. Игебаева:** Әлеге мәлдә беҙҙә беренсел милектә фатир һатып алыу хәүефһеҙгә әүерелеп бара, быға тиклем ундай ышаныс юҡ ине. Ә шулай ҙа беренсел милекте һайлағанда йортто түгел, ә төҙөүсе компанияны һайларға кәрәк. Тәү сиратта уның тарихын тикшерергә, ниндәй йорттар төҙөгән, ваҡытында тапшырғанмы, һалған йорттары сифатлы булғанмы һ.б. Компания 1995 йылдарҙан эшләп килһә, ышаныслыраҡ, ҡайһы бер компанияларҙың үҙенең төҙөлөш материалдары заводы була һәм был төҙөлөш туҡтап ҡуймаҫына өҫтәмә гарантия. Федераль төҙөүселәр ышаныслы, әммә уларҙа хаҡтар юғарыраҡ. Төҙөүсе тураһында мәғлүмәт йыйғанда суд сайтындағы исемлектәрҙе тикшереп сығыу ҙа артыҡ булмаҫ. Сөнки Өфөлә оҙаҡ йылдар дауамында әллә нисә йорт һалған, тик әлегә тиклем береһен дә тапшырмаған компания-

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Студент йылдарында журналистика буйынса төп предметтарҙың береһен уҡытҡан уҡытыусыбыҙ: "Яҙырға өйрәнергә теләмәһәгеҙ, төҙөүсе йәки ашнаҡсы булығыҙ ана. Кешегә өй һәм йылы аш һәр саҡ кәрәк, эшһеҙ ҡалмаҫһығыҙ", - ти торғайны. Ысынлап та, бөгөн хеҙмәт баҙарында барлыҡҡа килгән өр-яңы һөнәрҙәр кешеләрҙең тап бына ошо ике ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә ҡайтып ҡала. Күсемһеҙ милек агенттары ла шул маҡсатты алға һөрә, кешегә торор урын табыша һәм көнкүреш кимәлен яҡшырта. Ә уңайлыҡтар өсөн түләргә кәрәк, торлаҡ мәсьәләһенең үрҙә телгә алынған бөтә нескәлектәрен үҙең аңларға теләмәһәң, аҡсанды ла йәлләмәйһең инде. Был бөгөнгө баҙар мөнәсәбәттәренең төп шарты.**

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

ХӘТЕРКИТАП

# ОНОТОЛҒАН МОҢ,

## йәки һеүләүҙәр тураһында

**Ҡырҡынсы, илленсе йылдарҙа "һеүләү" һүҙе халыҡ телендә киң ҡулланылды, бөгөнгө көндә был һүҙ телдән бөтөнләй төшөп ҡалды, бөгөнгө быуын был һүҙҙе бөтөнләй ят төшөнсә тип ҡарай.**

Бында шуны аңларға кәрәк: 1917 йылдағы революциянан һуң, бигерәк тә 1930 йылдан башлап СССР-ҙа, бигерәк тә милли республикаларҙа халыҡтың быуаттар буйы телдән-телгә күсә килгән ауыҙ-тел ижадына ревизия яһау, унан дини һүҙҙәрҙе алып ташлау, йә булмаһа уларҙы икенсе һүҙҙәр менән алыштырыуҙар башлана. Дини һүҙҙәр менән ныҡ сыбарланғанға күрә, һеүләүҙәрҙе лә уҡыусыларға өйрәтмәйҙәр, уны ҡулланып, сәхнәләрҙә сығыш яһамайҙар, уны белгән ҡарттар донъя ҡуйып бөтөү менән был моң да онотолоуға дусар ителә. Һеүләүҙәр ике юллыҡтан булып, оҙон көйҙәрҙең башланғысы булып тора, төрлө темаларға арнала.

Күңел менән генә булһа ла 40-сы йылдарға әйләнеп ҡайтайыҡ. Атайым 3-4 ҡартты хәләл ефеттәре менән бергә ашҡа саҡырып алыр ине. Аш ашау, сәй эсеү тамамланғас, вәғәз һөйләйҙәр, аҙаҡ һеүләшергә тотонорҙар ине. Ул былай булды: 3-4 ҡарт бер яҡта ултырһа, уларҙың ҡатындары бир яҡта ултырырҙар ине. Ауыл мөәзине булған оҙонса буйлы, ҡаҡса йөҙлө, үтә лә моңло тауышлы күпер төбө Мөхәмәтйән (1888-1972) ҡарт һеүләй башлау менән уны янындағылар күтәреп алыр ине. Улар тәүге ике юллыҡты тамамлау менән араларынан береүҙән: "Ай-бай-бай-бааай", - тип әйтеп бөтөрөүе була, шуны ғына көтөп ултырған әбейҙәр икенсе ике юллыҡты башларҙар ине. Ана шулай алмаш-тилмәш ярты сәғәттәй һеүләшкәндән һуң Мөхәмәтйән ҡарттың берәй ишараһы буйынса улар туҡтарҙар ине. Беҙ, балалар, ҡарттарҙың ошолай моң сығарғандарын тын да алмай тыңлар инек. Ә көйөнә килгәндә инде, "Ҡаҙ бәпкәләре һары икән", тип башланған йырҙың һуңғы ике юлы нәҡ ана шул һеңләүҙең көйө булып тора ла инде.

Ауылыбыҙҙа Ишбаев Таһир Хәсән улы, Ҡунысбаев Нуритдин Шафиҡ улы кеүек ағайҙар һеүләүҙең көйөн һәм ике юллыҡтарын күп белде, эштән һуң арып килеп ултырырҙар ҙа, тирҙәрен һөртә-һөртә һеүләп ебәрерҙәр ине. Уларҙы тик һағынып һөйләргә генә ҡалды. Ә инде ошо онотолған моңдо халыҡҡа кире ҡайтарғанда бик тә һәйбәт булыр ине лә, уны кем ойоштором? Моңдо халыҡҡа кире ҡайтарыу өсөн йырсы ир-егеттәрҙән 2-3 кеше, ҡатын-ҡыҙҙарҙан да 2-3 кеше булып, уларҙың һеүләгәндәрен яҙып алырға ғына кәрәк.

Ә хәҙер ана шул һеүләүҙәрҙең иҫтә ҡалған ике юллыҡтарын ир-егеттәргә һәм ҡатын-ҡыҙҙарға бүлгеләп тәҡдим итәм.

**Ир-егеттәр:**
Һыу төпкәйҙәрендә һис ҡара юҡ,
Хаҡ яҙмышты күрмәй сара юҡ.
**Ҡатын-ҡыҙҙар:**
Кешеләрҙән кеше һис кәм түгел,
Тик бәхеткәйҙәре тиң түгел.
**Ир-егеттәр:**
Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышты
Һыпырып алып булмай ҡул менән.
**Ҡатын-ҡыҙҙар:**
Ҡиәмәттең йәме иман менән,
Был донъялар һөйгән йәр менән.
**Ир-егеттәр:**
Ни тип кенә яуап һин бирерһең,
Гүрҙәреңдә тупраҡ аҫтында.
**Ҡатын-ҡыҙҙар:**
Хаҡ яҙмышҡайҙарын күрмәйенсә
Гүргә инмәй әҙәм балаһы.
**Ир-егеттәр:**
Ҡарт-ҡоролар тимә һин үҙеңде,
Ҡартайырһың ҡара йыландай.
**Ҡатын-ҡыҙҙар:**
Ҡыҙ балалар нинә тыуа икән,
Үҙ бәхеткәйҙәре булмағас.
**Ир-егеттәр:**
Булма ла ғына малһыҙ, йөрөмә йәрһеҙ,
Камил донъя көтөр ваҡытыңда.
**Ҡатын-ҡыҙҙар:**
Һыуға һалған көмөш иремәһә,
Рыя иргә күңел иремәй.
**Ир-егеттәр:**
Ирмен тип тә берүк күкрәк һуҡма,
Йәмәғәтең итәк аҫтында.
**Ҡатын-ҡыҙҙар:**
Йәтимдәрҙе берүк рәнйетмәгеҙ,
Ҡара ҡарғыш төшөр башыңа.
**Ир-егеттәр:**
Бер уйлаһаң, эштәр иҫ китәрлек,
Уйламайса донъя көтәрлек.

Рәхимйән ВӘХИТОВ.
Күгәрсен районы.

# ҠАҘАНСЫ БЕЙ ШИШМӘҺЕ

## Халыҡ риүәйәте буйынса сценарий



**Алып барыусы:** Башҡортостандың төньяғында Асҡын районы ята: урманлы тауҙар артылып аҡҡан Асҡын йылғаһына бик күп шифалы һыуҙар - Уралтау шишмәләре килеп ҡушыла. Улар араһында айырыуса данлы Иҫләсу шишмәһе бар - көкөрт тәмле һәм еҫле һыуы борон-борондан кешеләрҙе күп сырхауҙан йолоп-ҡотҡарып тора. Иҫләсу шишмәһе шифаһын бөгөн республиканың "Танып" санаторийы бик уңышлы файҙалана. Ашҡаҙан-эсәк сирҙәре, тире-тән, быуын-һеңер ауырыуҙары ошо шишмә һыуынан ҡул менән һыпырғандай юйылып төшә, тиҙәр.

Иҫке Ҡаҙансы ягында Иҫләсу шишмәһе менән бәйле легендалар ҙа ишетергә була, шуларҙың береһе айырыуса ҡолаҡҡа ягымлы. Ауылдарҙа һәүәҫкәр тамаша уйнарға яратыусылар быңдай тарихтарҙы тыуған ер, халыҡ тарихы менән бәйләп, барса кешегә бәйән итә. Шулай итеп, беҙҙең сәхнәлә гәмәли төркөм:

Ҡаҙансы, Балтасы, Ҡошсо, Балыҡсы бейҙәр.
Һомай.
Айһылыу.
Әбей.
Ҡыҙ.
Күмәк ҡыҙҙар, егеттәр.

### Беренсе күренеш

*Ҡыҙын етәкләп бер әбей инә. Ҡыҙ - һуҡыр, әбей - сатан.*

**Ҡыҙ:** Әбейем, әбекәйем, тағы күпме барырға?

**Әбей:** Йыраҡ әле, йыраҡ. Эй, балам, һинең күҙең һуҡыр. Минең аяғым сатан. Икебеҙҙән бер кеше сығамы, юҡмы? Уф, хәлем бөттө.

**Ҡыҙ:** Ҡаҙансы бей шишмәһе тураһында әкиәтең дә бөттөмө?

**Әбей:** Әкиәт түгел, борондонан ҡалған ҡарһүҙ ул.

**Ҡыҙ:** Шул боронғоно һөйлә әле. Ял итеп тә алырбыҙ.

**Әбей:** Риүәйәт, тибеҙ, тарих, тибеҙ, уларҙы тыңлау хәл бирә ул. Шуға күрә һөйләйем әле, ҡыҙым. Бик борон Ҡаҙансы, Балыҡсы, Балтасы, Ҡошсо тигән бейҙәр йәшәгән - һәр ҡайһыһы бер ҡәүемдең башлығы булған улар.

*Артабан Әбей һөйләгән риүәйәт йәнләнә.*

*Ҡаҙансы бей керә.*

**Ҡаҙансы бей:**
Ҡаҙансы тигән атым бар,
Бей тип оло затым бар.
Яуҙар үттем, арыным-талдым.
Бер Хоҙайым, һин беләһең,
Яҡшылыҡмы, ней ҡылдым?

Танып ырыуы тигән илем бар,
Бергә урман-танып, ҡыр-танып,
Булмаҫ яңғыҙ дөрөҫ юрап табып!
Яуҙар үттем, арыным-талдым.
Бер Хоҙайым, һис белмәйем,
Яҡшылыҡмы, ней ҡылдым?
Килһен бында Балтасы бей,
Балыҡсы бей, Ҡошсо бей!

### Икенсе күренеш

*Балтасы, Ҡошсо, Балыҡсы бейҙәр күренә. Бейҙәр күрешәләр.*

**Ҡаҙансы бей:** Әйҙә, рәхим ҡыл, Балтасы бей. Яуап бир, мин ни ҡылдым? Ник бик арыным, ник мин талдым?

**Балтасы бей:** Яҡшылыҡ ҡылдың, хөрмәтле Ҡаҙансы бей. Һинең менән бергә дан таптыҡ. Быуын-быуын йәшәр ил тоттоҡ. Шул илде яҡлап яу саптыҡ.

**Ҡаҙансы бей:** Ҡырҡ тармаҡлы, ҡырҡ табаҡлы Башҡорт иле тынсынымы?

**Балтасы бей:** Яуға ҡаршы тау булдыҡ, "балтасы" исемен алдыҡ.

**Ҡошсо бей:** Ҡоролтай туйырлыҡ ҡор алып, "ҡошсо" данын алдыҡ.

**Балыҡсы бей:** Бар байманды туйҙырырлыҡ "балыҡсы" ырыу булдыҡ.

**Ҡаҙансы бей:** Ҡорос ҡойоп, ҡылыс сүкеп, ҡара яуға ҡаршы сыҡтыҡ, тыныс тормош даулап-яулап, ҡаҙан аҫтыҡ, усаҡ яҡтыҡ. Ни етмәй һуң, ник йәнем тынсымай?..

**Балтасы бей:** Ҡаты бошоҡ уйҙар һәр кемдә. Ауырыу-сирҙәр артты тәндә...

**Балыҡсы бей:** Халыҡ ҡалды ауыр хәлдә. Һыҙлау-һыҙланыу һәр кемдә.

**Ҡошсо бей:** Шифа ҡайҙан тапмаҡ кәрәк. Илде ҡотҡарыр әмәл кәрәк.

**Балтасы бей:** Балта менән саптым - сир ҡасмай.

**Балыҡсы бей:** Балыҡҡа ташланыҡ - сир аҡмай.

**Ҡошсо бей:** Ҡош ҡаурыйын ҡаҡтыҡ - сир ҡасмай.

**Ҡаҙансы бей:** Ышанмайыҡ әмәл-сихырға, табайыҡ аш ҡаҙанға.

**Балтасы бей:** Аш үтмәйҙе, ашау йоҡмайҙы - ҡыркылдыҡ...

**Балыҡсы бей:** Ҡоро ҡылсыҡ ҡалдыҡ - ҡаҡландыҡ.

**Ҡошсо бей:** Аяҡ-ҡулды булмай ҡалҡытып, үҙәкте өҙә ҡаты һыҙлатып...

**Ҡаҙансы бей:**
Барыбыҙҙы терелтерлек,
Эстән-тыштан таҙартырлыҡ
Йәншишмәләй дауаһын
Бирһен беҙгә Оло тәңре!
Эй, Хоҙайым, араласы әрһеҙ уйымдан - ярҙам көтәм ҡояш-айыңдан. Күккә ялбарайыҡ!

*Күккә кулдарын һуҙып торалар.*

*Һомай менән Айһылыу күренә.*

### Өсөнсө күренеш

**Ҡаҙансы бей:** Кем һеҙ, күренәгеҙме күҙемә?

**Һомай:** Саҡырҙың түгелме ярҙамға, дөштең түгелме Ҡояшҡа, Айға?

**Айһылыу:** Ҡояш ҡыҙы Һомай менән Ай ҡыҙы Айһылыу ҡаршыңда.

**Һомай:** Ни теләйһең, батыр, һора.

**Айһылыу:** Алтын-көмөш, байлыҡ?

**Ҡаҙансы бей:** Рәхмәт, мин теләйем һаулыҡ-таҙалыҡ, сәләмәтлек илемә. Халҡымдың Бәхет күҙен аса торған сихәтле шишмә бирегеҙ еремә.

**Һомай:** Һыу ҡото - Уралтау буйында, шишмә-кулдәр, йылғалар - барыһы ла һаҡлай ил ҡотон.

**Ҡаҙансы бей:** Һыуға бирәм Ҡаҙансы бей гәйрәтен, халҡым өсөн ихлас теләк-көҙрәтем. Күсһен изге һыуға бар көсөм, атылып сыҡһын шишмәлә минең исем. Ҡаҙансы исеме булған һәр ерҙә булһын сихәтле шишмә кеше өсөн.

**Һомай:** Ҡояш ҡыҙы биргән һыу кешене эстән-тыштан таҙартыр.

**Айһылыу:** Ай ҡыҙы биргән һыу яраны-һыҙлауҙы йүнәлтер.

**Ҡаҙансы бей:** Ҡаҙансы бей булам, ошо ерҙе дошмандан һаҡлап, яу саптым. Йәншишмәләй шишмәләр ҡалыр илемә, шулар һаҡлар ил ҡотон! Ҡаҙансы шишмәһе менән Иҫләсу шишмәһе тип белерҙәр. Онотмаҫ һәм рәхмәт уҡыр барса кешеләр!

*Музыка. Һомай менән Айһылыу бейеүе. Ике шишмә бәреп сыға.*

*Ҡаҙансы, Балыҡсы, Ҡошсо, Балтасы бейҙәр һыуҙы халыҡҡа илтә.*

### Дүртенсе күренеш

*Ҡыҙ әбейҙе йөкмәгән, әбей ҡыҙға юл әйтеп бара.*

**Әбей:** Әбей - сатан, ҡыҙ - һуҡыр, Юлға сыҡтыҡ - ни булыр? Алға, балам, уңғараҡ! Арыраҡ бар, һулғараҡ! Атла, бәбкәм, тураҡ.

**Ҡыҙ:** Әбейем, тағы күпме барырға?

**Әбей:** Йыраҡ әле, йыраҡ.

**Ҡыҙ:** Ике шишмә бар, тинең. Шифалары бар, тинең.

**Әбей:** Бар шул. Һинең күҙ нурыңды ҡайтарыр Ҡаҙансы шишмәһе, аяҡ быуынымды нығытыр Иҫләсу шишмәһе! Хәҙер барып етербеҙ.

**Ҡыҙ:** Бик арыным. Үҙем генә барыр инем, юлды күрмәйем.

**Әбей:** Мин дә үҙем генә барыр инем, атлай алмайым. Ни хәл итәйек...

**Ҡыҙ:** Юлды дауам итәйек.

**Әбей:** Шулай итәйек.

**Ҡыҙ:** Байтаҡ үттек. Шишмәләр күренмәйме? Әллә улар юҡмы бөтөнләй? Шаяртып һөйләнеңме әкиәтеңде?

**Әбей:** Әкиәт түгел ул, ҡарһүҙ, боронғо ҡарый һүҙ. Һомай менән Айһылыу йәншишмә һыуын беҙҙең яҡҡа бороп аҫҡан шишмәләр бит улар...

**Ҡыҙ:** Һомай менән Айһылыу ҙа борон-борон заманда ҡалғандыр, беҙҙең хәлде ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә улар.

**Әбей:** Йә, балаҡай, улай асырғанма. Хәҙер барып етербеҙ изге һыуҙарға. Һинең күҙҙәрең асылыр, минең аяҡтарым атлап китер.

**Ҡыҙ:** Сеү, тулҡын тауышы сылтырай...

**Әбей:** Зөһрә йондоҙ Тимерғаҙыҡ йондоҙона ҡарап торған күк юлында, Өлкәр йондоҙ аҫтында бер булыр шишмә, һыуы бөтә хәстәнән им-дауа, тип әйтеп ҡалдырған, ти, ул.

**Ҡыҙ:** Кем әйтеп ҡалдырған?

**Әбей:** Һомай ҡош менән Ай ҡыҙын күреп белгән батыр Ҡаҙансы бей әйткән. Беҙҙең ата-бабабыҙ... (Шишмәгә килеп етәләр.) Беренсе шишмә ошо.

**Ҡыҙ:** Ҡаҙансы шишмәһе? Ул ысынлап та бармы? Әбейем, йә, төш арҡамдан.

### Бишенсе күренеш

**Әбей:** Шишмә янында ҡоштар матур һайрай. Һауаһы һулап туйғыһыҙ тәмле...

**Ҡыҙ:** Тиҙерәк күҙҙәрем төҙәлһен, күрәйемсе һыу ҡөҙрәтен!

**Әбей:** Ҡарһүҙҙә ҡалған ҡарт төрки бабам һамағын әйтәбеҙ: "Ернең атасы Ерән һаҡал, су анасы Сары һаҡал! Ҡаҙансы шишмәһен таптыҡ, балсығын алып ҡаптыҡ, ташын алып ташланыҡ, шифаһын ала башланыҡ". Шунан тотоп һыу ташын, Аллаһыға тапшырабыҙ эш башын. Йә, бисмиллаһ, тип башлап, һыу алайыҡ! Бисмиллаһ! Бер Алламдың рәхсәтенән, бер Алламдың ҡөҙрәтенән һыу аламын шишмәнән. Ҡабатла, балам.

**Ҡыҙ:** Һыу аламын шишмәнән.

**Әбей:** Бер алламдың рәхсәтенән, бер алламдың ҡөҙрәтенән дән һорайммыҙ шишмәмдән. Ҡабатла минең әйткәнде.

**Ҡыҙ:** "Дән һорайммыҙ шишмәнән".

**Әбей:** Һыу мәнесе, ас, тип әйт, хәстә, мине ташлап ҡас, тип әйт. Сайҡат күҙеңне ҡат-ҡат, ни күрергә теләгән бар - һора шуны ҡабатлап!

**Ҡыҙ:** Хәстәмне бәрҙем иңемдән. Теләк ихлас күңелемдән.

**Әбей:** Сеү-сеү, шишмә ни тиә?

**Ҡыҙ:** "Нинә һиңә күҙ?" тиә.

**Әбей:** Күҙ бик кәрәк һиңәргә, Күккә-күккә менәргә... Самрау менән Һомайҙан, Ҡояш менән Айҙан нур алырға күҙеңә, рух алырға йәнеңә. Әйт, ҡабатла ихластан!

**Ҡыҙ:** "Күҙ бик кәрәк миңәргә, күккә бейеккә менәргә. Тимерҡаҙыҡ һыртында Зөһрә йондоҙ күрергә, Зөһрә йондоҙ ҡаршында Өлкәр йондоҙ күрергә. Күҙ бик кәрәк миңәргә..."

**Әбей:** Беренсе шарт өс рәт: теләк, рәхсәт, рәхмәт.

**Ҡыҙ:** "Күк нуры, күк нуры - баш осомда, Ер ҡуры, ер ҡуры - аяҡ аҫтымда. Күккә-ергә рәхмәтем башымда, тел осомда".

**Әбей:** Икенсе шартты үтә: шишмә менән серләш, һорау биреп өндәш. Сеү-сеү, шишмә ни тиә?

*Ҡыҙҙың күҙенә һыу алып бөркә. Шишмә сылтырай.*

**Ҡыҙ:** "Күҙең нығыраҡ ас", тиә, "тауға ҡарап баҫ", тиә. Күҙемне шар асамын, тауға ҡарап баҫамын. Тау, мин һине күрәмен, сәләм бирәмен.

**Әбей:** Шишмә тағы ни тиә?

**Ҡыҙ:** "Ағас башын күр", тиә. Ағас, һине күрәмен, һәр япрағың беләмен, япрағыңда йым-йым иткән ысыҡ тамсыһын эсәмен.

**Әбей:** Рәхмәт әйт элек барыһына.

**Ҡыҙ:** Рәхмәт иң элек Аллаһыма, күккә-ергә, тауға-урманға, күл-йылғама...

**Әбей:** Сеү-сеү, шишмә ни тиә?

**Ҡыҙ:** "Батыр егет күр", тиә. Күрермен, һөйәрмен, бәбәй табып бирермен.

*Батыр егет күренә. Ҡыҙға баш эйә.*

**Әбей:** Шишмә тағы ни тиә?

**Ҡыҙ:** "Тәмле аштар ҡуй", тиә. Өйөм тулы һый булыр, донъям матур туй булыр.

**Әбей:** Шишмә һиңә ни тиә?

**Ҡыҙ:** "Матур ҡупшы кейен, ти, йортоң матур йыйын", ти.

*Сүпләм шаршау, һөлгә, таҫтамал тотоп ҡыҙҙар сыға - йырбейеүлә уйын.*

### Алтынсы күренеш

**Ҡыҙ:** Был ниндәй еҫ? Ни булды? *(Танауын ҡаплай. Шишмә сылтырай.)*

**Әбей:** Ҡыҙым, әйҙә, шишмә һине саҡыра. Шишмә тағы ни тиә?

**Ҡыҙ:** "Әбейеңде Иҫләсуға илтеп сал", тиә.

**Әбей:** Иҫләсу - ул еҫле һыу, Ер көкөртө һеңгән көслө һыу. Иҫләсу шишмәһе - Айһылыуҙың бүләге. Арыған-талған тәндәренә шифа һораған батырҙарҙың ҡабул булған теләге.

**Ҡыҙ:** Ай ҡыҙының шишмәһе аяҡ-ҡулың йүнәтер, быуындарың йомшартыр, сирең-зарың таҙартыр... Әйҙә, һине тиҙерәк терелтһен Иҫләсу!

*Әбейҙе күмәкләп Иҫләсуға илтеп һалалар.*

*Әбей терелә, бейей.*

### Етенсе күренеш

**Әбей:** Балаҡайҙарым, ҡарһүҙҙе тыңлап бөтөгөҙ. Күңелегеҙгә һалып китегеҙ.

**Ҡыҙ:** Һөйлә, әбейем, боронғолар һүҙе - бөгөнгөнөң күҙе! Ҡаҙансы бей, Балыҡсы бей, Балтасы бей, Ҡошсо бей йәшәй, ти, шулай быуын-быуын Танып һыу буйында, ҡойоноп-туйынып изге шишмәләр һыуында...

*Бейҙәр алға сыға.*

**Бейҙәр:** Бер усаҡта йылынайыҡ, бер табаҡтан туйынайыҡ. Ян, ян, усаҡ утыбыҙ, артһын тормош ҡотобоҙ.

**Ҡаҙансы бей:** Йә хуш. Танып һыуы алҡыныр, халҡы ҡалҡынырмы?

**Балтасы бей:** Алҡыныр ҙа ҡалҡыныр.

**Балыҡсы бей:** Балыҡсы батыр балыҡ тотор йылға бар.

**Ҡошсо бей:** Ҡошсо батыр ҡош аулар ҡыр-урман бар.

**Балтасы бей:** Балтасы батыр йорт һалыр ауыл-ҡышлау бар.

**Ҡаҙансы бей:** Ошонда төйәк табайыҡ, бер тирәгә һыяйыҡ.

**Бергә:** Ҡаҙансы һыуы - гәжәп бер шишмәләр, Уралтау көсөн бирер йәншишмәләр.

**Ҡаҙансы бей:** Ҡаҙансы һыуын эс тә таҙалыҡ-бәхет телә!

**Балтасы бей:** Иҫләсу шишмәгә төш тә таҙалыҡ-бәхет телә!

**Балыҡсы бей:** Ҡаҙансы шишмәһе йәнәш Иҫләсу ышишмәһенә, Аяҡ-ҡулың имен булыр еҫле һыу кисһәң генә.

**Ҡошсо бей:** Тыуған ерҙә һыуҙарыбыҙ йәңгә сихәт,
Йәшәү бәхете - йәшәү тыныс, сәләмәт!

**Бергә:** Ана шуны раҫлай боронғо аманат: Ҡаҙансы, Балыҡсы, Балтасы, Ҡошсо - берҙәм зат. Танып һыуҙы данлар исем-атыбыҙ, урман-танып, ҡыр-танып ырыуы халҡыбыҙ.

**Рәмилә АХУНОВА.**
**Балтас районы**
**Ҡомъяҙы ауылы.**
**Сәрүәр СУРИНА**
**эшкәртеүендә.**

**Ошо көндәрҙә Өфөлә Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры Яҡут-Саха иленән килгән күренекле режиссер, "Алтын битлек" театр премияһы лауреаты Сергей Потапов ҡуйған спектакль - "Ай тотолған төндә" трагедияһы менән сығыш яһаны (ҡуйыусы рәссам Сулпан Азаматова, балетмейстер Альмира Дорн, яҡтыртыу буйынса рәссам Илшат Сәйәхов). Беренсенән, беҙ Стәрлетамаҡ труппаһын яңы әҫәр менән ҡотланыҡ, ниһайәт, "үҙегеҙҙең Тәңкәбикә, Дәрүиш, Диуана, Аҡъегет менән Шәфәгегеҙ бар", тинек. Икенсенән, классик трагедия, егерменсе быуаттың икенсе яртыһында башҡорт сәхнәһендә тыуған иң көслө әҫәрҙәрҙең береһе, ул бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда нисегерәк уйнала, уның шиғранә теле, халыҡсан фәлсәфәһе нисек яңғырай? Быны күҙәтеү бик ҡыҙыҡлы булды.**

# ДОНЪЯ БИЗМӘНЕ БӘҮЕЛӘ ШУЛ...

Ысынлап та, стәрлеләрҙең яңы спектакле берәүҙе лә битараф ҡалдырманы, сәхнәнән трагедияның һәр кемгә яҡшы таныш, хрестоматик тексы ағылды, тамаша залында тәрән һәм көсөргәнешле тынлыҡ хөкөм һөрҙө. Бына ябай һәм мыҡты, ышаныслы итеп донъя көткән ҡатын - бейбисә Тәңкәбикәнең биләмәһендә шиғранә телле аҡын тауышы, әсә моңо ағыла. Ҡоро тауышлы, ҡаты ҡуллы булып күренгән ҡамсылы бейбисәнең күңеле йомшаҡ, йөрәге изгелер, юғиһә, уны урап алған балалары һәм яҡындары үҙҙәрен ғәмһеҙ һәм иркен тоя, уның илендә иркә һәм иреклe самими заттар йәшәй төҫлө... Артабан был йәшәйеш юҫығын яуҙан ҡайтыусылар тураһындағы хәбәр алыштыра.

Илгә ир-егеттәр кире ҡайта. Шул ир-егеттәр башында торған Юлмырҙаны, бейбисәнең өлкән улын көтөү шундай ғорур өмөт менән тулы. О, кешелек үҙе ғазапланып тыуҙырған һәм тағы ла ныҒыраҡ аһ-хәсрәттәр менән инанып йәшәгән тәғлимәт бит был: ил-йорт хужаһы - ир-егет!.. Ошо өмөт өҙөлһә, ғаилә, ырыу, ил тотош бер упҡын алдында ҡала, улар йә имен ҡала, йә юҡ, барыһын да сабырлыҡ һәм ваҡыт хәл итәсәк. Әммә ил хужаһы Юлмырҙа ҡайталманы. Уның ҡәбер тупрағы, гүйә, һауанан осоп төшкән ҡәһәр ташы кеүек, яҡындарының алдына килеп төшә. Тәүге тетрәндергес образ бейеклеге спектаклдәге бөтә яҡшылыҡ-яманлыҡ бизмәндәрен әйләндереп-түңкәреп ташлай. Бейбисә Тәңкәбикә өҫтөнә ябырылған һынауҙарҙың башы ғына була был, үҙе таянған һәм ышанған боронғо йолаларҙың әҙәм үтә алмаҫлыҡ кәртә-упҡын булырын ул әлегә башына ла килтермәй...

Ниндәйҙер әҙәми эгоизм, үҙ-ара кәмһетеү арҡаһында ике йәш кеше араһындағы мөхәббәтте ҡорбан итеү һәр заманда ла бик күп аһ-зар, рәнйеү һәм күҙ йәштәренә сәбәп була. Иң аяныслыһы - ул мөхәббәтте ашатлап үтеү, тип һанаған бәндәләр аҙаҡ үҙҙәре шул әрнештән хасил булған әсе һабаҡтарҙы татый. Мәҫәлән, "Ай тотолған төндә" спектакленең программаһын (дизайнер Ләйсән Шибанова) тәп героиня Тәңкәбикәнең тулған айҙы ҡосаҡлап уйға сумған бик тәрән йөкмәткеле һүрәте биҙәй. Баҡһаң, уның ҡосағындағы ай - уға тормош биргән бөтә форсат-мөмкинлектәр, уның йәшләй генә ҡылған гонаһы ла мөхәббәт арҡаһында була. Шул мөхәббәт бәхетен ул үҙе өсөн ҡайғыға әйләндереүе арҡаһында "илай белмәгән ғәрип" бала тыуа. Әлмисаҡтан кешегә бирелгән һөйөү хисен ниндәйҙер йолалар хаҡына ҡорбан итеүе өсөн ул ауыр хаҡ түләй. Ләкин ире вафат булып, ырыу башлығы ҡамытын кейгәс тә Тәңкәбикә үҙе өсөн ифрат ауыр һәм ғәҙелһеҙ булған йола ҡыҫымынан ҡотолорға ынтылмай. Иң яратҡан улы Аҡъегетте һәм буласаҡ килене Зөбәржәтте лә ул баяғы йола аҫтына һала. Башҡортостандың халыҡ артисы Физәлиә Рәхимова башҡарыуында беҙ боронғо һәм "яңы" Тәңкәбикәне күрҙек. Ниməһе менән "яңы" ул? Йола ынғайына йәшәгән бейбисә, гүйә, уға үс итеп унынса эшләй, ул кешелек бәхетенән дә төңөлгән, йола ҡулында мөхәббәтле йәндәрҙе ҡыйратыусы бер йәнһеҙ сүкешкә әйләнгән. Сүкеш-бейбисә, гүйә, күктәге айҙы урталай яра, һуҡыр фанатик әҙәмдәр ҡулындағы күҫәк-ҡылыстарға әүерелә һәм үҙенең йәндәй күргән ғәзиз балаларын тураҡлап ташлай. Әммә йыһандар аша осоп,



ниҙәндер өркөп үҙенең ҡосағына килеп ингән айҙы ул иркәләп тынысландыра ала ине, йәғни үҙенең аяғына йығылып ялбарған балаларының инәлеүен ишетһә, ул үҙе өсөн һәм бөтә донъя өсөн иң беренсе күңел тыныслығы, мөхәббәт ҡурсалауы таба алыр ине. Физәлиә Рәхимованың Тәңкәбикәһе - робот, ҡысҡыра-илай-һыҡтай, ләкин үҙенең кешелек бәхетен һәм мөхәббәтен йолҡоп-йолҡоп ауыныҙ мәскәй - йола тамағына тығырға мәжбүр. Был сараһыҙлыҡ һәм тәҡдири ҡоллоҡ уның тирәһендәге бөтә нәмәне һәләк итә.

Шиғранә күңелле Аҡъегет образы халыҡта бер хыял һәм бәхет йондоҙо булып йәшәгән күңел сафлығы, ирек һөйөү, мөхәббәткә тоғролоҡ хистәренән туҡылған. Шундай улдары һәр халыҡты таҙарта һәм яҡтырта. Ләкин был образды сәхнә киңлегенән айырмау, патетик тон биреп яһалмалыҡ күгенә осороп ебәрмәҫ өсөн актер Фәнил Ҡарасуринға бөтә оҫталығын һалырға тура килә, уның хәле Аҡбуҙатты тотоп менгән Урал батырҙың хәләтенә оҡшаш. Эпик батырыбыҙ ҙа идеаль сафлыҡ һәм батырлыҡ, тоғролоҡ һәм фиҙакәрлек өлгөһө булған ҡанатлы толпарҙы тотоп менер өсөн ул талап иткән бөтә сифаттарға ирешергә ынтыла һәм шулай булып ҡала. Аҡъегет образының илаһи ныҡлығы, шиғранә аҡылы бөтә спектаклдең таянысына әйләнгән. Актер Фәнил Ҡарасурин башҡарған был образдың республика сәхнә сәнғәтендә үҙ урыны буласаҡ.

Мостай Кәрим ижад иткән трагедияла күктәр ергә төшөргән үлсәүҙең ике яғына, ике табағына ултырып, уны сайҡап бәүеткән, дер һелкеткән ике образ бар. Бер яҡта - Диуана, икенсе табаҡта - Дәрүиш. Донъя бизмәнен кинәт тайшандырып, уйнатып ебәрә торған көс тап шул образдарҙа. Диуана менән Дәрүиш ролдәре аҡ һәм ҡара төҫтәрҙә бутап-болғап ебәрә алырлыҡ ҡөҙрәткә эйә булырға тейеш. Бына сәхнәгә Диуана килеп сыға һәм ДЦП ауырыуына хас ым-хәрәкәттәр менән үҙенә иғтибарҙы йәлеп итә. Ләкин классик роль өсөн был ғына етмәй, тамашасы Диуананың "бизмәнде һелкетерлек" ҡөҙрәтен көтә. Көсөргәнешлек арта. Диуана (Марат Зөбәйеров) менән Дәрүиш (Илһам Рәхимов, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы) араһында күҙгә күренмәгән алыш башлана, Тәңкәбикә менән Аҡъегетте мәңгегә айыра торған упҡын аша өҙөлөргә торған ҡыл тартыла. Диуананың феноменаль тәҡдиренә спектаклдең программкаһындағы ғәжәп фотоһүрәт ишара яһай: ай тотолған мәл уның күҙ ҡараһында сағыла! Диуана донъяла-ғы бөтә ғәҙелһеҙлекте татыр өсөн, аҡ-ҡара көстәрҙең мәңгелек көрәшенә шаһит булыр өсөн тыуҙы микән ни, уның йәне йыһан бизмәненә аҡ көстәрҙе ҡотҡарыр өсөн һалынды микән ни?

Хәйер, Диуана бизмән табағында яңғыҙ түгел. Шәфәк образы бар бит әле. Ул - бәхетле ҡатын һәм әсә булып йәшәргә бөтә хоҡуғы булған, әммә шәфәк нуры кеүек һүнгән шат һәм саф йөрәк, өмөт шәмен ҡабыҙған һәм мөхәббәтте яҡлап-курсып ауаз һалған берҙән-бер самими йән. Шәфәк - трагедияла бөтә ғәйепте үҙ өҫтөнә алған, башҡалар өсөн ҡорбан булырға әҙер берҙән-бер персонаж. Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрында иҫ киткес һығылмалы, йәне-тәне менән үҙ бәхете өсөн көрәшсе булып ҡалған һылыу һәм ҡыйыу Шәфәк образы тыуҙы (актриса Әлиә Зарипова). Уның үҙенең йәшәү һәм һөйөлөү бәхетен - ирен икенсе ҡатын менән ҡалдырып, артына дуғалай шаҡарылып сәхнәнән сығып китеүе - ғәжәп тәрән мәғәнәле күренеш: һуңғы һулышына хәтле көрәшә, бәхете өсөн айҡаша ҡатын-ҡыҙ.

Спектаклдәге ҡатын-ҡыҙҙар роле шәлкемендә сағыу сәскә - Зөбәржәт роле (актриса Гөлйемеш Ибраһимова). Ҡыйғыр ҡоштай ирекле дала ҡыҙы, йөрәгендә ғорур мөхәббәт утын дөрләткән Зөбәржәт һөйгәненең тоғрологон һәм һөйөүҙең хаҡлығын күрә. Ошо бәхете уға ифрат ауыр һынауҙы үтергә көс бирә, башы юғары, рухы сатнамаҫ булып ҡала.

Классик әҫәрҙә уйнау - ҙур мәктәп. Шулай уҡ һынау һәм шәп форсат, йәғни үҙеңде күрһәтергә мөмкинлек. Стәрлетамаҡ башҡорт театры актеры Ырысҡол бей образын да яңыса күрһәтте (Илфир Баймырҙин, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы). Баҙыҡ һәм һендерен уйнаусы актерҙың һәр бер хәрәкәте был сәхнәләрҙә күҙ алдында ҡалырлыҡ картиналар тыуҙырҙы. Ул сос һәм тос хәрәкәтле, ләкин сәбәләнмәй һәм ҡабаланмай ғына уйнауы бөтә ваҡиғаларҙы дөрләтеп урынынан ҡуптара.

Тәңкәбикәнең кесе улы Ишмырҙа роле (актриса Сәлимә Солтангәрәева) әҫәрҙә ырыуҙы киләсәктә етәкләр ирегет булырҙаймы-юҡмы, тигән һуңғы һорауҙы ҡуйҙыра. Ғәмһеҙ бала сағы аяныслы фажиғәләр менән осланған ир бала йөрәге ҡанһырап мәжнүн булған үҙ әсәһенә ни күрһәтер? Ялғанлыҡ һәм тәкәбберлек битлектәрен кейеп, бер иш ҡиәфәтле ҡарттар - ҡатып ҡалған йолалар - был илде ниндәй "яҡшылыҡ юлына" илтер?

Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театры Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһын ҡуйыр өсөн режиссер Сергей Потаповты Яҡут-Саха иленән саҡырған. Саха иләрҙә эпик жанрҙы сәхнәләштереү генә түгел, "тереләй" башҡарыу йолаһы һаҡланған. Яҡуттарҙың батырҙар тураһында эпостарын көйләп һөйләүселәре - олонхосуттары егерменсе быуаттағы утыҙынсы йылдар мәхшәрендә, сәйәси репрессияларҙа мөғжизә менән иҫән ҡала. Шул иҫән ҡалған өс олонхосут арҡаһында улар олонхоны башҡарыу мәктәптәрен тергеҙә һәм республиканың олонхо институты ЮНЕСКОның материаль булмаған мәҙәни байлыҡтар исемлегенә инә. Мостай Кәрим трагедияһында бәйән ителгән дала риүәйәте лә шундай уҡ сәсәндәр һәм аҡындар тарафынан ижад ителгән халыҡ ижадына ауаздаш. Тик эпик әҫәрҙә башҡарыусылары ғына сүпләп юҡ ителгән. Бары тик шағир-фәйләсүф Мостай Кәрим менән гениаль режиссер Шәүрә Мортазинаның бер булып тергеҙеүе арҡаһында был тарих бөтә илде уятырлыҡ фәлсәфәүи оран, ҡоллоҡҡа ләғнәт булып сәхнәгә сыға. Сергей Потапов үҙ илендәге тере эпосҡа тере мөнәсәбәтте, эпик әҫәрҙең саф һәм ҡеүәтле ҡылыстай үткер көсөн ҡулланып, башҡорт сәхнәһендә "Ай тотолған төндә" әҫәрен яңыса яҡтырта алған. Трагедия яңы сәхнәлә яңы образдар, яңы сағыу ролдәр менән иркен, киң һулыш ала. Ана, уның биҙәлеше иҫ киткес ябай һәм күркәм (сәхнә мөдире Илгиз Ҡашҡаров). Сәхнә төбөндә күктәге ҙур ай уртаға ярылды, ләкин кителеп осоп төшмәне... Бәлки, ул ай ярсыҡтары бер заман киренән ялғаныр. Кешенең күҙ асып йомғандай ғына тойолған ғүмер арауығында ай яңынан терелеүен ул күрер тә өлгөрмәҫ, ләкин донъя бизмәненең аҡ табағын тултырған көстәр йәшәй бит әле...

"Сергей Потапов был трагедияны бөтөнләй икенсе төрлө юл менән сәхнәләштерергә тәҡдим иткәйне, әммә беҙ унан классик спектакль ҡуйыуын һорадыҡ. Классик юл менән тыуған спектаклебеҙ бар, беҙҙең актерҙар ҙа, бөтә театр ҙа быға бик шат. Ләкин... данлыҡлы режиссер, эпик олонхо иле егете беҙҙең тыныслыҡты алып ҡайтып китте: беҙ бығаса булмаған яңы ысул менән "Ай тотолған төндә" күрергә хыялланабыҙ", - шулай тиҙәр Стәрлетамаҡ театрында. Донъя бизмәне йәнә бәүелеп китте! Беҙҙең дә шундай "айҙы" күрге килә. Тиҙерәк насип булһын!

**Кинйә МӘЗИТ.**

✓ *Эйәр аҫтына һалынған кейеҙҙең өҫтө сепрәк менән ҡапланып, уныһының дүрт яғының да ҡырҙарына төҫлө туҡыма киҫәктәренән мөгөҙлө ҡуҫҡар, өсмөйөш-шаҡмаҡтар һалына.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ӘФЛИСУН АША...

■ Йәшел сәй радиациянан һаҡлай, тигән фекергә килгән Ҡытай ғалимдары. Улар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә ике шәшке йәшел сәй эсеү, 1 әфлисун ашау компьютер экрандарынан таралған зарарлы нурҙарҙан һаҡлай. Йәшел сәйҙең япраҡтарында башҡа файҙалы элементтар менән бер рәттән, радиация тәьҫиренә ҡаршы торған матдәләр бар. Ә әфлисун яман шеште булдырмай, иммунитетты ла күтәрә.

■ Тормошта булған хәлдәрҙе тик насар яҡтан ғына күргән һәм киләсәктә лә ыңғай ваҡиғалар булырына ышанмаған кешеләрҙе тәбиғәт үҙе шулай итеп яралтҡан имеш. Америка ғалимдары асыҡлауынса, быңдай кешеләрҙең баш мейеһендә невропептид Y (NPY) тип аталған үҙенсәлекле матдә түбән кимәлдә. Мичиган штаты университетының ғилми хеҙмәткәрҙәре тикшеренеү барышында организмға тап ошо матдә молекулаларының етешмәүе һөҙөмтәһендә кеше стресҡа ҡаршы көрәшмәй. NPY кимәле нәҫелдән килеүен иҫәпкә алғанда, билдәле әйтемдә "пессимист булып тыуалар" тип үҙгәртеп әйтеү ҙә дөрөҫ буласаҡ, тип яҙа Лондондың "Дейли телеграф" гәзите.

■ Сит ил ғалимдары балдың файҙаһын лаборатор ҡомаҡтарҙа тикшереп ҡарауҙы дауам итә. Һуңғы тикшеренеүҙәрҙә ҡомаҡтарҙы ике төркөмгә бүлеп, уларҙың бер төркөмөнә - сахароза, икенсеһенә бал ашатҡандар. Сахароза ашаған ҡомаҡтарға ҡарағанда бал диетаһында ултырған ҡомаҡтар әүҙемерәк булған. Улар ҙур кинлектә аҙашмайынса йөрөй алған, юлындағы кәртәләрҙе лә тиҙерәк еңгән. Медицина күҙлегенән ҡарағанда, балда еңел үҙләштерелә торған углеводтар һәм биологик ҡиммәтле матдәләр күп.

■ Британияның Бристоль университеты ғалимдары әйтеүенсә, баланың аҡыл ҡеүәһе үҫеше уның бәләкәй сағында нисек туҡланыуына бәйле. Өс йәшкә тиклем "зарарлы" аҙыҡ-түлек ашаған балаларҙы биш йылдан һуң тикшереп ҡарағандар һәм интеллект коэффициентының тиҫтерҙәренекенә ҡарағанда түбәнерәк булыуын асыҡлағандар. Ғалимдар әйтеүенсә, өс йәшкә тиклем балаға "дөрөҫ" аҙыҡ биреү мөһим, сөнки мейе йәшәүҙең тәүге өс йылында әүҙем үҫешә.

■ Кеше организмында ҡартайыу һөҙөмтәһендә барған үҙгәрештәргә ҡаршы дарыу уйлап табылған. Уның авторы, Мәскәү дәүләт университетының биоинженерия һәм биоинформатика факультеты деканы Владимир Скулачев әйтеүенсә, был дарыу уның коллегалары тарафынан күптән түгел асылған SkQ1 антиоксиданты нигеҙендә эшләнгән. Был матдә күҙәнәктәрҙең энергетик үҙәгенә йыйылып, кислород ҡушылмаларының әүҙем формаларын нейтраллаштыра. Күп һанлы тәжрибәләр күрһәтеүенсә, был дарыу ҡартайыу билгеләре булған йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын, остеопороз һәм ревматоидлы артрит, яман шештең ҡайһы бер формаларына дауа буласаҡ.

■ Көнөнә бер киҫәк ҡара шоколад ашау йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән ауырыу хәүефен кәметә, тип белдерә Потсдамдағы Аҙыҡ-түлек институты ғалимдары. Улар һигеҙ йыл дауамында 35 йәштән алып 65 йәшкә тиклемге 20 мең кешене тикшереп, көнөнә 6 грамм ҡара шоколад ашау инфаркт һәм инсульт кисереү хәүефен 27-48 процентҡа түбәнәйтеүен асыҡлаған.

АФАРИН!

# СЕРГЕТЫШТЫҢ СЕРЕ...

## ярыш атын күҙҙән һаҡлауҙа

**(Башы 1-се биттә).**

- Эйе, был беҙҙең Бөрйән ағинәйҙәренең оҙайлы ваҡытҡа тәғәйенләнгән "Сергетыш" исемле проектыбыҙҙың тәүге емештәре булды һәм уға райондың бөтә ауылдары ҡатын-ҡыҙҙарын да тиерлек йәлеп иттек, - тип һөйләп китте ағинәйҙәр етәксеһе. - Проект республикабыҙҙа быйыл үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерлек маҡсатына ярашлы төҙөлдө һәм бер нисә этаптан торған план буйынса тормошҡа ашырылып килә. Күҙҙән бирле алыҫ ауылдарға сығып, йә булмаһа ағинәйҙәрҙе район үҙәгендәге "Кәрәҙ" клубыбыҙҙың эш бүлмәһенә саҡырып, оҫталыҡ дәрестәре үткәреп, башҡорт аттарын байрамса биҙәү алымдары өйрәтелде. Һәр хәлдә, аттар өсөн һәм көнкүрештә кәрәк-ярау итеп ҡулланыла торған сергетыштың биҙәлешендә һәм ҡулланылышында атабабаларыбыҙҙың йәшәйеш-булмышы, тормош фәлсәфәһе сағыла икәнен күрһәтергә теләнек. Фольклориадала ҡатнашасаҡ сит ил ҡунаҡтарына күрһәтерлек нәҙәкәтле, зауыҡлы, ҡулланылышта файҙалы, беҙҙең ерлеккә хас милли матди һәм рухи байлыҡты тергеҙеү, аңлатыу, таратыу маҡсатына яраҡлы проектыбыҙ тормошҡа ашыр, гүзәл баһа алыр, тигән өмөттә ҡалабыҙ. Бөрйән ағинәйҙәренең был хеҙмәте ҡышҡы ат ярышы, һабантуйҙарҙы биҙәүҙә, төрлө бәйгеләрҙә башҡорт аты исемен яҡлауҙа ҙур өлөш индереренә, халыҡтың иғтибар үҙәгендә булырына иманыбыҙ камил.

➔ **Биҙәү сәнғәтенең был тармағының тарихи ерлеге бармы һуң? Булһа, ул ниндәй сығанаҡтарға нигеҙләнгән? Һәр хәлдә, хәҙерге быуын был турала мәғлүмәтле түгел тип әйтергә була бит...**

- Матурлыҡҡа ынтылыш кешенең кейгән кейеме менән генә сикләнмәгән. Башҡорттар үҙҙәренең тоғро дуҫы булған атты, ат өҫтөндәге эйәрҙе, йүгәнде, уҡ-һаҙаҡтарын биҙәүгә лә ҙур иғтибар биргән. Улар XX быуат урталарына тиклем һаҡлана, ҡулланыла килгән әле. Борон башҡорт егеттәре сынъяһау кейенеп, шәп аттарға менеп, ҡыҙ күҙләгәндәр. Яҙғы эштәрҙән һуң үткәрелгән йола байрамы һабантуй ҙа ат ярыштарынан башҡа үткәрелмәгән. Кейәүгә бирелгән ҡыҙ атаәсә йортонан буласаҡ ғаиләһенә оҙатылғанда уның өҫтөндәге кейеме һәм атының күркәмсәһе, сергетышы, баурылығы, арҡалығының бер иштән сағыу төҫтәрҙә биҙәлгән булыуы уның нәҫел-нәсәбенең затлы, бай, тәрбиәле булыуын күрһәтеп тороусы бер билдә булған. Башҡорт халыҡ йыры "Кара юрға"ла был күренеш бигерәк тә асыҡ сағылдырылған.

Беҙ ошо проектҡа тотонорҙан алда районыбыҙҙың Килдеғол ауылында йәшәүсе 80 йәшлек Шәрәфуллина Ғәлимә Фауариз ҡыҙының үҙ ҡулдары менән эшләгән сергетыш өлгөһө менән таныштҡайныҡ. Ошо ауылдың китапханасыһы Нәзилә Исҡужинаға өлгөнөң күсермәһен эшләп, беҙҙең менән уртаҡлашҡан өсөн бик тә рәхмәтлебеҙ.

➔ **XIX быуатта халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен төплө өйрәнеп, яҙып ҡалдырған рус ғалимдары араһынан С.И. Руденконың да башҡорттар тураһындағы китабында ат егеү кәрәкяраҡтарының атамалары тәфсирләнгәнен беләм. Шулар араһында бөрйәндәрҙең сергетышы тураһында фотоһүрәте менән бергә ярайһы уҡ ентекле мәғлүмәт бар. Ғөмүмән, сергетыш атамаһы тураһында һеҙгә нимә билдәле?**

- Аттың эйәре аҫтына һалына торған был әйберҙең атамаһына килгәндә, уның ҡушма һүҙ икәнен күрәбеҙ. Үңдек өҫтөнән эйәр аҫтына һалына торған тышлы кейеҙ ул серге. Был һүҙҙең сығышы тураһында, ысынлап, үҙем дә ныҡ эҙләндем. Кейеҙҙе ҡаплар өсөн төрлө төҫтәге йөн ептән туҡылған буй һыҙыҡлы балаҫ та ҡулланылғаны билдәле. Шулай уҡ кейеҙҙең өҫтөнән ҡалынса туҡыма ла ҡулланылған һәм ул да тигеҙ рәттәргә теҙеп һалынған биҙәктәрҙән һырылған. Буй-буй һырлы биҙәктәрҙән ҡоролғанға күрә, *һыр>сыр>сер* сылбыры аша серге һүҙенең тамырын төҫмөрләргә булалыр, теләм. Һарыҡ йәки кәзә йөнөнән баҫтырылған кейеҙҙең тышына һалына торған япма булыуын аңлата инде һүҙъяһалышта ҡатнашыусы икенсе тамыр - *тыш.* Был турала башҡа фараздар булһа, гәзит уҡыусылар үҙҙәренең фекерҙәре менән уртаҡлаша ала, әлбиттә.

➔ **Хәҙер сергетышҡа һалынған биҙәктәргә күсәйек. Уларҙың ниндәйҙәре ҡулланылған, башҡарыу техникаһы ниндәй?**

- Эйәр аҫтына һалынған кейеҙҙең өҫтө сепрәк менән ҡапланып, уныһының дүрт яғының да ҡырҙарына төҫлө туҡыма киҫәктәренән мөгөҙлө ҡуҫҡар, өсмөйөш-шаҡмаҡтар һалына. Ғәҙәттә, сепрәк япма үҙе кейеҙҙән бәләкәйерәк алынып, кейеҙҙе ҡайма булып күренеп тора. Оҫталар уны һәр кем үҙенсә текһә лә, сергетыштың биҙәктәре бер үк техникала башҡарылған. Сергетышты ҡыҙыл, һары йөн йәки ебәк ептәр менән сигелгән мәңгелек донъя тәғәрмәсен һынландырыусы *түнәрәк*, йыһан тамғалары *ҡояш-ай-йондоҙҙар* ҙа биҙәй. Шулай уҡ дүрт мөйөшөн суклап ҡуйғандар. Ҡат-ҡат ҡатлаған ептең бер осон ҡуша төйөп, икенсеһен һалындырып ҡуйған биҙәүес булараҡ, *суҡ* үҙе лә символ рәүешен үтәй. Беренсенән, ул күп булғанды белдерә. Икенсенән, күптең бергә ойошоуын, берҙәмлектә тупланыуҙы аңлата.

Һәр ҡатын-ҡыҙҙың оҫталығынан, ни кимәлдә етеш-бай булыуынан сығыптыр инде, сергетыштар бит берберенен һис ҡабатламай. Ләкин шул уҡ ваҡытта өсмөйөш, шаҡмаҡ формаһындағы ҡырҡындыларҙы ҡулланғанға күрә, бөтә сергетыштарға ла хас оҡшашлыҡ, дөйөм уртаҡлыҡ та күҙгә ташлана. Шул биҙәктәрҙең быуындан-быуынға күсә килгән ҡабатланыуында сер ҙә бар. Бик күп эҙләнеү, уйланыуҙарҙан һуң үҙем дә аңғармаҫтан мөғжизәгә юлыҡтым мин сергетыштар менән мауыҡҡан. Мәҫәлән, "һалмалап туралған" төрлө төҫтәге бүҫтау ҡырҡындылар теҙелгән аҡ буй юлаҡтарҙы ҡарайыҡ. Шаҡмаҡ йәки ромб - бер урында ныҡынған, ныҡлыҡ тамғаһы булараҡ, *ер, ер эшкәртеү* символы икәне билдәле. *Аҡ юл* образы, ғөмүмән, башҡортта киң таралған төшөнсә. Аҡлыҡ, сафлыҡ - ирекле, тыныслыҡҡа, рухиәтҡә ынтылыш билдәһе булһа, күп һанлы ваҡ ҡына шаҡмаҡтар кешенен был фани донъяла, йәғни ер тормошона тәғәйен йылдары, үтелгән аҙымдары һанын һынландыралыр, тип фаразларға мөмкин.

➔ **Ә япманың үҙәгендә уның дүрт яғын да уратып алған эрерәк тигеҙ өсмөйөштәрҙән торған һыҙаттар нимәне аңлата?**

- Түбәһе *өҫкә ҡаратылған өсмөйөш* - ут символы ул, сөнки *ялҡын телдәре* өҫкә йүнәлеп яныусы. Тағы быңдай өсмөйөш *тау* түбәһенә оҡшаш булғанға күрә, бейеклеккә артылыу, *рух* күтәренкелегенә ишара булһа, бер үк ваҡытта *ир-ат* тамғаһы (фаллос!) ла ул. Уларҙың тигеҙ бер рәткә теҙелеүе - йөнтәйгән яҡларға, ҡурсаларға һәр саҡ әҙер, кәрәк саҡта, яуға күтәрелер өсөн сафҡа баҫҡан ғәскәр символын күҙ алдына килтерә... Ошо өсмөйөштәрҙең бер рәткә ярашлап теҙелеүенән һәр икеһенең араһында түбәһе аҫҡа ҡарай йүнәлгән, йәғни *түңкәрелгән өсмөйөштәр* хасил була. *Һыу* йыйылып ятыр *сокор-саҡыр*, уйһыу ерҙәр төҫмөрләнә уларҙа. Аллаһы Тәғәлә Ер йөҙөн үҙе шулай яралтҡан да баһа! Эзотерик әҙәбиәттә өсмөйөштән был төрө ер йөҙөндә йәшәү сығанағы булған *һыу, һауыт-һаба*, шулай уҡ *ҡатынҡыҙ* символы булараҡ ҡабул ителгән. Ике төрлө өсмөйөштәрҙән бер сафта үҙ-ара ярашып, төҙәк биҙәк-һыр барлыҡҡа килтереүе йәшәүҙең нигеҙендә ятҡан ут һәм һыу, ир-ат һәм ҡатынҡыҙ башланғысы, фанилыҡтың һәм рухиәттең мәңге айырылмаҫ ҡиммәттәр икәнен аңлатыусы фәлсәфәнең сағылышы ул. Сергетыштың иң ситенә



✓ *Һарыҡ йөнөнөң файҙаһы тураһында фән кимәлендә лә яҡлаған мәғлүмәт билдәле булды бит инде. Йәштәрҙең ғаилә ҡорғас та магазиндан алынған холофайбер өҫтөндә йоҡлап, ниндәй зыян күргәнен дә аңларға ваҡыттыр.*











теҙелә торған тағы бер өҫмөйөш төрө бар. Улары шаҡмаҡлап ҡырҡылған туҡыманы дүрткә бөкләүҙән хасил булған өсмөйөштәр - бетеү тип атала. Бетеүҙең һаҡлау, ҡурсалау өсөн тәғәйенләнеше барыбыҙға ла билдәле.

**➔ Шулай итеп, Йыһанда әҙәм һәм башҡа йән эйәләре йәшәй алырлыҡ шарттар тыуҙырыуҙа ҡатнашҡан ер-ут-һыу-һауа-арауыҡ символдарының серен һаҡлаусы монаят икән дә был сергетыш! Тимәк, ҡыҙ баланы кейәүгә әҙерләгәндә, яңы ғаилә барлыҡҡа килгәндә йорт ҡаралтыһы, уртаҡ түшәк итеп ҡулланыласаҡ сергетыштың үҙендә күпме йәшерен код (ҡот!) һалынған буламы?**

- Әлбиттә! Ниндәй ҙур милли рухи байлығыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ беҙ ошо әйберҙе ҡулланылыштан сығарып! Сөнки ошондай символдарҙың күрер күҙгә күренмәҫ тәьҫирен тойоуҙан да, зауыҡ менән биҙәлешенән ҡәнәғәтләнеүҙән дә мәхрүм булғанбыҙ бит. Ата-бабаларыбыҙҙың 70-80 йәштә лә өсөнсөгә-дүртенсегә йәш кәләш алырға һәләте булғанына ул замандарҙа кейеҙҙә йоҡлауҙары булышлыҡ итмәгән тиһеңме? Һарыҡ йөнөнөң файҙаһы тураһында фән кимәлендә лә яҡлаған мәғлүмәт билдәле булды бит инде. Йәштәрҙең ғаилә ҡорғас та магазиндан алынған губка-холофайберҙар өҫтөндә йоҡлап, ниндәй зыян күргәнен дә аңларға ваҡыттыр. Юғиһә, ир-аттың иртә йәштән кәрһеҙ ҡалыуына, ҡатын-ҡыҙҙарҙың түлһеҙлегенә ни сәбәп? Тәбиғи йөндөң йылыһын тойоп, кейеҙ өҫтөндә йоҡлаған сабый балаларҙың тәндәре нисек тын алып, ял итеүе тураһында ла айырым һүҙ сурытырға булыр ине - быныһы инде үҙе бер тема.

**➔ Әммә һүҙҙе йомғаҡлар алдынан ошо проектты тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашҡан ауыл ағинәйҙәрен дә телгә алып үтһәгеҙ ине...**

- Иҫке Собханғол ауылынан "Кәрәҙ" клубында шөғөлләнеүсе ағинәйҙәр - Миңлегөл Галина, Алһыу Ҡолдәүләтова, Гүзәл Абдуллина, Рәхимә Ишдәүләтова, Мәҙинә Барыйова кеүек оҫталарҙың эшендә бер ниндәй етешһеҙлек тапмаҫһың! Уларҙың эштәрен, ғәҙәттәгесә, күргәҙмәлә конкурстан тыш ҡына ҡулланабыҙ. Уларға етә Байназарҙан Нәсимә Наурыҙбаева ай эсендә эргәһенә йәштәрҙән бер төркөм йыйып (Гөлсибәр Наурыҙбаева, Гөлнәзирә Үтәғолова, Гөлфинә Зәйнуллина), бик матур сергетыштар өлгөрттө. Шуға күрә уларҙың эштәре әлеге бәйгелә беренсе урынға лайыҡлы тип табылды. Әтек ағинәйҙәре Әлфирә Иманғолова, Көнһылыу Сөләймәнова, Сәғилә Атанғолованың сергетыштары шул ауылға ғына хас боронғо биҙәктәр ҡулланылыуы менән айырылып торҙо. Беҙ был йүнәлеште лә хуплайбыҙ, ошоға бәйле уларҙың хеҙмәте икенсе урын менән баһаланды. Өсөнсө урынға Килдеғол ағиәйҙәрен ойоштороусы Вәсилә Көмөшбаеваның һәм Фирҙәүес Ваһапова, Айһылыу Билалова, Гүзәл Исхакова,Сәғиҙә Искужинаның сергетыштары лайыҡ булды.

Әбйәлил районы менән сиктәш Ҡолғона ауылыныҡылар сергетышлы кейеҙ баҫыу йолаһын һаҡлап килеүселәрҙең береһе. Хатта улар был йоланы сәхнәләштереп күрһәтеп тә дан алған коллектив әле ул. "Сергетыш" проектын тормошҡа ашырыуҙа Ғилминур Уразаева (Яңы Мөсәт), Ғилминур Йомағужина (Аҫҡар), Сәриә Минһажева (Ғәлиәкбәр), Гөлдәр Сөләймәнова (Кейекбай) кеүек ағинәйҙәрҙең уңышҡа өлгәшеүе - уларҙың ҡул эштәрен өмә менән башҡарыуға һәм кис ултырыу йолаһын тергеҙеүгә бәйләнгән. Оҫталыҡ дәрестәре алып, ҡорамаға яңы тотоноп киткән Янһары (Минзәлә Баймырҙина), Иҫке Монасип (Клара Әмирханова), Яңы Усман (Фәлиә Ҡунаҡбаева) ауылдарының эштәре лә иғтибарға лайыҡ ине. Иң алыҫ Ҡотан (Хәмдиә Ситдиҡова), Ырғыҙлы (Нәфисә Айытова) ауылдары ағинәйҙәренең дә был юлы ситтә ҡалмауы ҡыуаныслы күренеш булды. Һөҙөмтәлә, ил төкөрһә, күл була тигәндәй, ниндәй матур тамашаға әйләнде быйылғы ҡышҡы ат ярыштары Бөрйәндә!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Эйе, ярыштарҙа ҡатнашҡан ир-егеттәр ағинәйҙәр тыуҙырған матурлыҡҡа ғына түгел, ә элекке йола буйынса аттарының сергетеш япмалар аҫтында тороп, бәйге алдынан кеше күҙе тейеүҙән һаҡланыуына ла ҡыуанғандыр. Бәйгенең дәррәү, имгәнеү-маҙарһыҙ үтеүенә ошо ла тәьҫир итмәй ҡалмағандыр, моғайын. Һөҙөмтәгә килгәндә, ҡышҡы көндә ат сабыштырырға йөрьәт иткән һәр ир-егет еңеүсе инде. Шуға ла уларҙың һәр береһе тейешле баһаһын алды. Ә төрлө номинацияларҙағы ярыштарҙа Ғәҙел Ишҡолов, Саринтай Айсынов, Мирфат Әбйәлилов, Фидан Мәзитов, Ринат Мөхәмәтҡужиндарҙың исеме беренселекте яулағандар араһында аталды. Командалар араһынан Байғаҙы ауыл биләмәһе егеттәренә етеүсе булманы.**

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 10-сы идея: Эш йондоҙҙарҙа түгел

Һин үҙеңде уңышлы кеше тип иҫәпләйһеңме, әллә киреһенсәме? Тормошоңда уңыштар күберәкме, әллә уңышһыҙлыҡтармы? Тормошҡа ашмаған өмөттәребеҙ, хыялдарыбыҙ хаҡында, пландарыбыҙҙың селпәрәмә килеүе тураһында уйланғанда, беҙ, ғәҙәттә, "яҙмыш" тигәнен ғәйепләргә, ҡәһәрләргә, "шулай уңмаған кеше булдым инде" тип зарланырға күнеккәнбеҙ. Ләкин был бит мәғәнәһеҙлек, шулаймы? Ҡайһы берәүҙәр "Был минең бәхетле (бәхетһеҙ) йондоҙом" ти. Үҙ етешһеҙлектәребеҙҙе йәшереү өсөн шулай тибеҙ беҙ. Беҙҙең уңышҡа өлгәшеү-өлгәшмәүебеҙ аңыбыҙҙың тәбиғәтенә бәйле. Миненсә, Шекспир быны "Юлий Цезарь" әҫәрендә бик яҡшы әйтеп биргән, унда: "Кеше - үҙ яҙмышының хужаһы. Хаталарыбыҙ өсөн, ҡәҙерле Брут, беҙ үҙебеҙ ғәйепле, ә йондоҙҙар түгел", - тиелә. Беҙ, ябай кешеләр, үҙ уйҙарыбыҙҙы һәм ғәмәлдәребеҙҙе ғүмеребеҙҙең ижади маҡсатына буйһондора алһаҡ, ысынында үҙ яҙмышыбыҙҙың хужаһы була алабыҙ. Ләкин күптәребеҙ үҙенең Эске Оҙатыусыһына ышана һалып бармай бит. Ә күнеккән иҫке ғәҙәттәренә таяныуҙы өҫтөн күрә. Эштәре алға бармаһа, Алланы, тәҡдирҙе, йондоҙҙарҙы йәки беҙҙең файҙаға эшләмәгән башҡа кемдәрҙелер ғәйепләй башлай.

Әгәр үткәндәрҙе ҡабаттан ентекләп күрһәтеү мөмкин булһа, ҡайҙа һәм ҡасан яңылышҡаныбыҙҙы күргән, дөрөҫ юлды, хаталы йондоҙ артынан эйәреп киткән нөктәне аныҡ билдәләй алған булыр инек. Төҙәтә алмаҫлыҡ хатаны ҡайҙа яһағаныбыҙҙы күрер инек. Аңлайһығыҙмы, беҙ дөрөҫ юл һайлай алыр инек. Алла беҙгә ғүмер бүләк иткән, әммә Ул шулай уҡ ихтыяр ирке лә бүләк иткән.

Беҙ бары кешенең ғүмерен яҡшырта йәки юҡҡа сығара алырлыҡ нәмәне һайлайбыҙ ғына. Һәм һайлаған юлыбыҙҙы теләгән ваҡытта үҙгәртә һәм яңы тормош башлай алабыҙ. Үҙ проблемаларында йондоҙҙарҙы ғәйепләмә, Бөйөк Ысынбарлыҡ образына ярашлы барлыҡҡа килтерелгән зат булараҡ түгел, ә ихтыярһыҙ эш иткәнең өсөн үҙеңде ғәйеплә. Тик хаталарыбыҙ һәм уңышһыҙлыҡтарыбыҙ ғына яҙмыш тәгәрмәсенә таяҡ тыға, ә беҙҙе торорға йәки зыян эшләргә маташыусы бер ниндәй ҙә һуҡыр Тәҡдир юҡ.

Бөйөк Ысынбарлыҡ беҙҙең тормошобоҙҙо изгелектең формалашып бөтмәгән субстанцияһына ҡушыу әмәлен эҙләй. Ниндәй шарттарҙа ла беҙ үҙебеҙҙә изгелек элементтары йөрөтәбеҙ һәм, әгәр һин шарттарҙы ҡабул итһәң, тәҡдир тип аталған нәмәнең ҡапыл артта тороп ҡалыуын һәм донъяла барыһы ла яҡшы барыуын асыҡларһың. Ни өсөн? Сөнки үҙ юлыбыҙҙы һәр ваҡыт беҙҙе дөрөҫ ҡарарға илтеүсе Дөйөм Аҡыл юлына ҡуштыҡ. Беҙ мохтаж булған нәмә - ул Эске Оҙатыусыбыҙға асылыу, аңлау һәм ярҙамсыл булыу.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

ҮӘТ ӘЙ!

# ҠОРОТ - ҠИММӘТЛЕ ТАШ



**1938 йылдың саҫҡау һыуығында 30 гектар ерҙә урынлашҡан, ике рәт сәнскеле сым менән уратылған саман бараҡтарға тәүге этап тотҡондар килә. Ундағы 17-се ҡатын-ҡыҙ лагеры халыҡ телендә "АЛЖИР" (Акмолинский лагерь жен "изменников" родины) тип йөрөтөлә. Был урын ысын мәғәнәһендә концлагерь була. Йәйгеһен 40 градуслыҡ эҫелә һәм ҡышҡыһын 40 градуслыҡ һыуыҡта ҡатын-ҡыҙҙар яңы килеүселәр өсөн бараҡтар төҙөй, яланда эшләй. Һуңынан был урында музей төҙөлә.**

1990 йылда Ҡаҙағстанға "АЛЖИР"ҙың элекке тотҡоно Гертруда Платайс килгәс, музей хеҙмәткәрҙәренә беренсе тапҡыр ҡаҙаҡтарҙы нисек һәм ҡасан күреүе хаҡында бәйән итә. Ҡышҡы иртәләрҙең береһендә тотҡон ҡатын-ҡыҙҙар Жаланаш күленән ҡосаҡлап ҡамыш ташый. Бер аҙ ваҡыттан һуң ярҙа ҡарттар һәм балалар күренә. Улар ололарҙың әмере буйынса ҡатындарға таштар ырғыта башлай. Һаҡсылар балаларҙың был ҡылығынан ҡыҙыҡ табып, рәхәтләнеп көлә, йәнәһе, күрәһегеҙме, һеҙҙе Мәскәүҙә генә түгел, хатта бында, Ҡаҙағстанда ла яратмайҙар...

Ҡатындар ғәрлектәренән, ололар, балаларығыҙҙы нимәгә өйрәтәһегеҙ, тип эстән генә рәнйей. Көндәрҙең береһендә көндәлек норманы - 40 көлтә ҡамыш бәйләр өсөн тәүлегенә 17-20 сәғәт эшләп йонсоған Гертруда ваҡ ташҡа яңылыш баҫып, ҡолап китә. Тирә-яҡта ваҡ таштар... Ҡапыл уның танауына һөт һәм эремсек еҫе килеп бәрелә. Аслыҡтан миктәгән ҡатын бер ташты ауыҙына ҡаба... Уныһы ауыҙын күптән онотолған тәм менән тултыра. Ҡатын таштарҙы йыйып, баракка алып ҡайта. Ундағы әсир ҡаҙаҡ ҡатындары был таштарҙың ҡояшта киптерелгән тоҙло ҡорот булыуын әйтә.

Баҡтиһәң, ҡаҙаҡ халҡы, башҡа ысул тапмағас, үҙҙәренең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйып, һаҡсыларҙа бер ниндәй шик тыуҙырмайынса, тотҡондар менән һуңғы ризыҡтары - ҡорот менән бүлешкәндәр икән. 1930 йылда аслыҡ һәм күп юғалтыуҙар кисергән халыҡ нисек тә булһа бахыр ҡатындарҙы астан үлеүҙән һаҡлап ҡалырға тырышҡан. Шулай уҡ һаҡсыларҙан йәшереп кенә улар ҡамыш төбөнә ит киҫәктәре, талҡан, йәймә, ҡорот ҡалдырыр булған.

"Барлыҡ лагерҙар ҙа насар, әммә Ҡаҙағстан лагерҙарында күптәр ябай ҡаҙаҡтар ярҙамында тере ҡалды", - ти элекке әсир.

Гертруда Платайс иҫтәлектәрен тыңлағандан һуң тарих уҡытыусыһы Раиса Голубева "Курут - драгоценный камень" тигән шиғыр яҙа.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**



### 2 МАРТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.10 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45, 15.50 Т/с "Тайны следствия-14". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Женские секреты". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.40 Т/с "Сваты-6". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Соседи". [12+]
11.00 Итоги недели (на рус. яз.).
11.45, 21.15 Специальный репортаж. [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.
13.30 "Бәхетнамә".
14.30 "Бай". [12+]
15.00, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.15 "Гора новостей".
17.45 Интервью. [12+]
18.00 Ради добра. [6+]
18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Дорожный патруль. [16+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Теге өсәү. [12+]
23.30 Ҡустәнәс. [12+]
0.00 Х/ф "Третий лишний". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]
5.00 "Наука 102". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 3 МАРТА
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.10 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Право на справедливость. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45, 15.50 Т/с "Тайны следствия-14". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Женские секреты". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.40 Т/с "Сваты-6". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 20.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Соседи". [12+]
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 0.00 Яңылыҡтар.
13.30 "Бәхетнамә".
14.30 "Дорога к храму". [0+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Тайм-аут. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 "Криминальный спектр". [16+]
21.00 Хоккей. "Авангард" (Омская область) - "Салават Юлаев" (Уфа). 1/4 финала восточной конференции.
0.30 Х/ф "Полное превращение". [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]
5.00 Историческая среда. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 4 МАРТА
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.10 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
3.40 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45, 15.50 Т/с "Тайны следствия-14". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Женские секреты". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.40 Т/с "Сваты-6". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00 "Автограф". [12+]
11.15, 18.00 100 имен Башкортостана. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.
13.30 "Бәхетнамә".
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "АйТекә!" [6+]
15.45 "Сыйырсык". [0+]
16.15 "Гора новостей".
16.30 Автограф. [12+]
17.15 Учим башкирский язык. [0+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Инцидент-репортаж. [12+]
20.45 Честно говоря. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "У нас есть папа!" [16+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Тамарис". [12+]
5.00 "Наука 102". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 5 МАРТА
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.10 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
3.40 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45, 15.50 Т/с "Тайны следствия-14". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Женские секреты". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.40 Т/с "Сваты-6". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30, 23.00 Автограф. [12+]
10.30 100 имен Башкортостана. [12+]
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.00, 22.30 Яңылыҡтар.
13.30 "Бәхетнамә".
14.30, 23.30 Земляки. [12+]
14.45 Ради добра. [6+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 "Гора новостей".
17.15 Учим башкирский язык. [0+]
18.30 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омская область). 1/4 финала восточной конференции.
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.45 "Весело живем!" [12+]
0.00 Х/ф "55 градусов ниже нуля". [12+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]
5.00 Историческая среда. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

### 6 МАРТА
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 2.45 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф Премьера. "Маноло Бланик: Мальчик, который придумал туфли для ящериц". [18+]
1.50 На самом деле. [16+]
3.30 Про любовь. [16+]
4.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45, 15.50 Т/с "Тайны следствия-15". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Елена Степаненко приглашает. "Ирония весны". Большой юмористический концерт. [16+]
23.20 Х/ф "Счастливая жизнь Ксении". [12+]
03.50 Т/с "Сваты-6". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00 Д/ф "Насекомые, или миллиметровый мир". [12+]
11.15, 18.00 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30, 21.00, 6.00 Башкорттар. [6+]
13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.
13.30 Үткән гүмер. [12+]
14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей".
16.30 Детей много не бывает. [6+]
17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
19.00 Әлләсе... [12+]
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Инцидент-репортаж. [12+]
20.30 Юлдаш+. [12+]
22.00 "ВасСәләм!" [16+]
23.00 Караоке по-башкирски. [12+]
23.30 Уфа. Живое. [12+]
0.15 Х/ф "Алеша". [12+]
2.00 Спектакль "Аҫылйәр". [12+]
4.15 Автограф. [12+]
4.45 "Весело живем!" [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]

### 7 МАРТА
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым. [12+]
11.00, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.30 Д/с "Теория заговора". [16+]
14.20 Х/ф "Три плюс два". [0+]
16.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.20 Большая игра. [16+]
0.30 Х/ф "Восстание планеты обезьян". [16+]
2.15 На самом деле. [16+]
3.10 Про любовь. [16+]
3.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
09.30 Пятеро на одного.
10.20 Сто к одному.
11.10 Смеяться разрешается.
13.40 Х/ф "Клуб обманутых жён". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.40 Х/ф "Служебный роман". [0+]
23.55 Х/ф "Проще пареной репы". [12+]
03.25 Х/ф "С приветом, Козаностра". [12+]

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 19.00 Яңылыҡтар.
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.15 Посмотрим... [6+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 Преград. Net. [6+]
10.30 "Книга сказок". [0+]
10.45 "Сыйырсык". [0+]
11.00 "Апчхи". [0+]
11.15 "Байтус". [6+]
11.30 Бирешмә. Йырла. [6+]
12.00 Ҡустәнәс. [12+]
12.30 Автограф. [12+]
13.00 История одного села. [12+]
13.15 Земляки. [12+]
13.30 Хазина о хазине. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омская область). 1/4 финала восточной конференции.
19.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Ради добра. [6+]
20.45 Полезные новости. [12+]
21.00 По сути дела... [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Караоке по-башкирски. [12+]
22.30 Аҙна яңылыҡтары.
23.15 "Курай даны". [12+]
1.30 Х/ф "Учитель музыки". [16+]
3.00 Итоги недели (на баш. яз.).
3.45 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]
5.30 Д/ф "Насекомые, или миллиметровый мир". [12+]

### 8 МАРТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.40, 6.10 Т/с "Комиссарша". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.50 Х/ф "Блондинка за углом". [0+]
8.20 Х/ф "Будьте моим мужем". [6+]
10.10 Х/ф "Девчата". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Королева бензоколонки". [0+]
13.40 Х/ф "Приходите завтра..." Кино в цвете. [0+]
15.35 Премьера. "Будьте счастливы всегда!" Большой праздничный концерт в Государственном Кремлевском дворце. [12+]
17.10 Х/ф "Весна на Заречной улице". Кино в цвете. [12+]
19.00 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
21.00 Время.
21.25 Х/ф "Красотка". [16+]
23.40 Х/ф Премьера. "Наравне с парнями". [12+]
1.20 На самом деле. [16+]
2.15 Про любовь. [16+]
3.00 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Х/ф "Укради меня". [12+]
08.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
09.30 "Устами младенца".
10.20 Сто к одному.
12.00 Х/ф "Служебный роман". [0+]
15.30 "Петросян и женщины-2020". [16+]
18.00 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
01.30 Х/ф "Непутёвая невестка". [12+]

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Яңылыҡтар.
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]
9.30 Моя вершина. [12+]
10.00 "Бейс". [0+]
10.15 "АйТекә!" [6+]
10.30 Атай ҡыҙы... [0+]
11.15 "Йырлы кәрәҙ". [0+]
11.30 "Гора новостей". [6+]
11.45 Бирешмә. Профи. [6+]
12.30 Аҙна яңылыҡтары. [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 "Дорога к храму". [0+]
16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]
17.00 "Йөрәгемдә асам". Концерт Алины Давлетхановой. [12+]
18.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
19.00 Полезные новости. [12+]
19.15 Лидеры региона. [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 Теге өсәү. [12+]
21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
23.00 "Красная кнопка". [16+]
23.45 "Восхваление красоты". [12+]
1.45 Х/ф "Ночь в Париже". [16+]
3.30 Спектакль "Женская сюита". [12+]

✓ *Башҡортостан граждандарлыҡ йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фондының төп маҡсаты республикала граждандарлыҡ йәмғиәтен үҫтереүсе, социаль әһәмиәтле проекттарҙы тормошҡа ашырыусы ойошмаларға ярҙам күрһәтеү.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЙӘМӘҒӘТСЕЛӘР ӘҮҘЕМЛЕГЕ...

## ошолай ҙа баһалана ала

**Халыҡ хәлен хан белмәҫ, тиһәләр ҙә хан замана күптән үткән һәм хөкүмәт етәкселәре илдәге торошҡа, көнкүрешкә ҙур иғтибар бүлә. Рәсәй Президенты Владимир Путиндың дәүләт һәм граждандарлыҡ йәмғиәте союздаштар булыуын күптән белдереүе, һуңғыһын үҫтереүҙең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алыуы ла быны дәлилләй. Бөтә ил кимәлендәге үҙгәрештәргә эйәреп, быltыр республика Башлығы Радий Хәбиров Указы менән БР Граждандарлыҡ йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды булдырылғайны, ниһайәт, ошо көндәрҙә ойоштороу эштәре тамамланды. Ойошманың төп эш йүнәлештәре, маҡсаты һәм халыҡҡа ниндәй файҙа килтерәсәге тураһында фонд генераль директоры Люцие Юлиева, уның урынбаҫары Роман Низамутдинов, фондтың конкурс комиссияһы рәйесе урынбаҫары Зөлфиә Ғайсина, БР Йәмәғәт палатаһы аппараты етәксеһе Шамил Вәлиев һөйләне.**




Башҡортостан граждандарлыҡ йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фондының төп маҡсаты республикала граждандарлыҡ йәмғиәтен үҫтереүсе, социаль әһәмиәтле проекттарҙы тормошҡа ашырыусы коммерция булмаған ойошмаларға ярҙам күрһәтеү. Был йәһәттән элек республиканың төрлө дәүләт структуралары үҙ өлкәһенә ҡараған йүнәлештәрҙе ҡурсалаһа, яңы ойошма уларҙан ошо йөктө үҙ өҫтөнә ала, берҙәм үҙәк булдыра. Фондтың конкурс комиссияһы рәйесе урынбаҫары, Кеше хоҡуҡтары һәм граждандарлыҡ йәмғиәте институттарын үҫтереү советының яуаплы сәркәтибе Зөлфиә Ғайсина әйтеүенсә, Рәсәйҙә граждандарлыҡ әүҙемлеген үҫтереү өҫтөнлөклө, әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, социаль селтәрҙәр аша бер ниндәй ҙә яҡшы үҙгәрештәргә килтермәгән кире әүҙемлек күберәк күҙәтелә. Быны ошо күренеште ынғайға көйләү, халыҡҡа ысын ярҙам күрһәтерҙәй проекттарҙы дәүләт ярҙамында тормошҡа ашырыу кәрәк. Яңы ойошманың роле ошонан ғибәрәт тә инде.

- Республикала 5 меңдән ашыу йәмәғәт ойошмаһы теркәлеү үткән, әммә әүҙем эшләгәндәре бик һирәк. Беҙ коммерция булмаған ойошмаларға проекттарын грантҡа тәҡдим итеү процедураһын еңеләйтергә-беҙ: барыһы ла БР Гранттары электрон платформаһы аша эшләнә, проекттарҙы яҙыу формаһы, баһалау критерийҙары, отчет биреү системаһы берҙәм була. Быйыл 3 конкурс ойоштораБыҙ, уларҙа дәүләт һәм муниципаль учреждениелар ғына ҡатнаша алмай. Беренсеһе Башҡортостандың коммерция булмаған ойошмалары араһында граждандарлыҡ йәмғиәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән проекттар конкурсы, унда рәсми теркәлеү үткән һәм бер йылдан артыҡ эшләгән, бер ниндәй ҙә бурыстары булмаған ойошмалар ҡатнаша ала. Икенсеһе Башҡортостандың дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлау, үҫтереүгә йүнәлтелгән проекттар конкурсы, унда коммерция булмаған ойошмаларҙан тыш, бюджет учреждениелары (мәктәптәр, уҡыу йорттары һ.б) ҡатнаша. Өсөнсө конкурс 7-се Федераль Законда күрһәтелгән социаль йүнәлешле коммерция булмаған ойошмалар өсөн, - тип аңлатма бирҙе фондтың генераль директоры Люцие Юлиева.

Конкурстар иғлан ителгәндән алып ҡатнашыусы телеүселәр 20 көн эсендә заявка бирә, бөтә кәрәкле документтарын теүәлләп һала. Ойоштороусылар ошо арауыҡ үткәндән һуң 8 көн дауамында ебәрелгән документтарҙың тулылығын тикшерә. Махсус булдырылған комиссияның беренсе ултырышында конкурсҡа үткән проекттарҙың исемлеге раҫлана һәм улар эксперттар ҡарамағына бирелә. Бер проектты икенән дә күберәк эксперт баһалауы бар, барыһы ла объектив ҡарар сығарыу өсөн эшләнә. Улар 14 көн дауамында эшләй, шунан 3 көн эсендә еңеүселәрҙең исемлеге элемә. Артабан инде дәүләт ярҙамын алған ойошмаға килешеү төҙөгәндән 12 ай эсендә проектын тормошҡа ашырыу бурысы йөкмәтелә. Шуныһы мөһим, 2019 йылда (конкурстан 12 айға тиклем алда) ниндәйҙер проектты тормошҡа ашырған ойошма тотонған аҡсаһын тулыһынса кире ҡайтарыу өсөн конкурсҡа заявка бирә ала һәм еңеүселәр исемлегенә үтһә, финанс ярҙам бүленә. Үткән йылдарҙағы тәжрибәләргә таянғанда 3 конкурсҡа дөйөм 650 тирәһе ғариза килер тип көтөлә, һәр конкурстан 50-60 проект ярҙам аласаҡ.

Әйткәндәй, грант өсөн дәүләт бюджетынан бөтәһе 140 миллион һум аҡса бүленгән. Ә бына конкурстар йүнәлешенә килгәндә, улар унау: "Социаль хеҙмәтләндереү, социаль ярҙам һәм айырым категория граждандарын яҡлау", "Ғаилә, әсәйлек, атайлыҡ һәм балалыҡты яҡлау", "Йәштәр сәйәсәте", "Граждандар хоҡуҡын, граждандарлыҡ йәмғиәте институттарын яҡлау", "Һаулыҡ һаҡлау, сәләмәт тормош, физик культура һәм спортты пропагандалау", "Фән, мәғариф һәм аң-белем таратыу", "Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, унайлы йәшәү шарттары тыуҙырыу һәм хайуандарҙы һаҡлау", "Милләт-ара һәм диндәр-ара татыулыҡты нығытыу", "Мәҙәниәт, сәнғәт һәм тарихи хәтерҙе һаҡлау", "БР дәүләт телдәрен һәм БР халыҡтары телдәрен мәҙәниәт, мәғариф, фән, киң мәғлүмәт саралары һәм йәштәр сәйәсәте өлкәһендә, шулай уҡ башҡорт телен Башҡортостандан ситтә һаҡлау һәм үҫтереү". Быуа ошо тормошобоҙҙоң төрлө мөһим өлкәләрен үҙ эсенә алған йүнәлештәрҙең һәр береһе буйынса 10-ға тиклем проект тематикалары тәҡдим ителә.

- Грантҡа проект тәҡдим иткәндә "Кемгә яҡшылыҡ эшләйбеҙ?" тип уйларға һәм тәү сиратта ниндәй аудиторияға йүнәлтелеүен аныҡ билдәләргә кәрәк. Беҙ проектлы фекерләүгә күсәбеҙ, сағыштырмалы һөҙөмтәһе булырға тейеш эштең. Мәҫәлән, ниндәйҙер пионерҙарҙы катокка алып барҙың икән, шунда төшкән фотоларың булһын, - тине БР Йәмәғәт палатаһы аппараты етәксеһе Шамил Вәлиев, ҡатнашырға теләүселәргә кәңәштәрен еткереп. - Грантҡа бирелгән проекттарҙы баһалағанда шулай уҡ уртаҡ финанслау ҙа мөһим: тик дәүләт аҡсаһын ғына тотонмайһың, ә башҡаларҙан ярҙам алаһың. Ситтән килтерелгән һум, йәки ниндәйҙер хеҙмәттәрҙе бушлай алыу, ирекмәндәрҙе йәлеп итеү, тимәк, проекттың масштаблығы иҫәпләнәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр коммерция булмаған ойошма үҙе эшләгән йүнәлештә, тәжрибәһе бар өлкәлә республиканың киләсәге, халыҡтың мәнфәғәте өсөн кәрәкле проекттарын бойомға ашырып, тип көтә БР Граждандарлыҡ йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды етәкселеге. Был яңы мөмкинлектәр менән бигерәк тә муниципаль коммерция булмаған ойошмалар актив файҙаланыр, республиканың төпкөл төбәктәрендә лә халыҡҡа ярҙам барып етер, тигән теләктә улар.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 март "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кирияхк), монодрама. 12+

**4 март "Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс 16+

**5 март "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**6 март "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+

**7 март "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+

**8 март "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 март Премьера! "Уйҙарымдан ғына югалма..."** (И.Ғиләжев, З.Бураҡаева) Р. Гюнтекин әҫәре буйынса музыкаль драма. 12+

**7 март Премьера! "Уйҙарымдан ғына югалма..."** (И.Ғиләжев, З.Бураҡаева) Р. Гюнтекин әҫәре буйынса музыкаль драма. 18.00 12+

**8 март "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский) мюзикл. 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 март "Маша и медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер) 12.00, 14.00 0+

**"Почему весна красна?"** (В. Щербакова) 16.00 0+

**7 март "Вот так репка!"** (И. Токмакова) 12.00, 14.00 0+

**"Почему весна красна?"** (В. Щербакова) 16.00 0+

**8 март "Три поросенка"** (С. Михалков) 12.00, 14.00 0+

**"Почему весна красна?"** (В. Щербакова) 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**6 март** филармонияның камерный оркестры һәм йырсылары концерты (О. Ҡасимов) 6+

**7 март Музыку слушаем вместе"** 11.00, 13.00 0+

**8 март "Эхо Уфы"** төркөмө концерты. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Март (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (7) дүшәмбе | 6:34 | 8:04 | 13:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 3 (8) шишәмбе | 6:32 | 8:02 | 13:30 | 17:24 | 18:54 | 20:24 |
| 4 (9) шаршамбы | 6:29 | 7:59 | 13:30 | 17:26 | 18:56 | 20:26 |
| 5 (10) кесе йома | 6:27 | 7:57 | 13:30 | 17:28 | 18:58 | 20:28 |
| 6 (11) йома | 6:25 | 7:55 | 13:30 | 17:30 | 19:00 | 20:30 |
| 7 (12) шәмбе | 6:22 | 7:52 | 13:30 | 17:32 | 19:02 | 20:32 |
| 8 (13) йәкшәмбе | 6:20 | 7:50 | 13:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# УҠЫУСЫҒА ЯРАҠЛАШМАЙЫМ

**Йыл башында абруйлы 60 йәшлек юбилейын билдәләгән яҙыусыбыҙ, гәзитебеҙҙең тоғро дуҫы һәм авторы Әхмәр Үтәбайға өс һорау менән мөрәжәғәт иттек. Уның яуаптары ҡыҫҡа, әммә үҙе кеүек тәрән мәғәнәле һәм йөкмәткеле булып сыҡты.**



**Үҙ замANы уҡыусыһына ҡыҙыҡлы булыу өсөн тырышырға тейешме яҙыусы? Һеҙ замандаштарығыҙға яраҡлашаһығыҙмы?**

- Уҡыусыға ҡыҙыҡлы булырға тырышыу ҮҘмаҡсатҡа әүерелһә, ундай әҙәбиәттең кәрәге ҡаламы? "Тыштағы зыярат" тигән романы баҫылғас, Дамир Шәрәфетдинов: "Хәҙерге уҡыусы был әҫәрҙән үҙенә бер нәмә лә таба алмаясаҡ. Был роман киләсәк өсөн яҙылған..." - тигән бик ҡыҙыҡлы фекер әйткәйне. Был һаҡ, Дамирса, йәғни ҡатайса, киҫкенерәк яңғыраһа ла, ундағы күп кенә фекерҙәрем киләсәктәге уҡыусы өсөн дә һалынған. Уҡыусыһына яраҡлашҡан яҙыусыны мин флюгерға тиңләйем. Ел ҡайҙа - флюгер шул яҡҡа. Миненсә, яҙыусының фекере, идеяһы елде, уның йүнәлешен барлыҡҡа килтерергә тейештер. Үҙемә килгәндә, мин Чацкий кеүек яуап бирәм: "Хеҙмәт итергә шатмын, әммә ярамһаҡланыуҙан ытырғанам..."

**Ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙ прозаһы айырыламы? Бөгөн ир-егеттәр тарафынан тарихи, сәйәси проза онотола төштө һымаҡ, барыһы ла социаль темалар менән генә ҡыҙыҡһына кеүек. Шулай уҡ әҫәр геройҙары итеп күберәк ҡатын-ҡыҙҙар һайлана, хатта ир-егет яҙыусылар ҙа бары тик ҡатын-ҡыҙ образын ғына һүрәтләй һымаҡ. Тарихи китаптарҙы кем яҙыр икән?**

- Әҙәбиәттә "ҡатын-ҡыҙ прозаһы", "ирҙәр прозаһы" тигән бүленеш юҡ. Шиғриәттә бар ундай шартлы атамалар: шағир һәм шағирә. Прозаик төшөнсәһе бар, әммә "прозайка" юҡ. Әммә ҡатын-ҡыҙҙар ижад иткән проза әҫәрҙәре барыбер ҙә айырылып тора. Был иң беренсе нәүбәттә ҡатын-ҡыҙҙың әсәлек сифатынан килә торғандыр. Ә ирҙәр донъяһында күп осраҡта "аяуһыҙлыҡ" хөкөм һөрә. Һорауҙа ысын ирҙәр прозаһы юҡлыҡҡа ишара яһалғаны һиҙелә. Миненсә, был күренеш әҙәбиәттә генә түгел, йәмғиәттә лә көслө кеше позицияһын ҡатын-ҡыҙҙар яулай барыуының бер сағылышылыр. "Хатта ир-егет яҙыусылар ҙа бары тик ҡатын-ҡыҙ образын ғына һүрәтләй һымаҡ..." тиһең. Был бит етди симптом, сөнки һәр бер яҙыусы, шағир үҙ әҫәрендә иң беренсе нәүбәттә үҙен һүрәтләй. Был хәл Буранбай Исҡужиндың "Ир һымаҡ ҡатындар яҡшымы, тип тә, ҡатын һымаҡ ирҙәр яҡшымы, тип тә һорама..." тигән шиғри юлдарын иҫкә төшөрә.

**Ниндәй етди әҫәрҙең дә төп линияһын мөхәббәт тарихы тотоп тора. Беҙҙең әҙәбиәт шул тойғоно, хисте артыҡ идеаллаштырып ебәрмәгәнме? Бер яҡлы ғына түгелме башҡорт әҙәбиәтендәге һөйөү һүрәтләнеше?**

- Һөйөү тойғоһонаң бер яҡлы булыуы менән дә беҙ бәхетлебеҙҙер ул. Бер ир кеше үҙенең мөхәббәт тарихын һөйләгәйне. Ул ғүмере буйына бер нескә затты яратып йөрөгән. Улар бергә уҡыған, аҙаҡ мәктәпте тамамлағас, ҡыҙ ситкә сығып киткән, егет үҙ юлы менән атлаған. Әммә тәүге һөйөүенә ҡарата тойғоһо уны тормошҡа, ижадҡа дәртләндергән. Бер мәл улар ауылда классташтар осрашыуында күрешкән. Ҡатын иренән айырылған, ир кеше лә яңғыҙ икән. Классташтар осрашыуы уларҙың уртаҡ таңы менән тамамланған. Уның ҡарауы, ирҙең ғүмере буйы йөрәгендә йөрөткән мөхәббәт хисе лә юҡҡа сыҡҡан. Миненсә, ҡауышыу менән тамамланмаған мөхәббәт хисе генә татлы булалыр. Һөйөү тойғоһо бер ҡатлы булыуы менән дә татлы һәм мөҡәддәс. Әгәр ҙә инде ике кеше араһындағы тойғоға иҫәп, әйбергә мөнәсәбәт, аҡса килеп инһә, әҫәрҙәге ваҡиғалар ҡуйыра, тик һөйөү тойғоһона ышаныс кәмейҙер. Сөнки беҙҙең халыҡта элек-электән был тойғоға ҡарата ихлас мөнәсәбәт һаҡлана килә. Ә инде "бер яҡлы"лыҡҡа килгәндә, яҙыусының тормошто ниндәй кимәлдә белеүе мөхәббәт күренештәрен һүрәтләгәндә лә сағылыш табалыр...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әхмәр Үтәбай оҙаҡ йылдар "Киске Өфө" гәзитендә эшләне, әле лә ул гәзиттән айырылғаны юҡ һәм уҡыусыларыбыҙ уның тос фекерҙәрен, фәлсәфәүи уйланыуҙарын, кинәйә-ишараларын әленән-әле уҡып тора. Шуға ла әлеге юбилейы айҡанлы һүҙ әйттерергә тигән ниәтебеҙгә ҡарата бына ошондай ҡыҫҡа ғына интервью менән сикләнеүе аңлашыла торғандыр. Талантлы ҡәләмдәшебеҙгә тағы бер тапҡыр уңыштар, ижади үрҙәр теләйбеҙ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**яҙып алды.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

## ҮӘТ, НИШАНА!

**Күҙенең ағы төшә** - тәмле бешкән ашынды кинәт килеп ингән кеше күрһә, тәм иткеһе килһә, шул ашҡа нығ ҡарай. Әгәр тәмләтмәһән, уның күҙ ағы тама һәм аш тәмһеҙләнә. Шуға күрә ашты кешенән йәлләргә ярамай. Был - үҙе бер һабаҡ.

**"Бук бизмән"** - бөтә эште, әйберҙе, ризыҡты үлсәп, иҫәпләп, ҙур хаҡ ҡуйып һатыулашҡан әҙәмгә әйтәләр. Унан йомош алырмын тимә - ятып үлер.

**Нишана** - бер ниҙе лә уйлай белмәй, нисек етте шулай эшләүсе әҙәм. Уға арба ни ҙә, сана ни тип тә әйтәләр, ышаныcһыҙ тиҙәр.

**Әҙәм йораты** - бар нәмәһен рәтләп кеймәй, булған ризығын тәрбиәләп ашамай, ә кәүҙәһе, теле менән кеше. Шуға уны әҙәм йораты - кешегә оҡшаш шәүлә тиҙәр.

**Әшкәртелгән тышҡары** - һәр эште кәрәгенән артыҡ эшләп зыян килтерә, аҙыҡ-түлекте түгеп-сәсеп бөтөүгә әйтелә.

**Әснәкет** - ашап туймай, үҙәге ас, күпме ашаһа ла ҡаҡ һөйәк кеше.

**Күкрәк арбаһымы ни** - был арба оҙон ағас, бүрәнә ташыу өсөн тарыраҡ һәм оҙон эшләнә. Нәҙек оҙон кешене лә шуға тиңләйҙәр. Хәҙер ундай арба юҡ, техника күп бит.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БӘХЕТЕҢ БУЛМАҺА,

### алтының да баҡырға әйләнә

Аҡыллыға һүҙ әйттем - уйланы ла белде; аҡылһыҙға һүҙ әйттем - тыңланы ла көлдө.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер ирҙең ҡатыны үлһә, алтмыш ҡатын ҡыуана, бер ҡатындың ире үлһә, алтмыш ҡатын ҡайғыра.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше даны киң таралған бер табипҡа килә һәм шулай ти: "Минең ҡатыным бик һимеҙ, ул шул тиклем күп ашай, мин уны туйҙырырлыҡ хәлдә түгелмен. Өйҙәге бөтөн йыһаздарҙы уның өсөн махсус эшләтергә тура килде, ишеккә лә һыймай башланы. Уның менән кеше араһына сығыу ҙа оят хәҙер. Ҡатынымды бирәнлектән дауала, зинһар, мин һиңә күп итеп аҡса түләрмен..." Табип ризалаша һәм уларҙың йортона килә. Ҡатынға бер генә күҙ һала табип һәм уның иренә былай ти: "Юҡ, мин һинән аҡса алмайым, сөнки һинең ҡатыныңды дауалау мөмкин түгел. Ҡатының дауалап булмай торған ауырыу менән сирләй, тап йөҙ көндән ул был донъяны ҡалдырасаҡ. Һин хәҙерҙән үк ҡатыныңды ерләү кәрәк-яраҡтары әҙерләй башла". Табип быларҙың барыһын да тыңлап торған ҡатынға ла өндәшә: "Һиндә оҙаҡламай ҡот осҡос ауыртыныуҙар башланасаҡ. Ирең һинең ыңғырашыуыңа түҙә алмаҫ, моғайын, һәм һинән ҡасып китергә лә мөмкин..." Шулай ти ҙә табип, өйҙән сығып китә.**

**Ошо һөйләшеүҙән һуң йөҙ көн үткәс, ҡала хакимы табипты судҡа саҡыра. Баяғы һимеҙ ҡатындың ире уны мутлыҡта һәм шарлатанлыҡта ғәйепләгән икән. "Һин был ҡатынға йөҙ көндән үлем киләсәге тураһында юрағайыңмы?"- тип һорай табиптан хаким. "Был кеше ысынлап та ҡатынын бирәнлектән дауалауымды үтенде, - ти табип. - Мин ул тәҡдим иткән аҡсанан баш тарттым - шулай булғас, мин ниндәй мут булайым. Ә инде минең диагноздан һуң ҡот осҡос һимеҙлектән интеккән ҡатын бынауындай һомғол буйлы ҡатынға әйләнгән икән, минең шарлатанлығым нимәлә һуң?" "Һинең диагноздан һуң ҡатыным көн-төн илаunion, ашау-эсеүҙән баш тартты. Ә мин уны ерләй торған кәрәк-яраҡтар һатып алып, әллә күпме аҡсамды әрәм иттем", - ти ир кеше. "Хәлде төҙәтеп була, - ти табип. - Әйҙә, улайһа, мин һинең ҡатыныңды тағы ла һимертәм һәм ул ысынлап та бик тиҙ теге донъяға китәсәк. Ул саҡта һин һатып алған әйберҙәр ҡулланыу табасаҡ". "Юҡ, юҡ!" тип ҡысҡырып ебәрә ир менән ҡатын. Хаким да был һөйләшеүҙе ишетеп йылмая һәм табипҡа: "Дуҫҡай, һин беҙҙең өйгә лә килеп сыҡ әле, минең ҡатынды ла һимеҙлектән арындыр", - ти һәм табипты ла, уны хөкөмгә тарттырыусыларҙы ла сығарып ебәрә..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
28 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 4007
Заказ - 163/02